ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

15-21 март (буранай) 2024

№10 (1103)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Ибн Фаҙландың "Рисәлә"һен...

Ирандар беҙгә бүләк итте



6

Бейеү - ул халыҡ күңеле



8-9

Башҡорт фольклорына...

ҡыҙыҡһыныу тыуҙырам



11

Рамаҙан айы мөбәрәк булһын!



12-13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыуҙы аңлы, зыялы дуҫтарыбыҙҙы 2024 йылдың икенсе яртыһы өсөн дә баҫмабыҙға ваҡытынан алда 873 һум 12 тингә яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Ә 1 апрелдән, ғәҙәттәгесә, почта хаҡтарҙы тағы арттырасаҡ икәнен дә белеп ҡуйығыҙ. Ошо арауыҡта гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ҺӨЙӨНСӨ!

**Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров ҡул ҡуйған Указға ярашлы, республикала Башҡорт дәүләт ҡурайсылар ансамбле ойошторола.**



Был хаҡта Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Радий Фәрит улы белдерҙе һәм: "Мәҙәниәт буйынса советка Башҡорт дәүләт ҡурайсылар ансамблен ойоштороу тураһында бик күп мөрәжәғәттәр килде. Беҙ мәҙәниәт министры Әминә Ивнәй ҡыҙы менән үҙебеҙҙең мөмкинлектәрҙе барланыҡ. Ҡурайсылар мәктәптәре лә, көслө артистар ҙа күп. Бөгөнгө көндә республиканың Башҡорт дәүләт ҡурайсылар ансамбленең тыуған көнө тип иҫәпләргә мөмкин",- тип билдәләне Радий Хәбиров мәҙәниәт министрына Республика көнөндә ошо ансамбль сығыш яһай алһын өсөн тиҙ арала коллективты тупларға ҡушты.

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ




## БАШ МЕЙЕНДӘ...

### ялҡауландырма!

**Мин совет осоронда белем алғанмын. Бөгөн дә үҙемдең балаларға, ейәндәргә мәктәптә уҡығанда уҡ ятлаған шиғырҙарҙы тасуири итеп һөйләй алам. География, донъялағы илдәр буйынса төрлө мәғлүмәтте лә уларға ҡарағанда күберәк беләм. Юғары уҡыу йорттарын да тамамламағанмын, эшемдә лә юғары вазифалар биләмәнем. Әммә донъяны танып-белеү йәһәтенән мейемдә тупланған ошо ғилем арҡаһында бөтөн темаға ла әңгәмәләшә алам. Быны мин барлыҡ мәғлүмәтте ҡағыҙҙан уҡыу, әле һаман да гәзиттәр менән дуҫ булыу менән дә аңлатам.**

(Дауамы 3-сө биттә).

## ТӨРЛӨ ТӨҪЛӨ КҮПЕРҘӘР

**Өфөнөң 450 йыллығы байрамы уңайынан ҡаланың төп тиҙлекле магистрален биҙәү эштәре планлаштырыла, тип хәбәр иттеләр баш ҡала хакимиәтенән.**

Быҡаса Зәки Вәлиди урамы башланған урындағы күпер - зәңгәр, Октябрь революцияһы урамы менән киҫешкән урындағыһы йәшел төҫтә ине. Тағы ла алты юл үткәргесте төҫлө биҙәлеш көтә:
- СССР-ҙың 50 йыллығы урамындағыһы - ҡыҙыл,
- Минһажев урамындағыһы - алтынһыу-баҡыр,
- Революцион урамындағыһы - ҡыҙғылт-һары,
- Киров урамындағыһы - зәбәрҙжәт,
- Һалле урамындағыһы - йәшел-зәңгәр,
- Әй урамындағы юл үткәргес - шәмәхә төҫөндә буласаҡ.

Билдәләнеүенсә, был күперҙәр ҡаланы биҙәп кенә ҡалмаясаҡ, водителдәр өсөн ориентир ҙа булып торасаҡ.

## ПЕНСИЯ АРТА

**Рәсәй Хөкүмәте социаль пенсияларҙы 7,5 процентҡа арттыра. Социаль пенсияларҙы индексациялау йыл һайын 1 апрелдә үткәрелә.**

Индексация күләме уҙған йылда пенсионерҙарҙың йәшәү минимумы үҫеше темптарынан сығып иҫәпләнә, тип хәбәр итә ил Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәте. Социаль пенсиялар страховка пенсияһын иҫәпләү өсөн тейешле раҫланған стажы булмаған граждандарға түләнә. Бынан тыш, ул инвалидтарға һәм ҡараусыһын юғалтҡандарға ла түләнә. Шулай уҡ 1 апрелдән граждандарҙың айырым категорияларының дәүләт пенсия тәьминәте күләме 7,5 процентҡа күтәрелә. Улар иҫәбендә: һуғышта алған яраларынан инвалид булып ҡалған хәрби хеҙмәткәрҙәр һәм ирекмәндәр; Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусылар; радиация йәки техноген һәләкәттәрҙә зыян күргән граждандар.

## ӘСӘЛЕК КАПИТАЛЫН...

**Өс фракция депутаттары Дәүләт Думаһына икенсе бала өсөн Әсәлек капиталын 1 миллион һумға тиклем арттырыу тураһында закон проектын индерҙе.**

Беренсе бала өсөн Әсәлек капиталы 756,7 мең һум булырға тейеш. Үҙгәрештәр 2025 йылдың 1 февраленән көсөнә инер тип күҙҙә тотола. Әгәр ата-әсәләр быға тиклем Әсәлек капиталын алмаған булһа, өсөнсө балаға ла 1 миллион һум бирергә тәҡдим ителә. Хәҙер беренсе балаға Әсәлек капиталы - 631 мең һум, икенсеһенә 833 мең һум тәшкил итә.

Аңлатмалы яҙыуҙа билдәләнеүенсә, Әсәлек капиталы башлыса торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға йүнәлтелә, шуға субсидияны арттырыу талап ителә. Владимир Путин Федераль йыйылышҡа Мөрәжәғәтнамә менән сығыш яһағанда Әсәлек капиталы һәм Ғаилә ипотекаһы программаларын 2030 йылға тиклем оҙайтырға тәҡдим итте.

## АУЫЛҒА ҠАЙТҺАҢ...

**Рәсәйҙә 2025 йылдан "Ауыл мәҙәниәт хеҙмәткәре" программаһы эшләй башлай. Владимир Путин Федераль Йыйылышҡа Мөрәжәғәтнамә менән сығыш яһағанда ошо хаҡта белдерҙе.**

"Ауылға, бәләкәй ҡалаға эшкә ҡайтҡан белгескә бер тапҡыр 1 миллион һум аҡса түләнә, ә Алыҫ Көнсығышта, Донбаста һәм Рәсәйҙең яңы төбәктәрендә был сумма ике тапҡырға күберәк - 2 миллион һум була", - тине Президент. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостанда "Ауыл мәҙәниәт хеҙмәткәре" программаһы 2021 йылдан тормошҡа ашырыла. Ул илдә түгеһе һәм әлеге ваҡытта иң яҡшыһы булып тора.

12+

ИШАРА

# ТАШ МЕНӘН АТҠАНҒА...

## аш менән яуап ҡайтар



**Хәҙерге заман күҙлегенән ҡарағанда, һинә таш атыусыға аш менән яуап ҡайтарыу нисектер мәхлүк хәлендәге кешенең халәте һымаҡ тойола. Әммә әйтемдең төпкәрәк һалынған мәғәнәһенән юллаһаң, уның кешелекте һәләкәттән һаҡлап ҡалыр милли идеяға торошло мәғәнәһен дә тойомлайһың. Улай ғына ла түгел, кешелекте һәм милләтте, асылда, тап ошо ҡағиҙә йәшәтә кеүек.**

Был әйтемдең "Эт менән эт булма", "Алйот еңдем, аҡыллы ҡуйҙым, тиер" тигән варианттары ла бар. Уларҙың араһында "Таш менән атҡанға аш менән яуап ҡайтар" тигәне һәлмәгерәк барыбер. Ни өсөн тигәндә, был әйтемгә бер-берененә ҡапма-ҡаршы позицияла тороусы ике кешене, ике яҡты, ике дәүләтте, ике илде яраштырыу, мөнәсәбәттәрен көйләү механизмы һалынған. Һәр бер таш атыуға яуап итеп таштар яуҙырыла башлаһа, кешелек һәләкәткә осрау ғына түгел, күптән инде еребеҙ күсәренән ысҡынып киткән булыр ине.

Ә бит илебеҙ, милләтебеҙ өсөн тап ошондай һәләкәттең сигенә килеп еткән, ҡыл осонда торған мәлдәребеҙ күп булды. Тарихыбыҙға күҙ йүгертһәк, беҙ бындай мәлдәргә Алтын Урҙа, һуңынан Рус батшалығы менән килешеүле мөнәсәбәт ҡороуыбыҙҙы индерәбеҙ. Беҙгә уларҙың таш күтәреп килгән саҡтары ла күп булған һәм хәҙерге көндә милләтебеҙ үҙ республикаһында йәшәп ята икән, бында, әлбиттә, "таш-аш" нисбәте дөрөҫ билдәләнгәндер тип уйлағы килә. Беҙҙең еребеҙгә килеп төпләнеп, ерләшеп китеүселәр араһында беҙҙең башҡа тәғәйенләнгән ташты ҡуйындарында йөрөтөүселәр әле лә юҡ түгел. Әммә беҙ иһә, беҙгә таш атыусыларға һаман да аш атабыҙ. Сөнки беҙ башҡаса эшләй алмайбыҙ. Был беҙҙең ҡаныбыҙҙа...

Минә бала сағымдан ҡартәсәйемдең тәрбиә йоғонтоһо ғәжәйеп ҙур тәьҫирле булды. Уның минә: "Улым, яҡшы бул. Яҡшы кешене яман кеше лә ярата", - тип әйткәне хәтеремә ныҡ уйылып ҡалған. Әллә совет осороноң һуғышсан атеизм йоғонтоһо көслө булдымы, әллә тәрбиәнең күберәк "ярамай"ға ҡоролоуы һөҙөмтәһеме, ололарҙың тап ошолай тип әйткән һүҙҙәре, бер ҡолағыбыҙҙан инеп, икенсеһенән сығып китмәгән хәлдә лә, тормош беҙҙе икенсе төрләрәк ҡаршы алып, башҡасараҡ уйҙар менән йәшәргә мәжбүр итте кеүек. Ул сағында һәр ҡайһыбыҙ ҡыҫҡырып әйтмәгән хәлдә лә, эстән генә ошондай хәҡиҡәткә танины буғай:

- Нисек инде, һинә таш менән һуғыусы кешене аш менән һыйлап тораһың, инде шул ғына етмәгәйне...

- Мин лутсы ташын алып үҙенең башын яра һуғам, тотһон бына йоҙроғомдо...

Мин үҙем дә, мәҫәлән, совет осоронда был мәсьәләгә ошолайыраҡ ҡарашта инем. Яйлап донъяның һәм тормоштоң асылына төшөнә килә, күп нәмәгә ҡараштар үҙгәрә икән. Был йәһәттән атаҡлы урыҫ яҙыусыһы Лев Толстойҙың "Яуызлыҡҡа көс менән ҡаршы тормау" идеяһы хәҙерге ҡараштарыма тура килә. Йәшәйештең иң юғары серҙәренә үтеп инеүсе аҡыл эйәһе хатта христиан дине ҡануйдарына ҡаршы килеп булһа ла, "Таш менән атҡанға аш менән яуап ҡайтар" фекерен яҡлап сыға. "Урал батыр" эпосының төп фекерҙәренең береһе лә быға ауаздаш. Үҙ халҡына, үҙенә ҡаршы ниндәй генә этлек эшләмәһен, Урал батыр Шүлгәнде аяй, уның ғүмерен һаҡлап ҡала. Сөнки ул бер хәҡиҡәтте яҡшы аңлай: кеше йәнен ҡыйыусы кеше - шул уҡ яуызлыҡ юлына баҫыусы ла...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән тыйылдырған, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**

# БАЛАЛАРҘЫ ҒЫНА ТҮГЕЛ...

## атай-әсәйҙе лә тәрбиәләргә тура килә



***Әлфиә КӘРИМОВА, Нефтекама ҡалаһының Башҡорт гимназияһы директоры:*** Борсоған мәсьәләләр байтаҡ, шулай ҙа быйыл, Ғаилә йылында, балаларҙың туған телгә, ғөмүмән, тормошҡа ҡарашына, тәрбиәгә иғтибар күберәк бүленер, тим. Был уҡыусылар менән генә эшләүҙән тормай, ә уларҙың ата-әсәләре менән бер һүҙле булыуға ла бәйле. Утыҙ йылдан ашыу мәғариф өлкәһендә эшләгән кеше буларак, насар, уңышһыҙ бала юҡ, ә уны уңышһыҙ итеүселәр - улар ата-әсә һәм беҙ, тим. Бала үҙенән-үҙе тәртипһеҙ, аҡылһыҙ, белемһеҙ булмай. Һәр кемде мөхит һәм беҙ, өлкәндәр тәрбиәләйбеҙ. Шуға бөгөн башҡа төрлө фекерләгән балалар тураһында һөйләгәндә уларҙың ата-әсәһен дә күҙ уңында тоторға кәрәк.

Ә бит улар ҙа үҙгәрҙе. Уларҙың тәрбиәүи эшкә, балаларының уҡыуына ҡарашы һүлпәнәйҙе, сөнки анды интернет үҙгәртте. Бигерәк тә балаларҙың китап уҡымауы ҡурҡыныс күренеш. Быларҙы мин дөйөм күренештәрҙән алып әйтәм, сөнки беҙҙең Нефтекама ҡалаһының Башҡорт гимназияһында, шөкөр, атай-әсәйҙәр әүҙем позициялы, балаларына туған телгә һөйөү тәрбиәләү, тәрбиә-тәртип йәһәтенән дә иғтибарлылар һәм уҡытыусылар менән дә яҡшы мөнәсәбәттә торалар. Ә бит ата-әсә һәм уҡытыусы араһында аңлашылмаусылыҡтар йыш тыуып торған белем усаҡтары ла була, был инде педагогтың эшенә ҡамасаулай. Бында былай ҙа педагогик кадрҙарға ҡытлыҡ кисергән мәктәптең хәле тағы ла ауырлаша: уҡытыусылар балалар насар булғанға түгел, ә ата-әсәләрҙең үҙенә хеҙмәт күрһәтеүсе итеп ҡарауын тойоуҙан был өлкәнән китә.

Шуға, Ғаилә йылында ошо ике өлкәне берләштереп, уҙара мөнәсәбәттәр, хеҙмәттәшлек тағы ла яҡшырһын ине. Йәш белгестәрҙе мәктәптәргә ылыҡтырыу өсөн, элекке кеүек, тәүге өс йылда мотлаҡ мәктәптә уҡытыусы булып эшләүҙе талап итергә кәрәктер, бәлки. Дәүләт бит вуздарҙа бюджет бүлегендә уҡығандарға сығымдар һала, шуны ҡайтарыу маҡсатында йәш белгестәр 3 йыл хеҙмәт итһә, мәктәптә, бындағы мөхиткә, коллективка өйрәнеп, артабан да тороп ҡалыр ине. Ике смена эшләгән һәм иртәнге сәғәт 8-ҙән киске 8-гә тиклем мәктәптән ҡайтып инмәгән уҡытыусылар бар бит, юғиһә.

Шунан, ҡатнаш никахта булған ғаиләләр балаларына туған телен уҡытырға теләп, ғариза яҙғанында ир менән ҡатын араһында тыуған аңлашылмаусылыҡтар ҙа мәктәп иңенә ятып ҡуя ҡайһы саҡ. Бында инде береһе башҡорт булып, балаһына башҡорт туған телен уҡытырға теләһә, икенсеһе ҡаршы була һәм талаш китә. Ә бит башҡа предметтарҙы уҡытабыҙмы-юҡмы тип бер ҙә һорап тормайҙар, нишләп нәҡ башҡорт теленән генә ғариза яҙырға тейештәр һуң?

Башҡорт телен уҡытыу тураһында һүҙ ҡуҙғатҡас, тағы бер күңелемә ятмаған мәсьәләне лә әйтеп үтәйем әле: башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалекты тип, йыйынтыҡтар, методик ҡулланмалар һәм хатта дәреслектәр төҙөү теләге менән янған кешеләр бар, әммә башҡорт әҙәби теле берәү бит! Мәҫәлән, мин үҙем Учалы районы Ураҙ ауылы типтәрҙәренән. Беҙҙә лә диалект теле бар. Әммә беҙ әҙәби телдә матур итеп һөйләшәбеҙ. Улайға китһә, башҡорт теленең нисә диалекты булһа, һәр береһенән шундай әсбаптар, һүҙлектәр булдырайыҡмы? Уҡыған кеше әҙәби башҡорт телен аңлап уҡый, уҡымағаны төньяҡ-көнбайыш түгел, әллә ниндәй диалектҡа үҙгәртһәң дә уҡымай. Бер бөтөн булған телебеҙҙе бүлгесләмәһәк ине.

Һәм тағы. Балалар хәҙер интернет донъяһынан барыһын да үҙләштерә, иң ҡурҡынысы, улар еңел ысул менән тиҙ генә аҡса эшләп алыу юлдарын да күрә һәм был уларҙың уҡыуға ҡарашын үҙгәртә. Элекке кеүек, ниндәйҙер матур һөнәргә эйә булыу, уның өсөн тырышып уҡыу кәрәк, тигән уй юҡ уларҙа. Киреһенсә, уҡымайынса ла аҡса эшләп була, тиҙәр. Атай-әсәйҙәр үҙҙәре лә ҡайһы осраҡта "Был предметтан БДИ тапшырмайбыҙ, нишләп ул дәрестә ултырырға тейешбеҙ?" - тигән һорау бирә. Кеше шәхес булып үҫһен өсөн донъяға киң ҡарашлы булырға тейеш, тигәндә, көн һайын тирә-яҡтан яуып торған мәғлүмәттәр күплегенә, бөгөн уҡып иртәгә онотоуҙарына һылтаналар һәм ҡаршылыҡ белдерәләр. Шуға күрә, аңлатыу эштәре алып барырға, мәктәпкә һәм уҡытыусыларға һәр ваҡыт алдынғы ҡарашлы, һәр яҡлап үҫешкән булырға, заман менән бергә атларға кәрәк.

**Камила ҒӘЛИЕВА**
**яҙып алды.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Республика халҡының 93 проценты 15-17 мартта Рәсәй Президентын һайлауҙа тауыш бирергә йыйына. Был хаҡта республика Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе Азат Ғәлимханов хәбәр итте. Спикер мәғлүмәттәре буйынса, 17 февралдән 6 мартҡа тиклем республикала һайлау участкаһы хеҙмәткәрҙәре йорттарҙың 97 процентында йөрөп сыҡҡан, 76 процентан ашыуында һайлауға бәйле аңғәмәләр үткәрелгән.

✓Башҡортостанда 15-17 мартта - тауыш биреү көндәрендә - "Рәхмәт" акцияһы ойошторола. Республика халҡы тауарҙарға һәм хеҙмәттәргә ташлама хоҡуғын биргән беләҙектәр, шулай уҡ махсус призлар отоу өсөн QR-билеттар алырға мөмкин. Ҡатнашыусыларға үҙҙәренең QR-билетын сканерлап, рәхмәт102.рф сайтында һигеҙ символдан торған уникаль код индерергә кәрәк (контакт бәйләнештәрен дә күрһәтергә онотмаҫҡа). Еңеүселәргә һанлы техника, электр самокаттары, электр велосипедтары, телевизорҙар, самокаттар һәм велосипедтар кеүек махсус бүләктәр тапшырыласаҡ.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә кисекмәҫтән Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың туғандарынан килгән һорауҙарға яуаптар әҙерләргә ҡушты. "Һорауҙар бик күп: кемдәндер һаманғаса түләүҙәре, кемдәндер документтары юҡ, кемдер шәфҡәтһеҙлеккә зарлана. Ә бит был мәсьәләләрҙең күбеһен муниципалитеттар кимәлендә хәл итергә мөмкин. Ошо арала барлыҡ мөрәжәғәттәрҙе тәртипкә килтерегеҙҙе һорайым. Мин уларҙы ҡарармын да бойороҡҡа ҡул ҡуйырмын", - тине Радий Хәбиров үҙенең хакимиәте етәксеһе Максим Забелинға мөрәжәғәт итеп.

✓15-17 мартта Башҡортостанда 2025 йылда төҙөкләндереү өсөн йәмәғәт биләмәләрен һайлап алыу буйынса тауыш биреү ойошторола. Республика муниципалитеттары 216 йәмәғәт киңлеген һайларға тәҡдим иткән. Иң күп тауыш йыйған 120 территория төҙөкләндерелә. Был эш ил Президенты тәҡдиме менән башланған "Торлаҡ һәм ҡала мөхите" милли проектының "Уңайлы ҡала мөхитен булдырыу" федераль проекты сиктәрендә башҡарыла. Хәбәр итеүенсә, быйыл Башҡортостанда ошо проект сиктәрендә 1 миллиард 174 миллион һумға 123 йәмәғәт биләмәһен төҙөкләндереү планлаштырыла. Проекттарҙың 67-һе - ҡалаларҙа, 56-һы ауылдарҙа бойомға ашырыласаҡ.

*БЫНАҒАЙЫШ!*

# ВАҠ МӘСЬӘЛӘ ТҮГЕЛ



**Элекке йыл, былтырҙары эт темаһы менән эт булынғайны инде. Улай ғынамы, бөтөн ил сырсыу килде бит: кешеләргә, бигерәк тә балаларға ташланып, фажиғәләр сәбәпсеһе булған берәҙәк эттәр буйынса бәхәс һәм ризаһыҙлыҡтар әле булһа килеп сығып тора. Дөрөҫ, берәҙәк эттәр бер аҙ кәмей ҙә төштө, буғай, ҡайһыларының ҡолағына чип та ҡуйып ебәрелгән, шулай булыуға ҡарамаҫтан, эттәр мәсьәләһе бының менән тамамланырға уйламай.**

Был йәһәттән ул бигерәк тә яҙ етә башлаһа, тирә-йүндәге бысраҡлыҡтар менән бергә яңынан ҡалҡып сыға. Тик был юлы өйҙә аҫралған һәм күптән "йорт хайуандары" төрөнә ингән дүрт аяҡлы "дуҫтар" тирәләй низағтар ҡуйыра башлай. Кемгә - дуҫтыр ҙа, ә кемгә - тирә-яҡты яҙын ғына түгел, ҡыш буйына ап-аҡ ҡар өҫтөнә, кеше йөрөгән юл һәм һуҡмаҡтарға ҡарауы имәнес булған тиҙәк-бәүел тамғаларын ҡалдырып, кәйефте боҙоусылар һәм шуның менән йоғошло сир, микроб-бактериялар таратыусылар. Эт яҡын дуҫым булмаһа ла, бында уларҙы ғәйепләргә түгел, ә уларҙың хужалары яуаплы икәне һәр кемгә аңлашыла. Баш ҡалабыҙ Өфөнөң үҙәк урамдарында нисектер, әммә Сипайлово биҫтәһен был йәһәттән таҙа район тип әйтеп булмай. Айырыуса халыҡ саф һауа һуларға, саңғы-сана шыуырға, йәйәү һәм "скандинав"тарса йөрөргә яратҡан Ҡариҙел буйы дамбаһында эт бысрағынан аяҡ баҫыр урын ҡалманы. Сәләмәт йәшәү рәүеше яратыусылар өсөн һалынған күп саҡрымлы асфальт юлды тотошлайы менән эт "һуғарыусы"лар баҫып алды һәм уларҙың йән дуҫтары аҙым һайын, исмаһам, бер аҙ ситкәрәк тә китеп тормайынса, юл эсенә, һуҡмаҡ ситтәренә мул ғына "күстәнәс" ҡалдырып китә. Ә уларҙың хужалары был эште ҡәнәғәт булып, ирәйеп ҡарап тора...

Һупайлыла 20 йыл йәшәү осоронда яңыраҡ тәүге тапҡыр бер генә тәрбиәле ҡатын осраны: этен ситкәрәк алып китеүе етмәгән, уның "күстәнәсен"... шыптыр моҡсайға һалып алып, сүп һауытына ташлап китте. Әле булһа үкенәм: был ҡатынға рәхмәт әйтергә лә өлгөрмәй ҡалдым. Бына шулайыраҡ булырға тейештер, тейем, эт тотоу ҡағиҙәләренең береһе. Дөрөҫөрәге, эт хужаһының тәрбиә кимәле. Этенде яратаһың икән, уны аҫрау мәшәҡәттәрен дә күтәрергә, был юҫыҡта хөкүмәт тарафынан сығарылған закон һәм ҡағиҙәләргә буйһонорға тура килә.

Ә улар беҙгә билдәле, бигерәк тә эт хужалары уның менән яҡшы таныштыр, моғайын. Тәүҙә мин был турала, эй, тапҡан тема, ниндәй ваҡ мәсьәлә, тип әйтерҙәр, көлөрҙәр тип яҙырға уңайһыҙланғайным, ләкин социаль селтәрҙәрҙә был хаҡта күптән шау-шыу бара икән дә. Хатта ки абруйлы үҙәк гәзит биттәрендә лә мәҡәләләр баҫылып тора, имеш. Мәҫәлән, АиФ-Өфө гәзите бынан өс йыл элек үк "Өфө халҡы урамдарҙағы эт фекалийҙарынан зарлана" тигән баш менән ошо мәсьәләне күтәреп сыҡҡан. Унда билдәле закондарға ҡолаҡ та һалмайынса, урам һәм парк-скверҙар биләмәләрен бысратыуҙы дауам итеүсе эт хужаларына ни өсөн бер ниндәй ҙә сара күрелмәүе, исмаһам, береһенә бер тапҡыр штраф һалынмауы тәнҡитләнә. Ошо уҡ гәзиттә (АиФ-Өфө, 2018 йыл, 4 март) тағы бер мәҡәлә баҫыла һәм унда "Сипайловоның Ҡариҙел яры буйындағы йәйәүлеләр һуҡмағы кешеләр өсөнмө, әллә эттәр өсөнмө?" тигән һорау ҡуйыла һәм хәбәрсе был һорау менән Өфөнөң Октябрь районы хакимиәтенә мөрәжәғәт итә, ләкин: "Беҙ был турала беләбеҙ, ләкин бер ни ҙә эшләй алмайбыҙ",- тип ауыр һулауҙан ары китә алмайҙар һәм ҡар ireп бөткәс, күпме шәмбе өмәләре ойоштороуҙарын һанап сығыу менән сикләнәләр.

Әбит таҙалыҡ апрель-майҙа ғына түгел, ҡыш та, ҡар ирей башлаған осорҙа ла кәрәк! Күренеүенсә, баш ҡала райондары хакимиәттәре лә, уларҙың район коммуналь хужалыҡтары ла был законға "күҙ йома". Эт хужаларының тәрбиәһеҙлеге, тәртипһеҙлеге, күрәләтә закон боҙоуҙары һәм тирә-йүнде бысратыуҙары әле телгә алған коммуналь хужалыҡтар менән бер рәттән, бер кемде лә, хатта Роспотребнадзор , полиция, экология ойошмалары кеүек таҙалыҡ, тәртип өсөн яуаплы органдарҙы ла борсомай. Әлбиттә, түрә-ҡара һиңә йәйәү йөрөймө ни, улар машинала ғына елдерә һәм әлеге ише "ваҡ-төйәк"те күрмәй ҙә, күрергә лә теләмәй. Ә былай АиФ яҙамы, социаль селтәрҙәрҙә нәфрәт сәселәме - файҙа юҡ. Тимәк, бындай бысраҡлыҡтарҙан яфа сигеүсе ҡала халҡы көрәшергә тейешме законһыҙлыҡҡа ҡаршы?

Әйткәндәй, М. ханымдың "Эт бысрағын кем йыйыштырырға тейеш, эт хужаларының яман ҡылығына ҡаршы берәй сара бармы?" тигән һорауына юрист шундай яуап бирә: "Хайуандар менән яуаплы мөғәмәлә тураһында 2023 йыл үҙгәрештәр индерелгән Федераль закон эт хужаларынан йорт хайуандарын, йәғни эттәрҙе, махсус рөхсәт ителгән биләмәләрҙә генә йөрөтөү һәм уларҙың организм эшмәкәрлеге ҡалдыҡтарын мотлаҡ йыйыштырыу бурысын талап итә. Ләкин һәр закон норматив акттар менән нығытылырға тейеш, йәғни был эш аныҡ ниндәй органдар яуаплылығына йөкмәтелә, эт хужаларына штраф һалыу менән тәғәйен кемдең шөғөлләнеүе билдәләнергә тейеш. Тимәк, тәжрибә күрһәтеүенсә, был закон әлегә эшләмәй".

Эт хужаларын тәртипкә өйрәтеү буйынса бынан дүрт йыл элек эшҡыуар Юлай Ғиниәтовтың ParaDogs проекты хаҡында яңылыҡ телдән төшмәне. Хужалары эттәренең тиҙәген йыйып алып һалырға ҡаланың төрлө урындарында махсус дог-бокс контейнерҙар ҡуйыу ҡарала, уларға хатта әҙер моҡсайҙар дозаторы ла теркәлгән. Үкенескә, ул саҡтағы ҡала властары аҡса юҡлыҡҡа һылтанып, был проект бойомға ашырылмай ҡала. Ә эшҡыуарҙың Төмәндәге хеҙмәттәше бындай проектты ҡаланың бер нисә районында бойомға ашырыуға өлгәшә, сөнки Төмән ҡалаһында таҙалыҡ булдырырға теләйҙәр. Юлайҙың әйтеүенсә, бөтә эш чиновниктарға бәйле. Яңы проекттың хатта йыйыштырылмай ҡалдырылған экскрементҡа генетик тест эшләп, этте һәм уның хужаһын асыҡлай һәм уға тос ҡына штраф сәпәй торған мөмкинлектәре лә бар. Тик был "аҡыллы" проекттың ҡасан ғәмәлгә ашыры ғына беҙгә мәғлүм түгел...

Әйткәндәй, эттән кешегә йоғоуы ихтимал 6 төрлө сир бар: кампиллобактериоз (гастроэнтеритҡа сәбәпсе булыуы бар), лептоспироз (эт бәүеле аша), листериоз (баш мейеһен зарарлай), пастеррелез (артрит, остеомиелитҡа килтерә), ә инде эт тешләһә, уның аша сепсис, менингит, эндокордит, флегмона һәм башҡа сирҙәр башланыуы мөмкин. Эт ҡоторооғо иһә айырыуса яман, был хаҡта белмәгән кеше һирәктер. Бәхеткә, мосолман халҡында өйҙә эт аҫрау яҙыҡ ғәмәл, гонаһ иҫәпләнә, ауылдарҙа ул йорт алдарында тотола һәм уны һыйпағандан һуң ҡулды ныҡлап һабынлап йыуырға кәрәк. Бер ыңғайҙа бесәйҙән дә (шул иҫәптән, тутыйҡош, ҡулға өйрәтелгән сысҡандар, хатта аквариум балыҡтарынан да) кешегә хәүефле сирҙәр йоға: тимерәү, фелиноз (бесәй тырнаһа), токсоплазмоз, токсокароз (глистар) һәм башҡалар.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*

# БАШ МЕЙЕНДЕ... ялҡауландырма!

**(Башы 1-се биттә).**

Килде бит замандар, телефон һыйпап ултырып ҡына уҡый бөгөн уҡыусылар. Әммә унан уҡығандары хәтерҙәрендә ҡалмай. Иртәгә һора унан ошо турала, әйтә алмай ул. Имтиханға әҙерләнгәндә лә үҙенән бигерәк телефонына ышана. Ғалимдар күптән раҫлаған бит инде: баш мейеһе экранда күргән мәғлүмәтте оҙаҡҡа һаҡламай, "күрҙем дә, оноттом да" тиеп кенә ҡуя. Яңылыҡты ни, интернеттан уҡыйым, тигәндәрҙең дә шулай. Күргән кеүекһең, әммә нимә тураһында икәнен әйтеп бирә алмайһың. Баш мейеһен ялҡауландырыу, кешенең зиһенен тарҡатыу, аҡылһыҙ итеүҙең тура юлы инде. Ә ҡағыҙға баҫылғанды уҡыу, киреһенсә, мейегә көсөргәнеш төшөрә. Бындай мәғлүмәт һине уйландыра, ҡабат-ҡабат әйләнеп ҡайтып уҡыған саҡтар була.

Бер каникулға килгәнендә ейәнемде гәзит уҡырға өйрәтмәксе булдым. Үҙең өсөн уҡы, тип талап итеп булмай, миңә ҡысҡырып уҡы әле, тейем. Шулай көн һайын гәзит уҡыны был бала. Теле шымарҙы, уҡыған нәмәләре хаҡында һөйләшә башланыҡ. Шуға ла яңы йылдан балалар өсөн сыҡҡан журналды ла өҫтәп яҙҙырҙым, бынан ары шуларҙы уҡырбыҙ, тип ниәтләнеп торабыҙ.

Әле лә үҙем бер-ике матбуғат баҫмаһын яҙҙырып алдырам. Улар араһында "Киске Өфө" лә бар. Уның һәр ваҡыт актуаль булған темаларға мөрәжәғәт итеүен яратам. Ана шул алда әйтелгәнсә, ҡабат-ҡабат ҡайтып уҡып булғаны өсөн. Һалып торам да, уйланып йөрөп алам, кире әләктереп, тағын уҡыйым. Бигерәк тә замандаштарыбыҙ, уларҙың донъяға ҡарашы тураһында белеүе ҡыҙыҡ. Матур йәштәр хаҡында ла уҡырға яратам, ни тиһәң дә, шуларға ҡарап торабыҙ, киләсәк улар ҡулында. Гуманитар өлкәлә генә түгел, теүәл фәндәр донъяһында ла башҡорт егет-ҡыҙҙары байтаҡ, уларҙы ла күрһәтергә кәрәк.

Тағы ла спортсылар хаҡында күберәк яҙһағыҙ ине, мәҫәлән, мин өлкән булһам да, хоккей ҡарайым, "Салауат Юлаев" командаһындағы хоккейсылар менән әңгәмәләр ойоштороп булмаймы икән? Башкиров атлы егет тураһында, мәҫәлән, белеүе ныҡ ҡыҙыҡ булыр ине. Бындай фамилиялы кешеләрҙең, һөҙөмтәлә, барыбер башҡортҡа ҡатнашлығы булыуы асыҡланып тора бит.

Медицина өлкәһенә ҡағылышлы мәҡәләләр бик кәрәк, бөгөн интернет "белгес"тәр менән тулды, ҡайһыһы ысынды, ҡайһыһы ялғанды һөйләй - аңламаҫһың. Бында инде табип үҙе кәңәш бирә, шикләнергә урын ҡалмай. Шулай уҡ халҡыбыҙҙың боронғо дауалау ысулдары менән таныштырыусылар булһын ине. Үҙемдең өләсәйем был йәһәттән бик зиһенле ине, әммә ни эшләптер шуларҙы хәтерләп ҡалмағанбыҙ.

**Ғәшүрә СӘҒИТОВА.**
**Күмертау ҡалаһы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Владимир Путин урман хужалығы, тирә-яҡ мөхитте һаҡлау менән шөғөлләнеүселәрҙең хеҙмәт хаҡын күтәрергә тәҡдим итте. Уның һүҙҙәренсә, улар бик мөһим мәсьәләләрҙе хәл итә, ә килемдәре бик аҙ. Президент "ағасты рөхсәтһеҙ ҡырҡыу мәсьәләһендә тәртип урынлаштырыу" кәрәклеген дә билдәләне. "Был тема һәр кеше өсөн мөһим. Хәл яйлап үҙгәрә башланы. 2021 йылдан урмандарҙы ҡырҡыуға ҡарағанда күберәк тергеҙәләр", - тине Путин Федераль Йыйылышҡа Мөрәжәғәтнамәһе ваҡытында.

✓Ошо көндәрҙә Башҡортостандың мәғарифты үҫтереү институтында "Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы" республика конкурсын һәм "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" төбәк-ара конкурсын асыу тантанаһы үтте. Хәбәр ителеүенсә, ике һөнәри конкурста төрлө фәндәрҙән белем биргән 207 уҡытыусы ҡатнаша. "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" төбәк-ара конкурсы 29-сы тапҡыр ойошторола. Унда Башҡортостандан һәм Рәсәйҙең башҡа төбәктәренән 55 уҡытыусы ҡатнаша.

✓Башҡортостан Хөкүмәте ауыл хужалығы техникаһы һәм ҡорамалдары һатып алыуға сығымдарҙың бер өлөшөн ҡаплау өсөн республика бюджетынан субсидиялар биреү тәртибенә үҙгәрештәр индерҙе. Субсидиялар биреү шарттары һәм тәртибе 2025 йылдың 1 ғинуарына тиклем ғәмәлдә ҡала. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, субсидиялар ауыл хужалығы тауарҙары етештереүселәргә, ауыл хужалығы һәм ҡулланыусылар кооперативтарына, шәхси эшҡыуарҙарға йөк машиналары, ҡорамалдар, комбайндар һатып алыу өсөн бирелә.

✓Рәсәй Дәүләт Думаһы ил халҡы һәм компаниялары өсөн сит ил агенттары ресурстарында реклама урынлаштырыуҙы тыйыу тураһында закон ҡабул итте. Шулай уҡ киң мәғлүмәт сараларында һәм интернетта сит ил агенттарының ресурстарын рекламалау тыйыла. Башланғыс Рәсәйҙең суверенитетын һәм именлеген яҡлауға йүнәлтелгән. Хәбәр ителгәнсә, 2023 йылда ғына Рәсәйҙең 200-ҙән ашыу физик һәм юридик берәмектәре сит ил агенттарының мәғлүмәт ресурстарында үҙ тауарҙары һәм хеҙмәттәре рекламаһын урынлаштырған.

**✓ "Башҡорт киноһы" феноменының популярлыҡ яулауын күреү беҙҙең өсөн бик мөһим. Был Рәсәй тамашасыларының күбеһенең реаль тарихлы тормош сағылған фильмдар менән ҡыҙыҡһына башлауы хаҡында һөйләй.**



ҠЫҪҠАСА

# ТАШҠЫН БУЛА ҠАЛҺА...

**Башҡортостан буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығында 2024 йылдың ташҡын һәм янғын хәүефе миҙгелендә ғәҙәттән тыш хәлдәрҙе иҫкәртеү буйынса ведомство-ара эшсе төркөм ултырышы үтте.** Башгидрометтың яҡынса фаразына ярашлы, быйыл ташҡын уртасанан юғарыраҡ булыуы көтөлә. Ташҡынға әҙерлек ваҡиғалар үҫешенең иң насар вариантын иҫәпкә алып барыла. Һыу баҫыу зонаһында 86 меңдән ашыу кеше йәшәгән 44 муниципалитетта 313-тән ашыу тораҡ пункт булыуы ихтимал. Башҡортостанда 62 хәүефле участка билдәләнгән, шартлатыу эштәрен үткәреүгә килешеүҙәр төҙөлгән. Тәүге шартлау эштәрен 18 марттан башлау күҙаллана. Ташҡын осоронда 276 ваҡытлыса урынлаштырыу пункты әҙерләнгән, тип хәбәр иттеләр ведомстволың матбуғат хеҙмәтенән.

✓ **Башҡортостан уҡыусыларын 15-17 мартта - Рәсәй Президентын һайлау көндәрендә өйҙән уҡыуға күсермәйҙәр. Был турала республиканың Мәғариф министрлығынан хәбәр иттеләр.** "Участка һайлау комиссиялары урынлашҡан мәктәптәрҙә һайлау көндәрендә белем биреү мәҙәниәт, спорт учреждениеларында, өҫтәмә белем биреү ойошмаларында, һөнәри йүнәлеш биреү майҙансыҡтарында һәр класс (параллель) өсөн айырым график буйынса ойоштороласаҡ. Һауа торошо яҡшы булһа, тышта Спорт, Һаулыҡ көндәрен, экскурсиялар һәм башҡа саралар үткәрергә мөмкин", - тип белдерҙеләр ведомствола. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2019 йылдан Башҡортостан мәктәптәре биш көнлөк уҡыу аҙнаһына күсте. Уҡыусылар "алты көн" режимында уҡыған ҡайһы бер төбәктәрҙә һайлауға бәйле балаларҙы ваҡытлыса өйҙән уҡыуға күсереү тураһында ҡарар ҡабул ителде.

✓ **Башҡортостанда енәйәтселек кимәле Волга буйы федераль округында ла, ғөмүмән, Рәсәй буйынса алғанда ла иң түбәндәрҙең береһе булып ҡала.** Башҡортостан Республикаһы буйынса эске эштәр министры, полиция генерал-майоры Александр Прядко Дәүләт Йыйылышының пленар ултырышында сығыш яһағанда йәмәғәт урындарында һәм урамдарҙа енәйәтселектең кәмеүе хаҡында белдерҙе (2022 йылғы күрһәткестәр менән сағыштырғанда, 20 процент һәм 17 процент). 2023 йылда һаулыҡҡа ауыр зыян килтереү, урлашыу осраҡтары, урамда, рецидив һәм көнкүреш енәйәтселеге кәмегән. 25 меңдән ашыу, шул иҫәптән 5,5 меңдән ашыу ауыр һәм айырыуса ауыр енәйәт эше тикшерелгән. Полицейскийҙар 10 ойошҡан енәйәтсел төркөмдөң эшмәкәрлеген туҡтатҡан, тип билдәләне министр.

✓ **Башҡортостан Транспорт министрлығы 2024 йылдың февралендә фотовидеотеркәү автомат комплекстары теркәгән иң күп таралған юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоу осраҡтары тураһында хәбәр итте.** Мәҫәлән, водителдәр тиҙлек режимын үтәмәй, тиҙлекте сәғәтенә 20-40 км-ға арттырыуҙар ҡағиҙә боҙоуҙар исемлегендә беренсе урында тора. Уҙған айҙа камералар 208 557-нән ашыу ошондай осраҡты теркәгән. Икенсе урында - светофорҙың тыйыу сигналына йөрөү: 12 683 осраҡ теркәлгән. Өсөнсө урында - туҡталыш һыҙығынан сығыу - бөтәһе 7975-тән ашыу ошондай осраҡ билдәле.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# МӨҺИМ ЙҮНӘЛЕШ



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙә академик Шумаков исемендәге трансплантология һәм яһалма ағзалар үҙәге етәксеһе Сергей Готье менән осрашыуы хаҡында яҙҙы. Улар Башҡортостанда медицинаның мөһим йүнәлешен үҫтереү тураһында фекер алышты.**

"Шумаков исемендәге үҙәк - донъяла трансплантология өлкәһендәге алдынғы учреждение. Тәү сиратта Сергей Владимировичҡа бында беҙҙең табип-трансплантологтарҙы ихлас ҡабул итеүҙәре, стажировка үтеүҙәре һәм үҙ компетенцияларын күтәреүҙәре өсөн рәхмәт белдерҙем. Башҡортостанда трансплантология юғары кимәлдә, табиптарыбыҙ үҙенсәлекле операция яһай, йөрәк, үпкә һәм башҡа ағзаларҙы күсереп ултырта. Ошо үҙәккә килеүебеҙ - тәжрибә үҙләштереү һәм артабан ниндәй йүнәлештә эшләү кәрәклеген аңлау мөмкинлеге ул", - тип яҙҙы Радий Хәбиров.

Башҡортостанда трансплантология хеҙмәтен, донорлыҡты үҫтереү программалары әҙерләнә, тип билдәләне республика етәксеһе. Был йүнәлештә эш дауам итә.

# ЮЛ БУЙЫНДА СӘЙХАНАМЫ?



**2024 йылда Башҡортостанда 450 юл буйы сервисы объектын төҙөргә һәм шул уҡ күләмдә яңыртырға әҙерләнәләр. Был турала республика Хөкүмәтенән хәбәр иттеләр.**

"Юл яны сервисы буйынса беҙ 2020 йылдан алып әүҙем эшләйбеҙ. 2023 йылда Башҡортостанда 304 яңы юл буйы сервисы объекты сафҡа индерелгән, 307-һе яңыртылған. Бөгөн Башҡортостандың өҫтәнлеклө инвестиция проекттары исемлегендә дөйөм инвестициялар күләме 4,5 миллиард һумдан ашыу булған 44 инвестиция проекты бар. Быйыл беҙ тағы ла темпты арттырырға һәм 450 юл яны сервисы объектын төҙөп, шунса уҡты яңыртырға ниәтләйбеҙ", - тине республика Премьер-министры Андрей Назаров.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2020 йылда Башҡортостанда республиканың Юл буйы сервисын үҫтереү концепцияһын әҙерләнеләр һәм инвесторҙар өсөн ярҙам саралары комплексын булдырҙылар. Ошондай объекттар төҙөү өсөн ер участкаһы сауҙаһыҙ һәм льготалы ставка буйынса ҡуртымға бирелә, транспорт һәм инженер инфраструктураһын төҙөү өсөн сығымдарҙың бер өлөшөн ҡаплауға субсидия бүленә, килемгә һәм мөлкәткә һалым буйынса льготалы һалым осоро ғәмәлдә.

# БАШҠОРТ КИНОҺЫ



**"Башҡортостан" киностудияһы илдә алдынғыларҙың береһенә әүерелә бара һәм башҡорт киноһы бөгөн прокатта үҙ урынын яулай. "Төньяҡ амурҙары" кеүек ҡыҙыҡлы яңы нәфис фильмдар һәм йәнһүрәттәр төшөрөлә, прокатҡа сыға, тип билдәләне Радий Хәбиров республиканың киноиндустрия вәкилдәре менән осрашыуҙа.**

"Беҙ шулай уҡ һәр муниципалитетта яҡшы йыһазландырылған кинозалдар булһын өсөн тырышабыҙ, ләкин әлегә ошо мәсьәләне хәл итмәгәнбеҙ", - тине Радий Хәбиров. Яңы асылған залдарҙың һаны буйынса беҙҙең республика илдә лидерҙарҙың береһе булып тора. Быйыл ғына тағы 4 районда кинозал асылды. Алты йыл эсендә республикала 36 кинозал яңыртылған. "Башҡорт киноһы" феноменының популярлыҡ яулауын күреү беҙҙең өсөн бик мөһим. Был Рәсәй тамашасыларының күбеһенең реаль тарихлы тормош сағылған фильмдар менән ҡыҙыҡһына башлауы хаҡында һөйләй. Әлбиттә, беҙ иждадыгыҙҙы махсус хәрби операция геройҙарына, тарихыбыҙға, традицион ҡиммәттәребеҙҙә арнауығыҙҙы теләйбеҙ. Былтырҙан Башҡортостан Башлығының 50 миллион һумлыҡ гранты бүленә. Үҙебеҙҙең яҡтан һеҙгә ярҙам итербеҙ. Былтыр тәүге тапҡыр кинематография өлкәһендәге проекттарға 50 миллион һумлыҡ грант ярҙамын күрһәттек. Быйыл уны дауам итербеҙ", - тине Радий Хәбиров.

# УҠЫУ ЙОРТТАРЫНА...



**Башҡортостандың фән һәм мәғариф министры Илдар Мәүлитбирҙин Башҡортостан юлдаш телеканалында уҙған брифингта быйыл ҡабул итеү кампанияһында бюджет урындарының һаны тураһында әйтте.**

"Өфө фән һәм технологиялар университетында 5,6 меңгә яҡын урын бар. 2024 йылға беренсе курсҡа 15 мең кешене ҡабул итеү планлаштырыла. Башҡорт дәүләт медицина университетында - 1003 урын, шуның 965-е - белгеслек һәм 38-е - бакалавриат. Медицина биофизикаһы, биоинженерия, биоинформатика кеүек яңы һөнәрҙәр ҙә бар. Башҡорт дәүләт педагогия университетында яҡынса 1,7 мең бюджет урыны булдырыу планлаштырыла: 1,3 меңе - бакалавриатта, 400-ө - магистратурала. Өфө дәүләт нефть техник университетында 3,7 меңдән ашыу бюджетниктың ҡабул итергә әҙерҙәр. Башҡорт дәүләт аграр университетында 1,4 меңдән ашыу бюджет урыны булдырыла. Өфө дәүләт сәнғәт институтында актерлыҡ йүнәлеше бик популяр. "Актёрлыҡ сәнғәте" һөнәренә - ике, һынлы сәнғәт факультетында дүрт бюджет урыны өҫтәлгән. Бөтәһе 105 урын. Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһында икенсе йыл рәттән бюджетҡа уҡырға инергә мөмкин, иң популяр йүнәлеш - дәүләт муниципаль идаралығы", - тине министр.

Ул шулай уҡ 2024 йылда республиканың юғары уҡыу йорттарына ингәндә кемдәрҙең льготалар менән файҙаланырға хоҡуҡлы булыуы хаҡында һөйләне. "Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар һәм уларҙың балалары өсөн льготалар бар. Рәсәй Геройҙары, Батырлыҡ ордены кавалерҙары һәм уларҙың балалары, шулай уҡ махсус операцияла һәләк булғандарҙың балалары имтиханһыҙ уҡырға инә ала. Һәр юғары уҡыу йортонда ошондай категориялар өсөн тейешле квота бар. Квоталар тураһында ҡыҙыҡһындырған юғары уҡыу йортоноң сайтында белергә мөмкин. Шулай уҡ контртеррористик операцияларҙа, мәҫәлән, Чечнялағы хәрби хәрәкәттәрҙә ҡатнашыусыларҙың балалары өсөн дә ташламалар ҡаралған. Ошондай льготалар хаҡында мәғлүмәт менән университеттарҙың рәсми сайттарында танышырға була", - тип белдерҙе министр.

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Башҡортостандың транспорт һәм юл хужалығы министры Александр Клебанов Көнсығыш сығыу юлының әҙерлегe тураһында һөйләне. "Март айында беҙ уны асабыҙ, дөрөҫ аңланыммы?" - тип һораны Башҡортостан Башлығы һәм Клебановтан ыңғай яуап алды.

✓24-26 майҙа Өфөнөң Совет майҙанында II "Китап-байрам" халыҡ-ара китап йәрминкәһе ойоштороласаҡ. Байрамды әҙерләү һәм үткәреү мәсьәләһе буйынса эш кәңәшмәһе үтте. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, был күләмле сара Башҡортостан Республикаһы Башлығы указына ярашлы уҙғарыла. Республиканың Яҙыусылар союзынан хәбәр итеүҙәренсә, йәрминкә программаһы бик ҡыҙыҡлы һәм бай булмаҡсы. "Китап-байрам" сиктәрендә Башҡортостан Яҙыусылар ойошмаһының 90 йыллығы билдәләнә. Шул уҡ көндәрҙә Рәсәй Яҙыусылар союзының күсмә пленумы була, унда илдең 30 төбәгенән яҙыусылар ҡатнаша.

✓Өфө мэрияһының юлдар һәм яһалма ҡоролмалар төҙөү, ремонтлау идаралығы етәксеһе Константин Паппе белдереүенсә, Шаҡша күперенең беренсе сиратын июнь айында асырға әҙерләнәләр, шунан һуң белгестәр объектты артабан капиталь ремонтлау эштәренә тотона. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2019 йылда Шаҡша ҡасабаһы янындағы Ҡариҙел йылғаһы аша автомобиль күпере авария хәлендә етеп бара тип баһаланды. Яңыртылғандан һуң ул тағы 50 йыл хеҙмәт итергә тейеш.

✓Өфөнөң Иван Якутов паркында бер төркөм үҫмерҙәр граждандар һуғышы геройҙары һәм Октябрь революцияһында ҡатнашыусылар ҡәберендә мәңгелек утты һүндергән. "Полиция хеҙмәткәрҙәре дүрт балиғ булмаған баланың шәхесен асыҡлаған. Әлеге ваҡытта үҫмерҙәр тәфтиш органдарына тапшырылған", - тип хәбәр иттеләр "Башинформ"ға Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығының матбуғат хеҙмәтенән.

✓Башҡортостан спортсыһы Антон Бабиков Ижевскиҙа биатлон буйынса Рәсәй кубогы этабында көмөш призер булды. Атлет спринтта икенсе урынды алды, тип хәбәр итте республиканың биатлон буйынса йыйылма командаһының баш тренеры Виктор Никитин. Бынан алдараҡ Эдуард Латипов Чайковский ҡалаһында суперспринтта биатлон буйынса Рәсәй чемпионатының көмөш миҙалын алғайны.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Доцент Николай Щербаков әйтеүенсә, XVII быуат аҙағында - XVIII быуат башында Өфө ҡалаһында етеш тормошта йәшәүсе кешеләр ул заман өсөн бик һирәк осрай торған әйберҙәргә эйә булған.*



ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!



# КИТАПХАНАЛА ОСРАШЫУ

**Һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән кешеләр тураһында хәстәрлек йылында Өфөгә "Йөрәк саҡырыуы буйынса" хәйриә фондының попечителлек советын ойоштороусы һәм президенты, йырсы Диана Гурцкая килде. Ул IV "АРТ-Ҡоролтай" мәҙәни форумы сараларында ҡатнашты.**

Диана Гурцкая һәм уның ҡустыһы Роберт башта Мәкәрим Төхвәтшин исемендәге Һуҡырҙар өсөн республика махсус китапханаһында булды. Китапхана директоры Айгөл Әминева ҡунаҡтарға учреждениеның ҡыҙыҡлы залдарын һәм мөйөштәрен күрһәтте, китапхана эшмәкәрлегенең төп йүнәлештәре, күреү мөмкинлектәре сикләнгән кешеләр өсөн уңайлыҡтар менән таныштырҙы. Диана Гурцкая башҡорт Брайль шрифтын булдырыусы Мәкәрим Төхвәтшиндың, һуҡыр башҡорт композиторы, Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Салауат Низаметдиновтың мемориаль таҡталары, ҡабарынҡы-график һүрәтле брайль китаптарын баҫтырыу өсөн ҡулланылған технология һәм махсус ҡорамалдар, уҡыусыларҙы хеҙмәтләндереү системаһы менән танышты. Экскурсиянан һуң Диана Гурцкая үҙенең тәьҫораттары менән уртаҡлашты һәм китапханаға ремонт эшләүҙәрен үтенде, киләсәктә яңыртылған учреждениеның презентацияһына килергә вәғәҙә бирҙе.

# ЯҢЫ ЗАВОД ТӨҘӨЛӘ

**Өфөнөң Дим районы биләмәһендә арматура заводы төҙөй башлаған "Автогруз" компанияһы республика Хөкүмәте менән Инвестицияларҙы яҡлау һәм дәртләндереү тураһында килешеүгә ҡул ҡуйҙы.**

Проекттың хаҡы - яҡынса 158 миллион һум. Предприятиела 24 яңы эш урыны булдырыла. Яңы предприятие торлаҡ төҙөлөшө өсөн дә төрлө арматура етештерә. Сеймал сифатында металл һыныҡтарын файҙаланыу ҡарала. Проект быйыл "Инвестиция сәғәте"ндә тикшерелде. Төҙөлөштө яҙ көнө башлап, 2026 йылда сафҡа индереү көтөлә. Проект өҫтөнлөклө статусҡа эйә, инвесторға һалым льготалары, шулай уҡ сауҙаһыҙ ер участкаһы бирелә. Әлеге ваҡытта биләмәнең тейешле параметрҙарға ярашлы булыу-булмауы тикшерелә, тип хәбәр иттеләр Хөкүмәттең матбуғат хеҙмәтендә.

2023 йылдың июлендә республика властары инвесторҙар өсөн дәүләт ярҙамы алыу мөмкинлеген ябайлаштырҙы, инвестицияларҙы яҡлау һәм дәртләндереү тураһында килешеү индерелде. Ул компанияға ойошма мөлкәтенә льготалар алыу йәки инвестиция һалым ҡайтармаһын ҡулланыу мөмкинлеге биргән килемгә һалым буйынса (20 процент) льгота алырға мөмкинлек бирә.

# ӨФӨ АҪТЫНДА НИҘӘР БАР?

**Өфө ҡалаһының Сергей Аксаков исемендәге йорт-музейында М. Аҡмулла исемендәге БДПУ археологтары тарафынан табылған экспонаттар күргәҙмәһе асылды. Экспозиция "Ҡаҙан урамындағы усадьбалар: XVIII - XIX быуат башындағы ҡала кешеләре көнкүрешенә археолог ҡарашы" тип атала.**

Билдәле булыуынса, баш ҡалабыҙҙың Октябрь революцияһы урамында киң күләмле реконструкция эштәре алып барыла. Педагогия университеты археологтары юл полотноһы аҫтындағы ер ҡатламдарын ҡаҙып тикшерҙе. Археологик ҡиммәттәр рәтенә индерелгән табылдыҡтар ике күргәҙмә витринаһына ҡуйылды, унан башҡа ҡаҙыу эштәре буйынса ике мәғлүмәт стенды музейға килеүселәр иғтибарына тәҡдим ителә.

Ҡаҙыу эштәре барған урында XIII быуатта - XIX быуаттың тәүге өс тиҫтә йылдарында Рәсәйҙең данлыҡлы металлургтары - Никита, Евдоким һәм Иван Демидовтарҙың усадьбаларынан торған торлаҡ комплексы булған. Ошо урамдағы торлаҡ ҡалдыҡтарында шул осорға ҡараған хужалыҡ һәм мәҙәниәт әйберҙәре табылған. Улар иҫәбендә ағастан яһалған май туҡыу һауыты, күн аяҡ кейемдәре, киҫеп алынған йорт ҡапҡалары бағаналары ҡалдыҡтары бар.

Доцент Николай Щербаков әйтеүенсә, XVII быуат аҙағында - XVIII быуат башында Өфө ҡалаһында етеш тормошта йәшәүсе кешеләр ул заман өсөн бик һирәк осрай торған әйберҙәргә эйә булған. Мәҫәлән, аҡ балсыҡтан эшләнгән "голланд" тәмәке тартыу төрөпкәһе, төҫлө быяла мәрйенле муйынсаҡ, 1770 һәм 1816 йылдар менән тамғаланған штоф штамптары, шарап шешәләре киҫәктәре. Шулай уҡ бер көмөш һәм баҡыр тәңкә табылған, улар 1734 - 1803 йылдарҙа һуғылған. Ябай кешеләрҙең өйҙәре бик бәләкәй, ни барыһы 3 метрға 4 метр ҙурлыҡта булған. Шуныһы ҡыҙыҡлы - мейес мөрйәләре үҫемлек орнаменты төшөрөлгән рельефлы полихром плиткалар менән көпләнгән була. Был урам 1816 йылдағы оло янғын арҡаһында янып юҡҡа сыҡҡан. Халыҡ-ара Демидов фонды делегацияһы ошо күргәҙмәне Екатеринбург ҡалаһына алып барып күрһәтергә тәҡдим итте.

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# "ЭШТӘРЕ ҺИС АЛҒА БАРМАҪ!"

**Үткән аҙналағы донъя хәбәрҙәре күберәк Украиналағы хәлдәр һәм шуға бәйле халыҡ-ара ваҡиғалар тураһында барҙы. Мәғлүм булыуынса, Рәсәй хәрби көстәренең ныҡышмал ҡыҫымына ҡарамаҫтан, бынан бер ай самаһы элек Украина президенты Зеленский, фронттағы хәлдәрҙең мөшкөллөгөнә һылтанып, Украина Ҡораллы көстәренең Баш командующийы, үҙ һүҙлерәк, баш бирмәҫ Валерий Залужныйҙы вазифаһынан бушатҡайны һәм уның урынына Украина Геройы, генерал-полковник, Артемовск (Бахмут) ҡалаһын обороналауҙа ҙур юғалтыуҙарға юл ҡуйғаны өсөн "генерал200" ҡушаматлы Александр Сырскийҙы тәғәйенләгәйне.**

"Кисеүҙә аттарҙы алыштырмайҙар" тигән халыҡ әйтеменең был осраҡҡа ҡарата эҙемтәләре һуңыраҡ күренер, тик Зеленскийға бөгөнгөһө ҡиммәтерәк, буғай. Ә Залужныйҙы президент "үҙ теләге буйынса" Бөйөк Британияға илсе итеп ебәрмәксе. Ләкин Украина сәйәсмәндәре һәм мәғлүмәт сараларының "шыш-быш"ына ҡарағанда, Залужный ил башлығы вазифаһына потенциаль дәғүәсе булараҡ, Зеленскийҙың "йоҡоһон осора", имеш. Британияның Би-БИ-Си медиа-корпорацияһы хәбәре буйынса ла, элекке Баш командующий посынан китергә еңел генә хәл итмәгән, Зеленскийҙан тос ҡына сумма алғандан һуң ризалашҡан. Зеленскийҙың "тиҫкәре генерал"ға күпме түләгәне лә билдәле, тиҙәр хатта: Залужный Украина президентлығына дәғүә итмәһен, сәйәсәткә ҡыҫылмаһын һәм, ғөмүмән, мөмкин тиклем алыҫтараҡ булһын өсөн... 53 млн доллар биреп ризалатҡан. Ә шул арала Украина социаль селтәрҙәре яңы командующийҙың "һәләк булыуы" хаҡында имеш-мимеш тарата.

Шулай итеп, Рәсәй көстәре ҡыҫымы көндән-көн яҡыная барыуға ҡарамаҫтан, Украина властары үҙ-ара сыр-бор килә. Финанс ҡытлығы арҡаһында Украинала ҡайһы бер министрлыҡтарҙы бөтөрөү яйы ҡаралып ята. Ә бағыусыларҙан ни аҡса, ни ҡорал, ни ғәскәр юҡ. Киевҡа АҠШ-тан аҡса майһыҙ килеп етмәйәсәк, тип хәбәр итә NBC News.

Евросоюз эсендә лә үҙ-ара һатыулашыу бара икән: Британия Германияға "ҡыҙыҡлы" тәҡдим менән сыҡҡан, тип хәбәр итә Suddeutsche Zeitung гәзите. Лондон шундай шарт ҡуя: Украинаға тип тәғәйенләнгән Taurus ҡанатлы авиаракеталарын Германия Британияға бирә, ә Лондон үҙ сиратында үҙенең әллә ни алыҫ араға алдыра алмаусы Shadow ракеталарын Киевҡа оҙата. Бына бит, "Еврокомпания" буйынса әшнәләрҙең ысын йөҙө: ярҙам тигән хәлдә лә улар үҙ файҙалары хаҡына хәйлә ҡороуҙан да тартынмай. Ә беҙгә ни бынан эҫе лә, һыуыҡ та түгел, тик уларҙың иҫкергән булһа ла ракеталары егеттәребеҙ тарафынан һауала уҡ сәпкә алынып, юҡҡа сыға торһон! Франция президенты байтаҡтан бирле Көнбайыш илдәрҙән Украинаға ебәреү өсөн кеше теләнселәй. Уның был тәҡдименә Евроилдәрҙең күпселеге, шул иҫәптән, Германия, Чехия, Польша бындай ниәттәре юҡлығын белдерһә, Эстония, Латвия менән Литва бер ҙә "юҡ" тимәгән . Ә бына Францияның бөтөн партиялары ла президенттың был бәйләнсек тәҡдимен яҡлауҙан баш тартҡан. Яңылыҡтар таҫмаһы көн фразаһы итеп Рим папаһы Францисктың һүҙҙәрен килтерә. Швейцарияның RSI телекомпанияһына әңгәмәһендә понтифик Украинаға "Аҡ флаг тотоп бирелергә лә ҡыйыулыҡ кәрәк, һөйләшеүҙәр алып барырға бер ҙә оялмағыҙ",- тигән саҡырыу ташланы.

Украина менән бәйле ошондай ығы-зығылар айҡанлы ирекһеҙҙән Крылов басняһынан юлдар иҫкә төшә: "Дуҫтар-ара берҙәмлек юҡ икән, эштәре һис алға бармаҫ!", - ти ул Аҡҡош, Суртан һәм Ҡыҫала хаҡындағы билдәле мәҫәлендә. Аңлағанға - ишара.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Ҡыҙыл көртмәле

❖ Дизентерия, ашҡаҙан ауыртһа, быуындар ревматизмынан 10 ҡалаҡ ҡыҙыл көртмәлегә (брусника) 0,5 литр араҡы ҡойоп, 1 ай төнәтергә, болғатып торорға һәм һөҙөп, төпрәһен һығып ташларға. Емештәр ни тиклем оҙағыраҡ төнәтелһә, шул тиклем файҙалыраҡ. Дизентериянан көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан алда 1-әр балғалаҡ, ашҡаҙан ауыртҡанда шәкәргә 10-20 тамсы тамыҙып, йәки һыуға ҡушып, ә оҙайлы ревматизмдан көнөнә 3-4 тапҡыр 1-әр балғалаҡ эсергә.

❖ Дисбактериоздан емеште сәйгә ҡушып эсергә. Антибиотик менән дауаланғандан һуң да ошондай сәй эсеү кәңәш ителә.

❖ Үт ҡыуығында таштар булғанда 3 ҡалаҡ ҡыҙыл көртмәле һәм япрағы, 2 ҡалаҡ ваҡланған һары мәтрүшкә, 1 ҡалаҡ эт тегәнәгенә (череда трехраздельная) 3 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, йылыға төрөргә һәм 2 сәғәт төнәтеп һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 1 сәғәт алда аҙ ғына уртлап 1-әр стакан эсергә.

❖ Йүтәлләгәндә ҡаҡырыҡты йомшартыу өсөн ҡыҙыл көртмәле һуты сиробына шәкәр йәки бал шәрбәте ҡушып, 1-әр ҡалаҡ эсергә. Былай дауаланғанда сәй йәки һыу урынына еләк бешкән һыу эсеү файҙалы.

❖ Лейкоз булғанда ҡыҙыл көртмәле ашарға. 20 грамм киптерелгән япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтеп һөҙөргә һәм көнөнә3 тапҡыр яртышар стакан эсергә була.

❖ Бәүел юлында таш, колит, гастрит булғанда 100 грамм емеш өҫтөнә эҫе һыу һибергә, шунан 1 стакан ҡайнатып һыуытылған һыуҙа 6 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 4 тапҡыр ашарҙан алда яртышар стакан эсергә.

❖ Подагра, остеохондроз, артрит, полиартрит ауырыуҙарынан 100 грамм ҡыҙыл көртмәле япрағына 2,5 литр ҡайнар һыу ҡойоп, 2 сәғәт быҡтырырға, һөҙөргә һәм 1 стакан араҡы өҫтәргә. Шунан утҡа ҡуйып, 15 минут быҡтырырға, тик ҡайнатмаҫҡа. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда яртышар стакан ҡабул итергә. Был рәүешле 6 ай дауаланырға, полиартрит осрағында бәүелдәге ултырмалар бөткәнсе эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Беҙгә бәхет йылмайҙы! Иран яғы был күсермәне республикаға бүләк итеп кенә ҡалманы, ә боронғо ҡулъяҙмаға ҡағылырға һәм беҙҙе ҡыҙыҡһындырған бүлектәрҙе уҡырға мөмкинлек бирҙе. Төп нөсхәне, ғәҙәттә, бер кемгә лә күрһәтмәйҙәр.*



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Ҡушы, беле

**(Длинноносый (средний) крохаль)**



Һуна өйрәк ҙурлыҡ. Ата ҡушының башы һәм арҡаһы ҡара төҫтә, ҡорһағы - аҡ, ҡурылдайы көрән, ҡара таптары бар, ҡабырғалары сыбар биҙәкле, суҡышы менән тәпәйҙәре - ҡыҙыл. Инә ҡош һоро, арҡаһы көрән. Икеһенең дә соңҡаһында өлтөгө бар. Тауышы - ғыжылдаҡ.

Көньяҡ Уралда оя ҡороуы теркәлмәгән. Хәҙерге ваҡытта осоп барышлай Кама йылғаһы, Ағиҙел буйында, Ырымбур өлкәһе йылғаларында күреп ҡалырға мөмкин. Рәсәйҙең Европа өлөшөнөң төньяғында һәм Себерҙә балыҡсы өйрәктәрҙең киң таралған төрө. Диңгеҙ, күл, тау йылғалары ярҙарында көн итә. Ояһын ергә, таштар, ҡаялар йәки ҡуйы үлән араһына ҡора.

## Аҡбаш өйрәк, күк томшоҡ

**(Савка)**



Уртаса ҙурлыҡтағы ҡош, ҡабырғалары сыбар биҙәкле. Ата өйрәктең башы аҡ, ҙур булмаған ҡара төҫтәге өлтөгө бар, суҡышы зәңгәр. Инә ҡоштоң башы аҡ һыҙатлы ҡара-буҙ төҫтә, суҡышы - һоро. Ҡанаты сағыштырмаса ҡыҫҡа, ҡойроғо оҙон, һыуҙа саҡта ул өҫкә ҡарап тора. Яҡшы сума, осор алдынан һыуҙан байтаҡ ҡына йүгереп бара.

Волга буйының түбәнге яғында, Ҡалмыҡстанда, Көнбайыш Себерҙең Ҡаҙағстан менән сиктәш районлдарында оя ҡора. XIX быуат аҙағында Языково ауылы быуаһында, шулай уҡ Урал аръяғы күлдәрендә осратырға мөмкин булған. Үткән быуаттың 90-сы йылдарында Әбйәлил районы күлдәрендә лә күреүселәр булған, әммә был ғалимдар тарафынан тикшерелмәгән һәм раҫланмаған. Бөгөнгө көндә ҡайһы бер күлдәрҙә осоп барышлай ғына ял итеп китәләр, сөнки Ырымбур һәм Силәбе өлкәләрендә аҡбаш өйрәктең оя ҡороп йәшәүе бик мөмкин.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

БОРОН-БОРОН...

# ИБН ФАҘЛАНДЫҢ "РИСӘЛӘ"ҺЕН...

## Ирандар беҙгә бүләк итте

**Иран иле Евразия күсмә цивилизациялар музейына ғәрәп яҙыусыһы һәм сәйәхәтсеһе Әхмәт ибн Фаҙландың башҡорттар тураһында тәүге этнографик яҙмаһы бирелгән "Рисәлә" күсермәһен бүләк итте.**



Цифрлы күсермәне музейға Ирандың Мешхед ҡалаһындағы "Астан Кудс Разави" фондының үҙәк китапханаһында бирҙеләр. Фонд етәкселеге менән осрашыу Евразия күсмә цивилизациялар музейы проекты өҫтөндә эшләү өсөн йәлеп ителгән тикшеренеү төркөмөнөң Иранға сәфәре сиктәрендә ойошторола. Башҡортостан ғалимдары, Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ғилми хеҙмәткәрҙәре Әхәт Сәлихов һәм Илнур Бүләков Иран ҡалаларының ғилми-тикшеренеү һәм архив учреждениеларында булды.

Илнур Бүләков хәбәр итеүенсә, Башҡортостан делегацияһын китапхана директоры доктор Әбүлфәз Хәсәнабади ҡаршы алған һәм, боронғо ҡулъяҙмаларҙы килеүселәргә биреү ҡәтғи тыйылһа ла, уларға танышыу өсөн "Рисәлә"нең төп нөсхәһен биргән. "Проект етәксеһе Данир Ғәйнуллин беҙҙе Иранға "Рисәлә"нең цифрлы күсермәһен республикаға алып ҡайтыу бурысы менән ебәрҙе, - ти ул. - Беҙгә бәхет йылмайҙы! Иран яғы был күсермәне республикаға бүләк итеп кенә ҡалманы, ә боронғо ҡулъяҙмаға ҡағылырға һәм беҙҙе ҡыҙыҡһындырған бүлектәрҙе уҡырға мөмкинлек бирҙе. Төп нөсхәне, ғәҙәттә, бер кемгә лә күрһәтмәйҙәр. Беҙгә Рәсәйгә һәм Башҡортостанға ҡарата дуҫлыҡ, ихтирам билдәһе итеп ташлама яһалды".

Имам Риза исемендәге комплекс етәкселеге менән осрашыу файҙалы булды.

Башҡорт ғалимдары башҡорт халҡының тарихына ҡағылышлы мәғлүмәт, Урал тауҙары һәм башҡорт ерҙәре телгә алынған ҡулъяҙмалар эҙләүҙәре хаҡында һөйләне. Иран яғы Башҡортостан, Евразия далаһы тарихына ҡағылған яңы музей проекты хаҡында ҡыҙыҡһынып тыңланы. Осрашыу йомғаҡтары буйынса яҡтар документтар, цифрланған материалдар менән алмашыу өлкәһендә хеҙмәттәшлек тураһында һөйләшеп килеште.

Илнур Бүләков билдәләүенсә, фонд директоры киләсәктә улар өсөн кәрәкле ҡулъяҙмалар әҙерләүҙе алдан хәбәр итеүҙәрен һораған. Бындай ярҙам кәрәк. Китапханалар, музейҙар комплексы һәм документация үҙәге булған "Астан Кудс Разави" фонды бөтә Ислам донъяһында иң күренеклеләрҙең береһе һанала.

Фондтың үҙәк китапханаһы китаптар коллекцияһы ғына түгел, ә Ислам тарихына ҡағылышлы күп һанлы ҡулъяҙма һәм һирәк әҫәрҙәрҙән тупланған Халыҡ-ара Ислам тикшеренеүҙәре үҙәге булып тора. Мәҫәлән, китапханала 4 миллионға яҡын баҫма китап, 176 мең ҡулъяҙма иҫәпләнә. Дүрт баҫылған каталог бар, уларҙы өйрәнеү ҙә байтаҡ ваҡыт талап итә.

Мешхедтан һуң башҡорт ғалимдары Исфахан, Кума һәм Тегеран ҡалаларының китапханаларында һәм архивтарында була, шулай уҡ Кум университетында студенттар һәм Тегеранда Урта Азия күсмә цивилизациялар буйынса белгес менән осрашыуҙар үткәрә. Ғалимдарыбыҙҙы сәйәхәткә Кума ҡалаһынан әл-Мостафа халыҡ-ара университеты уҡытыусылары оҙатып йөрөй.

Белешмә. Ғәрәп яҙыусыһы һәм сәйәхәтсеһе Ибн Фаҙландың "Рисәлә"һе башҡорттар тураһында тәүге этнографик яҙма булыуы менән ҡиммәтле. 922 йылда сәйәхәтсе Ғәббәси хәлифе әл-Мөктәдир илселеге составында Хорезм һәм Бохара аша Итилгә (Волга) сәйәхәт ваҡытында башҡорттарҙа була. Сәфәр йомғаҡтары буйынса доклад яҙмаһы (Рисәлә) төҙөлә, унда болғарҙар, хазарҙар, башҡорттар, уғыҙҙар һәм урыҫтарҙың ғөрөф-ғәҙәттәре һәм көнкүреше тасуирлана. Әхмәт ибн Фаҙлан мәғлүмәттәре дөрөҫлөк менән айырылып тора, әммә ул бер нисә урынға (шул иҫәптән Хазарияға) бармай, ә улар тураһында үҙ яҙмаһында һөйләй. "Рисәлә"нең тәүге редакцияһы юғала. 13-сө быуатта был яҙыуҙың ҡыҫҡартылған редакцияһы Яҡут тарафынан "Муджам әл-бульдан" географик энциклопедик һүҙлегендә ҡулланыла. 1923 йылда был версия (һуңғы өлөшө булмаған) Ирандың Мешхед ҡалаһында имам Риза кәшәнәһе эргәһендәге китапханала табыла.

**Ләйлә АРАЛБАЕВА.**

АФАРИН!

# КҮРКӘМ ҒАИЛӘ НИГЕҘЕ...

## шәжәрә бит инде ул

**Март башында, Башҡорт ғаиләһе көнөндә, Өфө ҡалаһының Дим районында урынлашҡан 75-се "Аҡбуҙат" балалар баҡсаһында "Шәжәрә байрамы"нда ҡатнашырға насип булды. Ҡыуаныс тойғоһо кисереп, йәш быуынды тәрбиәләүҙә ғаиләнең алыштырғыһыҙ роль уйнауына ҡат-ҡат инанып ултырҙым. Эйе, татыу ғаилә - ул ил, йәшәйешебеҙ ҡото булыуы бәхәсһеҙ, сөнки тап ана шул татыу, ныҡлы ғаиләләр халҡыбыҙҙың киләсәген билдәләй ҙә инде.**

Сарала ошо баҡсаға балаларын йөрөткән ете ғаилә ҡатнашты. Уларҙа туған телдәренә, халҡыбыҙҙың тарихына, мәҙәниәтенә, йолаларына битараф булмаған балалар үҫә, тигән ышаныс ярала. Үҙенде "Башҡортмон!" тиһең икән, һиңә тиклемге быуындарҙы яҡшы белергә тейешһең, тигән талапты балаларҙың ныҡлы үҙләштереүе һиҙелеп тора: шәжәрәләрен ентекле өйрәнгәндәр. Был тәңгәлдә бигерәк тә Юлдашевтар ғаиләһе хайран итте. Улар ата-бабаларының исем-шәрифтәрен генә түгел, ә уларҙың тормош юлын да асыҡлаған. Нәҫел ебендә изге эштәре менән хәтерҙә ҡалырҙай шәхестәре менән ғорурланыуҙары ла һиҙелеп тора.

Дүрт балаға ғүмер биргән Мәзитовтар ғаиләһенә лә һоҡланмай ҡарау мөмкин түгел ине. Өс малай, бер генә бөртөк сәскә - Сара үҫкән был ғаилә ағзаларының күҙҙәрендә ихласлыҡ, йөҙҙәрендә нур. Бөгөн үҙҙәре барлаған тәрән тамырлы шәжәрә ағасынан килә кеүек ул ихласлыҡ һәм яҡтылыҡ. Өсәр бала үҫтергән Галиндар, Ғарифуллиндар, Хәбибрахмановтар ғаиләләре лә шәжәрәләрен ентекле өйрәнгән булыуы менән һоҡландырҙы. "Минең улым - беҙҙең шәжәрәнең туғыҙынсы быуыны", - тине лайыҡлы күтәренкелек менән Ғарифуллиндарҙың ғаилә башлығы.

Ғаиләлә өләсәй-олатай тәрбиәһенең баһалап бөткөһөҙ әһәмиәтен Хәбибрахмановтар ғаиләһе күрһәтте. Береһенән-береһе һылыу, талантлы өс ҡыҙ үҫкән был ғаиләлә "уталдырыусы" кеше - ул өләсәй, Рәсимә Миңлеғәли ҡыҙы икән. Үҙе бейеү оҫтаһы булған өләсәй ейәнсәрҙәрен матур итеп бейергә өйрәткән, ҡыҙҙарҙың ҡыйыулығы, булған һөнәрҙәрен күрһәтә белеү һәләте лә уның ярҙамы менән булдырылғандыр. Ҡыйыулыҡтары менән һоҡландырған Фазыловтар һәм Йыһангировтар ғаиләләре тураһында ла әйтмәй үтеү мөмкин түгел. Барыһына ла тик маҡтау һүҙҙәре яуҙырғы килә. Маҡтау һүҙҙәренә ҡушып, матур башҡорт ғаиләләренә Өфө башҡорттары ҡоролтайының һәм "Аҡ тирмә" милли-мәҙәни үҙәгенең Рәхмәт хаттары, бүләктәр тапшырылды.

Дим районындағы "Аҡбуҙат" балалар баҡсаһы бәләкәстәрҙе халҡыбыҙҙың тәрбиә традициялары нигеҙендә тәрбиәләүгә күп көс һала. Баҡсала бөтәһе 13 төркөм эшләй, барыһында ла тәрбиә процесын башҡорт телендә алып баралар. Әлбиттә, башҡа балалар баҡсаларындағы кеүек, бында ла башҡорт балалары ғына тәрбиәләнмәй, башҡа милләт балалары ла бар. Уларҙың ата-әсәләре учреждениеның уставы менән яҡшы таныш, шуға ла "Ниңә гел башҡорт телендә?" тигән һорау тыумай. Киреһенсә, рус, татар телле әсәй-атайҙар балаларын был баҡсаға теләп йөрөтә, сөнки мәктәптә башҡорт дәүләт телен өйрәнеү уларға күпкә еңелерәк биреләсәк икәнен яҡшы аңлай улар. Ә шәжәрәнде белеү - һәр милләт балалары өсөн дә ата-бабаларыңа, ғөмүмән, үҙеңә тиклем йәшәгәндәргә хөрмәт, ихтирамлы ҡараш тәрбиәләү сығанағы ул.

**Рәйсә КҮЗБӘКОВА,**
**"Аҡ тирмә" милли-мәҙәни үҙәге етәксеһе.**

✓ *Икенсе бер оригиналь табылдыҡтарҙан ике ҡаберҙән алынған ҡоролған борай бөртөктәрен атап була. Ҡыҙҙырылған ашлыҡ (ҡурмас) боронғо осорҙарҙан бирле ярым күсмә тормошта йәшәүселәрҙең ҡәҙимге аҙыҡтары иҫәбенә инә.*



*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Икенсе киҫәк. Урта быуаттар.

### Бишенсе бүлек. Көньяҡ Урал IV - VIII быуаттарҙа



### VI - VIII быуаттарҙа Көньяҡ Урал ҡәбиләләренең хужалығы һәм ижтимағи тормошо

Төбәктең тау алды районҙарына көньяҡ халыҡтарының турбаҫлы һәм кушнаренко төркөмдәре килеүе күсеп йөрөүсе хужалыҡтар өлөшөнөң артыуына килтерә. Әммә оҙайлы һәм күп ҡарлы ҡыш шарттарында, малдарға аҙыҡты ҡар аҫтынан тибенеп табыу мөмкинлеге булмағанлыҡтан, килмешәк ҡәбиләләрҙең тиҙ арала ултыраҡ тормош рәүешенә күсеүе тәбиғи. Күрһәтелгән планда төркөм-төркөм булып ҡалғә-ҡаласыҡтар, ҡеүәтле мәҙәни ҡалдыҡлы асыҡ торлаҡтар барлыҡҡа килеүе иң элгәре алдан мал аҙығы әҙерләүҙе (бесән сабыу) һәм малдарҙы ябып ҡышлатыуҙы аңлата. Күрәһең, бының өсөн элеккесә ағас ҡайырыһын, ҡарама һәм йыла кеүек ағастарҙың ботаҡтарын файҙаланыу ҙа мөһим сара булғандыр. Тау буйҙарына һәм тауҙарға йәйләүгә сығыу ғәмәлгә ингән. Туранан-тура дәлилдәр булмаған хәлдә лә, ҙур һәм көслө ырыу-ҡәбилә коллективтары, бигерәк тә дала зонаһында йәшәүселәр, быға тиклемге быуаттарҙа дах-сак-массагеттар һәм гундар кеүек үк, ҡыштарын традицион маршруттар буйынса Арал һәм Каспий буйы далаларына күсеп йөрөгәндер, тип фараз итеү тәбиғи.

Бахмут ҡәбиләләрендә малсылыҡ малдарҙы көтөүгә сығарыу юлы менән генә үҫеш алған. Шуныһы ҡыҙыҡлы, Бөрө ҡәберлегенең ҡайһы бер ҡәберҙәрендә ат ите урыны суҫҡа ите һалып ҡалдырылған. Көнсығыш Европаның урман халыҡтары өсөн был ҡәҙимге күренеш.

Ер эшкәртеү хужалыҡтың икенсе бер мөһим йүнәлеше булған, уның менән шөғөлләнеү эҙҙәре ҡәбиләләрҙең барса төркөмдәрендә лә табылған. Улар - Бахмут ҡәберлектәрендәге (Юғамаш, Ҡаратамаҡ һ.б.) тимер ураҡтар, турбаҫлы һәм кушнаренко ҡәбиләләре ҡаласыҡтарындағы (Имәндәш, Өфө-II) тирмән таштары. Ҡәҙимге археологик табылдыҡтар менән бер рәттән, турбаҫлы ҡәбиләләренең ер эшкәртеү менән бәйле оригиналь эҙҙәре асыҡланды. Яңы Турбаҫлы II ҡомартҡыһын тикшергән саҡта майҙаны 25-30 кв.м булған ярым ер өйҙәр тибындағы 5 торлаҡ табылды. Бер ер өйө янында диаметры 2 м, тәрәнлеге 1м тирәһе соҡор булыуы асыҡланды. Соҡорҙоң стеналары һәм төбө яҡшы итеп эшкәртелгән йоҡа таҡталар менән көпләнгән, был соҡор иген һаҡлағыс сифатында файҙаланылған. Ашлыҡ менән яртылаш тултырылған соҡор янғын ваҡытында зыянлаған, был хаҡта күмерләнгән борай (бойҙай) бөртөктәре һәм таҡта киҫәктәре һөйләй. Әйтергә кәрәк, ашлыҡты ошолай һаҡлау Көнсығыш Европаның ултыраҡ тормошта йәшәүсе, ер эшкәртеүсе ҡәбиләләре өсөн традицион ысул булып һаналған. Яҡынса 200 йыл үткәс (X б.) Ибн Фаҙлан Волга булғарҙарының игендәрен нисек һаҡлауҙары хаҡында ентекләп яҙып ҡалдырған. Ул яҙғанса, булғарҙар үҙҙәренең ҡунаҡтарын баллы эсемлек һәм бойҙай менән һыйлай, сөнки "уларҙың ерҙәре ҡара, һаҫыҡ, аҙыҡтарын һалып ҡуйыу өсөн биналары юҡ, шулай булғас, бер нисә көн генә үтеүгә ул боҙола, һаҫый (сереп) һәм уның менән файҙаланып булмай".

Икенсе бер оригиналь табылдыҡтарҙан Яңы Турбаҫлы ҡурғандарындағы ике ҡәберҙән алынған ҡорылған борай бөртөктәрен атап була. Ҡыҙҙырылған ашлыҡ (ҡурмас) боронғо осорҙарҙан бирле ярым күсмә тормошта йәшәүселәрҙең ҡәҙимге аҙыҡтары иҫәбенә инә. Ерләү йолаһында ҡулланыла торған аҙыҡ составын һәр саҡта ла быуаттар дауамында формалашҡан традициялар билдәләй, ошо йәһәттән VI - VIII быуаттарға ҡараған турбаҫлы ҡәбиләләренең ер эшкәртеү менән шөғөлләнеүен улар өсөн күнегелгән хәл, тип әйтеп була. Шулай итеп, археологик материал VI - VIII быуаттарҙа Көньяҡ Урал ҡәбиләләренең ер эшкәртеү хужалығы кимәленең сағыштырмаса юғары булыуын дәлилләй. Ошо дәүерҙә бар урындарҙа ла ер эшкәртеүҙең һабан ярҙамында башҡарылыуын раҫлау өсөн ныҡлы ерлек бар, тип фараз итеп була. Быға, ситләтеберәк булһа ла, Вятка йылғаһы буйындағы азелин һәм Урта Волга буйындағы именьков ҡәбиләләре ҡомартҡыларында һабан тештәре (һөргөстәре) табылыуын дәлил итеп ҡарау фарыз. Ғәмәлдә VI - VIII быуаттарға ҡараған барса ҡаласыҡтарҙа һәм тораҡтарҙағы ҡаҙыу эштәре барышында халыҡтың баҡыр, бронза һәм тимер металлургияһы менән шөғөлләнеүен раҫлаусы шлак киҫәктәре, тигель, ҡалып һәм башҡа предметтарҙың һыныҡтары һәм ҡалдыҡтары табылған. Әммә быларҙы раҫлаусы иң аныҡ материал сифатында ҡәберлектәрҙә табылған күп төрлө хеҙмәт һәм һуғыш ҡоралдарын, биҙәүестәрҙе атап була. Төрлө ҡомартҡыларҙа табылған ошо материалдар араһында ураҡ, балта, уймыр, ҡалаҡ ҡырғыс, ҡаптырма, уҡ башаҡтарының - урында яһалған барса предметтарҙың ғәмәлдә стандарт формала булыуы күҙгә бәрелеп тора. Тимәк, металлург-кузнецтар юғары махсуслашыу кимәленә эйә булған. Хужалыҡтың ошо өлкәһенең айырым һөнәр булараҡ формалашыуы хаҡында фараз итергә була.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# МӘХМҮТ ҠАШҒАРИҘАН



**"Аси - ҡарсыҡ. Барсган кешеләре һөйләшендә".**

Ошо һүҙ хәҙерге башҡорт әҙәби телендәге "әсә" һүҙенә ауаздаш. Алдараҡ боронғо төркиҙәрҙең "ача" йә иһә "әкә" һүҙҙәренең оло апай тигәнде аңлатыуы хаҡында яҙғайныҡ инде.

**"Ечи" - оло ағай"**

Был атаманың "ача" (апай) һүҙенә яҡынлығы үҙенән-үҙе беленеп тора.

**"Уҙу - ҡалҡыулыҡ. Ҡомло ҡалҡыулыҡты "кум уҙу" тиҙәр. Аргуларҙың Уҙукенд ҡалаһының исеме лә ошоға бәйле".**

Боронғо төркиҙәрҙең "уҙу" һүҙе телебеҙҙәге "оҙон" тигәнгә тура килгән хәлдә ул ер өҫтөнән ҡалҡып торған бейек урынға ҡарата ҡулланылғандыр, тип фараз итергә була.

**"Иҙи" - әфәнде, хужа. Әйтәләр: "Сү иҙи не тир" - минең әфәндем ни тиер?"**

Был осраҡта телебеҙҙәге "үҙе" тигәнебеҙҙең "эйә" һүҙенең бик боронғо варианты булыуына ышанып була.

"Бөйөктәрҙән бөйөк Аллаһты "Иҙи" тиҙәр. Әйтәләр: "Иҙимиз ярлығы" - Аллаһ ихтыяры".

**"Ара" - нимәнендер араһы. Шуға күрә әйтәләр: "Киши ара кирдим".**

Бында "ара" һүҙенең "ар" тамыры күҙгә бәрелеп тора. Ар - тәү телдә ер тигәнде аңлатҡан. Арауыҡ, аран, аръяҡ, арғы һәм башҡа ошондай тамырҙаш һүҙҙәр телебеҙҙә байтаҡ.

**"Ари - һағыҙаҡ, бал ҡорто. Бында ғәрәп теле менән тап килеү күренә, сөнки ғәрәп телендә бал "ари" тип атала, ә төркиҙәр бал етештереүсене шулай атай. Төрки чигилдар балды "ари йағы", йәғни ҡорт майы тип атай".**

Беҙҙең телебеҙҙә лә ошо боронғо төрки һүҙе һаҡланып ҡалған: "әре ҡорт" тип ата ҡортто нарыҡлайҙар.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ әҙерләне.**

**(Дауамы. Башы 42-се һанда).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 78*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Висла йылғаһында оборонала

58-се гв. атлы полкы командирының 1944 йылдың сентябрь-ноябрь айҙарындағы бойороҡтарына ярашлы, "Батырлыҡ өсөн" миҙалы менән бүләкләнеүселәр: миномет батареяһына мина ташыусы, гв. рядовойы Зөлҡәрнәев Ғүмәр (Белорет районының Ҡарталы ауылынан); 76-миллиметрлы батареяның орудие командиры, гв. сержанты Лапытов Миңлеғәле. Яраланыуына ҡарамаҫтан, атакаға килеүсе дошманды утҡа тотоуын дауам итә. Бүҙәк станцияһынан.

60-сы гв. атлы полкы командры бойороғона ярашлы, гв. рядовойы, разведчик Вәли Сәғиҙуллин "Батырлыҡ өсөн" миҙалы менән бүләкләнә. Ул Нуриман районының Башшиҙе ауылында тыуып үҫкән. Ул разведчиктар төркөмө составында 7 көн буйына Висла йылғаһының көнбайыш ярында плацдарм алыу маҡсатында алып барылған алыштарҙа әүҙем ҡатнаша. Гв. кесе сержанты, элемтә взводы телефонисы Мөхәмәт Байрамғолов (Баймаҡ районының Күсей ауылынан) разведчиктарҙы элемтә менән тотороҡло тәьмин итә. 16-сы гв. атлы дивизияһы командирының 1944 йылдың 4 майындағы бойороғо менән 60-сы гв. атлы полкы ҡылыссыһы Митрофан Белов Ҡыҙыл Йондоҙ ордены менән бүләкләнә: ул 22 апрелдә атлылар төркөмө составында Турья йылғаһын кисеп сығып, дошмандың 6 һалдатын юҡ итә; гв. сержанты Михаил Долматов, бер төркөм дошман һалдаттарын утҡа тотоп, уларҙы нығытылған терәк пунктын ташлап китергә мәжбүр итә, байтаҡ ҡына трофейҙарҙы ҡулға төшөрә; шул уҡ полктың 2-се эскадронының пулемет расчеты командиры, гв. сержанты Василии Коропов, Турья йылғаһы аша сығырға маташҡан дошман һалдаттары төркөмөн утҡа тотоп, 10-дан ашыу һалдатты ҡырып һала. Ошо уҡ бойороҡҡа ярашлы Турья йылғаһы буйында күрһәткән батырлыҡтары өсөн III дәрәжә Дан орденына лайыҡ булалар: 60-сы атлы полктың гв. рядовойы Александр Ермаков; гв. рядовойы Петр Карташов; гв. рядовой Наум Игишев; 2-се эскадрондың отделение командиры Иван Кравченко; ҡаҙаҡ егете разведчик Шайман Отуншаев; гв. рядовойы Динислам Халиҡов (ул Ҡырмыҫҡалы районының Моҡай ауылынан, быға тиклем ике Ҡыҙыл Йондоҙ ордены менән билдәләнгән).

Дивизия командирының 1944 йылдың 24 июлендәге бойороғо менән 32-се танк полкы яугирҙарынан Ҡыҙыл Йондоҙ ордены менән бүләкләнеүселәр: лейтенант, Т-34 танкы командиры Егор Замалин. Ул 22 июлдә үҙенең танкы менән Польшаның Хелм ҡалаһына бәреп инеп, дошмандың танкыға ҡаршы ата торған пушкаһын,расчеты менән 2 пулеметын 20 һалдатын сафтан сығара; лейтенант, еңел танкылар взводы командиры Федор Кирильченко немецтарҙың 2 дзотын юҡ итә; кесе лейтенант, еңел танк командиры Николай Манаев Люблин ҡалаһы урамдарында ҡыйыу хәрәкәт итә; разведка отделениеһы командир Геннадий Дубов Хелм ҡалаһында барған алыштарҙа һан яғынан өҫтөнлөк иткән дошман атакаһын кире ҡаға, ул III дәрәжә Дан орденына лайыҡ була. Шул уҡ орденға лайыҡ булыусылар: 32-се танк полкы разведчигы Ислам Фәтҡиев (Ҡалтасы районының Бараҙыбаш ауылынан); разведчик, рядовой Әхмәҙулла Шәйәхмәтов (Ғафури районының Толпар ауылынан).

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

**Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбленә - 85! Ошо уңайҙан Өфөлә "Бейеү - ул халыҡ күңеле" хореография сәнғәте фестивале асылды. Байрам саралары йыл буйы дауам итәсәк. 12 мартта үткән гала-концерт менән ошо изге эштәргә йомғаҡ яһала. Юбилей айҡанлы, данлы, матур традицияларға тоғро коллективҡа яңы уңыштар теләйбеҙ һәм ансамбль солистары, Башҡортостандың атҡаҙанған артистары Айбулат БАҺАУЕТДИНОВ һәм Рәзилә БИЛАЛОВА менән әңгәмә тәҡдим итәбеҙ.**

# БЕЙЕҮ -

**Иң тәүҙә уҡыусыларыбыҙҙы һеҙҙең менән яҡынданыраҡ таныштырырға ине. Бөтөн башланғыстың нигеҙе - тыуған ерҙә. Беҙ ҙә һөйләшеүҙе бала саҡтан башлайыҡ.**

**Айбулат:** Мин үҙем Мәләүез ҡалаһында үҫтем. Атай-әсәйем Стәрлебаш районының Табылды ауылынан. Бала сағым күбеһенсә шул яҡта үткәнлектән, Стәрлебаш районын да тыуған ерем тип һанайым. Тимербай олатайымды ауылда "Иң беренсе бейеүсе" тип йөрөттөләр. Уға эйәреп, бәлки, бәләкәй саҡтан бейергә яраттым. Халыҡ көйөмө, замансаһымы, айырып торманым. Олатайым үҙе лә мине ел хуплап тора ине. "Йә, ҡунаҡтарға бейеп күрһәт әле", тип дәртләндереп, бейетеп, хатта аҡса ла бирә торғайнылар.

Фәйзи Ғәскәров исемендәге Халыҡ бейеүҙәре ансамблен иң тәүҙә телевизорҙан күрҙем. Бер байрам уңайынан сығыш яһанылар, үҙе генә түгел, был сарала Учалынан "Ләйсән" һәм тағы бер нисә ансамбль бергәләшеп, "Гөлнәзирә" бейеүен бейенеләр. Шул тиклем күп кешенең башҡорт бейеүен камил, матур башҡара алыуын иҫем китеп ҡарап ултырҙым. Нык оҡшаны. Ана шунан башлап башҡорт бейеүенә ғашиҡмын.

Артабан Стәрлетамаҡ филармонияһында быуын ныҡыттым. Етәксебеҙ Башҡортостандың халыҡ артисы Риф Ғәбитовтан оҫталыҡ серҙәренә төшөндөм. 2010 йылда әрмелә хеҙмәттә булып, бер йылдан Стәрлетамаҡҡа элекке эшемә кире ҡайттым. 2014 йылға тиклем эшләп, Фәйзи Ғәскәров исемендәге Халыҡ бейеүҙәре ансамбленә күстем. Коллективҡа ҡапыл ғына инеп киттем, тип әйтә алмайым, сөнки Стәрлетамаҡ бейеү ансамбленен үҙ бейеү стиле бар, унда Хәлил Ишбирҙин ҡуйған ҡағиҙәләр менән бейенем. Шуға ла күп йылдар бейегәс, хәҙер был сәнғәтте мин яҡшы үҙләштерҙем, тип уйлай инем. Ләкин яңы эш урынында күп нәмәгә өйрәнергә тура килде. Рим Сәлимйән улы Әбделмәнов бейеүҙең иң төп нигеҙҙәре буйынса минең менән өс көн шөғөлләнде. Был академик ансамбль, классик бейеүҙәр менән ҡайһы бер ҡанундар нык бәйләнгән: ҡулдарҙы нисек тотоу, тыпырлатыу һ.б. Сәхнәлә үҙемде тотоуға бәйле бында өйрәнгән ҡағиҙәләр техника һәм эстетик йәһәттән юғарыраҡ. Бейеү тәатрында Риф Ғәбитовтың "Еҙ үкҫә"һен бейей торғайныҡ, уны ансамблдә лә бейейбеҙ, шулай ҙа башҡарыу стиле айырыла. Һәр номерҙың үҙ тарихы, үҙ сюжеты, үҙ холҡо бар. Теге йәки был номер ниндәй темпераментта башҡарылырға тейеш? Артист образды нисек, ни рәүешле бирә, күрһәтә?

Был осраҡта техник яҡтан матур башҡарыу хатта икенсел тип тә уйлайым, сөнки ул инструмент ҡына. Сәхнә образы ҙур роль уйнай. Иң мөһиме, образды эмоциональ яҡтан дөрөҫ биреү.

**Рәзилә:** Алыҫ Ҡаҙағстанда тыуһам да, бәләкәстән Баймаҡ районында үҫкәс, уны тыуған яғым тип һанайым. Ярат ауылында мине Гөлдәр апай Ғәҙелшина бейергә өйрәтте. Ул миңә "Оҙонсәс" бейеүен һалды. Мәктәптә тарих уҡытыусыһы Гәүсәриә апай сәнғәт серҙәренә өйрәтә башланы. Гәүсәриә апай ижади кеше ине. Башта мәктәптә, унан ауыл клубында бейенем. Концерт номерҙары менән һәүәһсылар янына бара торғайныҡ. Ҙурая башлағас, әсәйем: "Күрше ауылдан Гөлнара туғыҙҙан һуң Учалы училищеһында уҡыны, шунда бараһыңмы әллә?" - тине. Мин шатланып риза булдым, бына шулай үҙемдең хыялға табан юл һалдым. Учалы сәнғәт һәм мәҙәниәт училищеһына имтихандар биреп, 2002 йылда уҡырға индем. Гөлназ Рәис ҡыҙы Ғайсарова халыҡ бейеүҙәрен өйрәтте, тип кенә әйтеү аҙ, ул үҙенең бөтә булған белемен беҙгә тапшырҙы.



Студент саҡта "Койон" ансамблендә лә бейенем. Конкурстарҙа ихлас ҡатнаштыҡ. Бөтә Рәсәй Дельфы уйындарында ла сығыш яһаныҡ. Өфөлә лә ҙур саралар булһа, беҙҙе саҡыралар, киләбеҙ, ҡатнашабыҙ. Өсөнсө курста уҡығанда бейергә килгән саҡта Башҡортостандың халыҡ артисы Гүзәл Әсәҙуллина "Койон" ҡыҙҙарын теҙеп, берәмтекләп ҡарап сыҡты ла минән: "Ҡасан уҡып бөтәһең?" - тип һораны. Әлбиттә, ансамблгә килеү беҙҙең өсөн бойомға ашмаҫ бер хыял ғына ине, шулай ҙа ошо һөйләшеү минең иҫтә ҡалды. Ә Гүзәл Рәшит ҡыҙы беҙҙең өсөн бейеү алиһәһе булып күренде. Мин беренсе курста уҡығанда, беҙҙең ансамблдең репетиторҙары буласаҡ бейеүселәрҙе 2-4-се курстағылар араһынан һайлап ала торғайнылар. Шулар араһынан Нәркәс Нәбиева, Эльвира Муллағолова әле лә Фәйзи Ғәскәров ансамблендә бейейҙәр. Уларҙан башҡа ла бер нисә егет-ҡыҙ килеп, ансамблгә урынлаштылар.

Мин училищены бөткәс, үҙем Өфөгә килеп тикшерелдем. Өс ай һынау мөҙҙәте менән коллективҡа алдылар. Ошо ҡыҫҡа ваҡыт эсендә өйрәнеп, ныҡынып, репертуарҙы үҙләштереп бейеп киттһән, ансамблдә ҡалаһың инде. Был һынауҙы лайыҡлы үттем, 2006 йылдан үҙем хыял иткән ансамблдә эшләйем.

**Һеҙҙең эшегеҙ гастролдәр менән тығыҙ бәйле. Сит яҡтарҙа ла йыш булырға тура килә. Айырыуса ниндәй мәлдәр иҫтә ҡалды?**

**Айбулат:** Беҙгә күп йөрөргә, күп матур ерҙәр менән танышырға тура килә. Ҡайһылыр ил мәғрүр тауҙары, ҡайһылыр ил архитектураһы менән таң ҡалдыра. Ләкин һәр сәфәрҙән тыуған Башҡортостаныма һағынып ҡайтам, шунда тыуғаныма, шунда йәшәгәнемә ҡыуанып бөтә алмайым. Үҙебеҙҙең ил эсендә йөрөгәндә лә шулай тип әйтә алам, бындай бай мәҙәниәтле һәм бай тарихлы республиканы күргәнем юҡ. Эйе, һәр илдең иғтибарға лайыҡ яҡшы яҡтары етерлек, күрге, ныҡыраҡ танышҡы килә, ләкин тормошом үҙемдең республиканан айырылғыһыҙ.

**Рәзилә:** Сит илдәргә гастролгә үҙебеҙҙең халҡыбыҙҙың мәҙәни өлгөләре булған "Зарифа", "Гөлнәзирә", "Ете ҡыҙ", "Еҙ үкҫә" кеүек һәм шаян ҡыҙҙар бейеүҙәрен алып барабыҙ. Милли кейемдәр шулай уҡ бик әһәмиәтле. Халҡыбыҙ нимә менән шөғөлләнгән: ир-егет һунарсылар, ҡытын-ҡыҙ йорт-ҡул эштәре - бөтәһе лә ҡыҙыҡ. Сит илдекеләр беҙҙе бик әүҙем, һуштары китеп бармаҡ осона тиклем барып етә торған эске кисереш, энергетика һалына. Һәр бер секунд эсендә тарихи ваҡиға сағыла. Һәр номер халыҡ хәтеренән юйылмаған тарихты бәйән итә. Тамашасы бындай бейеүҙәрҙе ҡарарға ярата. Бейеүсе үҙенең матурлығын, йәки саялығын, тәүәккәллеген, хәрәкәт камиллығын ғына күрһәтмәй, ә тарихты һөйләй, тимәк, уның үҙ сюжеты бар. Беҙҙең бейеүҙәребеҙ - техник һәм хислелек йәһәтенән дә ҡатмарлы. Бигерәк тә йәш бейеүселәргә быны аңлау һәм тамашасыға шуны еткереү ауырыраҡ. Һәр халдә, ошо талапты аңлаған, шул маҡсатҡа ынтылған бейеүсегә өйрәнеүе еңелерәк. Быны мин үҙемдән сығып та әйтә алам, сөнки мине иң элек техника, йәғни матур итеп бейеү ҡыҙыҡһындыра торғайны. Фәйзи Ғәскәров ансамбленә килгәс, бейеүгә икенсерәк ҡарай башланым, ҡаршы ала, сөнки тире кейемдәр, уҡ-һаҙаҡ, ҡалҡан, сынлаған тәңкәләр, йылтыр таштар, ҡашмау - былары экзотика тип ҡабул итәләр. Ҡатын-ҡыҙҙың сәсе икенән ярып үрелгән, грим бер иш һалынған, шуға беҙҙе игеҙәктәр тип ҡабул итергә була. Бейеүҙәргә иҫтәре китә - ҡатын-ҡыҙҙың һығылмалы булыуы һоҡландырғыс улар өсөн. Ҡайҙа ғына барһаҡ та, былай ғына ҡарап ултырған кеше булманы. Хайран ҡалып ҡул сабалар. Концерттан һуң да сәхнәгә менеп, кемдер бүләк бирә, кемдер үҙенең тойғолары менән бүлешә.

**Айбулат:** Һәр халыҡ бейеүе үҙенсәлекле. Ләкин башҡорт бейеүе ҡатмарлыраҡ. Бүтәндәрҙекенән ни яғы менән айырыла? Бейеүҙәребеҙҙә һәр хәрәкәттең үҙ мәғәнәһе бар. Ҡыҙҙар бит матур хәрәкәт яһап ҡына ҡалмай, ә үҙҙәренең тормошон һөйләй. Һунарсының ауға сығыуы йәки яугир егеттәрҙең ҡылыс алышы ниндәй динамикалы! Һәр хәрәкәттә

*Беҙгә күп йөрөргә, күп матур ерҙәр менән танышырға тура килә. Ҡайһылыр ил мәғрүр тауҙары, ҡайһылыр ил архитектураһы менән таң ҡалдыра. Ләкин һәр сәфәрҙән тыуған Башҡортостаныма һағынып ҡайтам, шунда тыуғаныма, шунда йәшәгәнемә ҡыуанып бөтә алмайым. Үҙебеҙҙең ил эсендә йөрөгәндә лә шулай тип әйтә алам, бындай бай мәҙәниәтле һәм бай тарихлы республиканы күргәнем юҡ. Эйе, һәр илдең иғтибарға лайыҡ яҡшы яҡтары етерлек, күрге, ныҡыраҡ танышҡы килә, ләкин тормошом үҙемдең республиканан айырылғыһыҙ.*



✓ **Сөнки бәҙҙекеләр бик күп яуҙарҙа ҡатнашҡан, ул рухлы яугир. Темперамент менән бергә асыҡ күңеллелек хас беҙгә - беҙ берәүгә лә насарлыҡ теләмәйбеҙ, ә был сифаттарҙы бергә сағылдырыу еңел түгел.**



һәм был миңә артабан камиллашырға ярҙам итте.

**Рәзилә:** Мин шуның менән дә ғорурланам: беҙҙең ансамблгә нигеҙ һалған Фәйзи Ғәскәровтың һәр бейеүе мини-спектакль бит ул. "Ете ҡыҙ" легендანан алып һалынған. "Төнъяҡ амурҙары"ның тарихын яҡшы беләбеҙ. Ул бейеүҙе ҡараһаң, күҙҙән йәштәр килеп сыға: ата-бабалар быңа ниндәй булған, үҙ ерҙәре өсөн йән аямағандар, баш һалғандар... Йәнде өтөп алған хәтер. Шуларҙы онотмормай, тарихты мини-спектакль, бейеү формаһында мәңгеләштереү - шәп күренеш. Фәйзи Ғәскәровтың таланты һәм ул һалған бейеүҙәр менән ғорурланмау мөмкин түгел.

**Айбулат:** Беҙҙең эшкә оркестрыбыҙ ҙа ҙур өлөш индерә. Оркестрҙы ойошторорусы һәм етәксеһе Риф Вәли улы Моратшин заманында Фәйзи Ғәскәров менән бергә эшләгән. Уға 85 йәш. Һәр бер айырым бейеүгә - айырым көй, һәр береһе ысын сәнғәт әҫәре, гә барып, тарихты иҫкә алып, сәскәләр һалдыҡ.

**Рәзилә:** Концерттан һуң күп яҡташтарыбыҙҙы осраттыҡ. Улар унда юл төҙөү, ҡаланы төҙөкләндереү бригадаларында эшләйҙәр. Тап беҙ барған көндә юл төҙөүселәр бер объектты тапшырған булғандар, һәм концерт менән беҙ килеп төштөк! Улар өсөн ысын байрам булды ла ҡуйҙы. Концертты илашып ҡарайҙар, бөтөү менән аяғүрә тороп, "Спасибо!" тип ҡысҡырып ҡул сабалар.

**Айбулат:** Хәҙер ситтә йөрөгән яҡташтарға заман технологиялары ярҙам итә. Видеонан беҙҙең концерттарҙы ҡарай алалар. Салауат увертюраһын беҙҙең милләттәштәр гелә түгел, урыстар ҙа тыңлай. Ҡасандыр беҙҙең репертуарҙа ошо увертюраға Салауат бейеүе бар ине. Шул бейеүҙең яҙмаһын ебәр әле, тип, миңә мөрәжәғәт иткәндәре булды. Беҙ репертуарҙа хәрби бейеүҙәргә лә иғтибар итәбеҙ. Яңыраҡ Башҡортостандың атҡаҙ-

ҡыҙ". Был бейеүгә сағыштырмаса иртә баҫтым, тип уйлайым, сөнки "Ете ҡыҙ" кеүек бейеүҙәргә әләгеү бик ауыр. Эшкә башлағанда "Гөлнәзирә" һәм башҡа классик бейеүҙәрҙә йыш бейеп, бейеү нигеҙҙәрен өйрәнергә, ансамбль мәктәбен үтергә тейешбеҙ. Ансамблгә килеп, ике йыл үткәс, мин "Ете ҡыҙ"ға баҫтым. Шуға бик яҡын ул миңә. Көйө лә, легендаһы ла күңелемә хуш килеп тора.

**Айбулат:** Минең дә иң яратҡан бейеүҙәрем - башҡорт бейеүҙәре. Риф Ғәбитов һалған һәм әле лә репертуарҙа булған "Еҙ үксә", артабан "Гөлнәзирә" "Зарифа", "Төнъяҡ амурҙары" һәм "Бөркөткә һунар" тигән милли уйын.

"Еҙ үксә"лә өсөнсө солоны башҡарам. Ғөмүмән, солоны башҡарыу - ул ҙур яуаплылыҡ. Ә бында бер букетта дүрт соло. Техник яҡтан ҡатмарлы, темпераментлы бейеү башҡорт рухын бик сағыу итеп һүрәтләй. Ҡайны берәүҙәр бейеүгә агрессия өҫтәһәң, матур, яр-

мейстер Игорь Моисеев класында һабаҡ ала, артабан Ленинград хореография училищеһында уҡыта. Талантлы егетте Игорь Моисеев үҙенә художество етәксеһе итеп ала. Артабан ул Ғәскәровҡа Башҡортостанға ҡайтып, ансамбль ойошторорға кәңәш итә. Ғәскәров шатланып риза була һәм ватанына ҡайтып, шундай шәп ансамбль ойоштороп ебәрә. Моисеевтың ышанысы аҡлана: беҙҙең республикала, беҙҙең мәҙәниәттә Фәйзи Ғәскәров оло шәхес булып ҡаласаҡ.

Балалар менән эшләгән саҡта башҡорт хореографияһы тарихы менән дә таныштырабыҙ. Ғәскәровтар фронтта госпиталдәрҙә булған, тип һөйләһәң, "Ни өсөн?" тип һорай балалар. Һуғыш - ул юғалтыуҙар, һәләкәт, быны кисереүе ауыр, шуға ла артистар һалдаттың рухын күтәрергә тырышҡан, тибеҙ. Фәйзи Ғәскәров менән беҙҙең концерт коллективы килгән саҡта һалдаттар теремекләнеп киткән, яралылар

һында оҫталыҡ дәрестәре үткәрҙек. Әйткәндәй, Айбулат менән оҫталыҡ дәрестәре буйынса видеояҙма сығарҙыҡ, уны интернетта табырға була.

**Айбулат:** Фәйзи Ғәскәров ансамбле эргәһендә Башҡортостандың халыҡ артисы Альбина Нуриманова етәкләгән балалар студияһы бар. Мин унда педагог булараҡ, 2015 йылдан алып эшләйем. Студияны тамамлаусыларҙың күбеһе һөнәри училищеларға уҡырға инәләр. Уны тамамлап, беҙҙең ансамблдә эшләгәндәр ҙә бар, мәҫәлән, Арина, Ҡәҙрия исемле ҡыҙҙар хәҙер беҙҙә бейей. Рәсәй буйынса таралғандар, тиһеҡ тә була. Студияла төркөмдәр күп, ике йөҙләп уҡыусы шөғөлләнә. Шулай уҡ мин үҙемдең "Бүре" тигән бейеү студиямды астым. Бынан тыш, Рәзилә менән икебеҙҙе төрлө коллективтар саҡырып тора. Райондарҙан мөрәжәғәт итәләр. Постановщиктар булараҡ ярҙам итәбеҙ. Фәйзи Ғәскәров ансамблендә үҙебеҙ ниндәй белем алғанбыҙ, шуны

# УЛ ХАЛЫҠ КҮҢЕЛЕ

һәр композиция ҙур ижади эш. Ҡайҙа ғына барһаҡ та, беҙҙең оркестрҙы маҡтайҙар.

▸ **Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ансамблдә эшләгән актерҙар фронтовиктар алдында ла сығыш яһағандар.**

**Рәзилә:** Эйе, улар яу яланына барып, үҙҙәренең сығышы менән аҙ булһа ла һалдаттарҙы рухландырғандарҙыр. Улай ғына ла түгел, Фәйзи Ғәскәров фронтҡа китергә теләк белдереп, бер нисә тапҡыр мөрәжәғәт итә. Ул 1942 йылда фронтҡа китә лә, ләкин 1943 йылдың аҙағында Башҡортостандың иң танылған балетмейстерын, иң тәүге профессиональ бейеүсеһен бейеү сәнғәтенән киләсәге хаҡына тип, кире Өфөгә ҡайтаралар. Ул үҙе 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы һалдаттарына ла бейеү һалған. Шайморатов генерал менән ҡуша бер-ике бейеүсене алып, концерт бригадаһы менән йөрөгәндәр. Мөхәмәт Иҙрисов, Хазина Мағазова фронтта булып ҡайтҡандар

**Айбулат:** Мөхәммәт Иҙрисовҡа туған тейешле егет миндә шөғөлләнә. Бөгөн быуындар бәйләнеше дауам итә. Тағы ла бер туғаны Илһам Иҙрисов беҙҙең ансамблдә эшләй. Ансамблдең бейеүселәре госпиталдәрҙә сығыш яһағандар. Былтыр беҙ ҙә Мелитополь, Бердянск, Красный Луч ҡалаларына гастролгә барҙыҡ. 2022 йылда Луганск филармонияһында сығыш яһағайныҡ. Егеттәребеҙ Әстерхандағы госпиталдә лә сығыш яһаны. Красный Луч ул беҙ шефлыҡҡа алған ҡала, уны, программаға өҫтәп, үҙебеҙ барып күрергә теләнек. Ваҡыт табып, концерт алдынан генерал Шайморатов һәләк булған ер-

анған артисы Роберт Хәмиҙуллин "Әсе әрем хәтере" тигән бейеү ҡуйҙы. Походтарҙан һуң, үҙенең ватаны Башҡортостанға ҡайтыусы яугир образы сағылдырыла унда. Һуғышҡа киткәндә иҫләр өсөн үҙҙәре менән төрлө нәмә - кемдер тупраҡ, кемдер бетеү алған бит. Был яугирҙә тыуған ер әреме бар. Махсус хәрби операция башланғас, директорыбыҙ Назир Нияз улы Байегетов "Шайморатов генерал" бейеүен һалды. Легендар шә-

һыу була, тип уйлай. Юҡ, бейеүҙә агрессия күрһәтергә ярамай. Был башҡортҡа хас нәмә түгел, динебеҙ ҙә беҙҙең менталитетҡа йоғонто яһаған, ул алсаҡ, изге күңелле. Ә темперамент булырға тейеш, сөнки бәҙҙекеләр бик күп яуҙарҙа ҡатнашҡан, ул рухлы яугир.

Темперамент менән бергә асыҡ күңеллелек хас беҙгә - беҙ берәүгә лә насарлыҡ теләмәйбеҙ, ә был сифаттарҙы бергә сағылдырыу енел түгел.



***Милли кейемдәр шулай уҡ бик әһәмиәтле. Халҡыбыҙ нимә менән шөғөлләнгән: ир-егет һунарсылар, ҡытын-ҡыҙ йорт-ҡул эштәре - бөтәһе лә ҡыҙыҡ. Сит илдекеләр беҙҙә бик әүҙем, һуштары китеп ҡаршы ала, сөнки тире кейемдәр, уҡ-һаҙаҡ, ҡалҡан, сыңлаған тәңкәләр, йылтыр таштар, ҡашмау - быларҙы экзотика тип ҡабул итәләр. Ҡатын-ҡыҙҙың сәсе икенән ярып үрелгән, грим бер иш һалынған, шуға беҙҙә игеҙәктәр тип ҡабул итергә була. Бейеүҙәргә иҫтәре китә - ҡатын-ҡыҙҙың һығылмалы булыуы һоҡландырғыс улар өсөн.***

хескә һәйкәл асылғанда был бейеү менән сығыш яһаныҡ. Уны Красный Лучҡа ла алып барҙыҡ.

▸ **Үҙегеҙҙең күңелегеҙгә иң яҡыны булған, яратҡан бейеүегеҙ бармы?**

**Рәзилә:** Бар, әлбиттә. Минең иң ныҡ күңелемә ятҡаны - башҡорт бейеүҙәре. Беҙ бит башҡа халыҡтарҙың да бейеүҙәрен бейейбеҙ. Репертуарыбыҙ бай һәм ҙур. Беҙгә яңы бейеү һалырға кәрәк булһа, шул халыҡтың белгесе-ҡуйыусыһы килә. Ул биргән манераны үҙебеҙгә отоп алабыҙ. Эскиз буйынса күркәм, үҙенсәлекле кейемдәрен дә тегәбеҙ. Төрлө халыҡ бейеүҙәре башҡарабыҙ, әммә башҡорт халҡының бейеүҙәре мине үҙенә нығыраҡ тарта. Яратҡан бейеүҙәремдең береһе - "Ете

Сөнки сюжет буйынса төрлө ырыуҙан дүрт егет осраша, таныш түгелдәр, шуға бер-береһенә агрессия күрһәтергә тейештәр һымаҡ, сөнки улар ситяттарҙан үҙҙәрен ырыу ерҙәрен һаҡларға әҙер булыуҙарына ишаралай. Һаҡлай алалар, шул уҡ ваҡытта киң күңелле булып ҡалалар. Бейеүселәрҙең бурысы ошо элементтарҙы камил күрһәтеү. Тап шулай килеп сыға ла, сөнки тамашасы бейеүҙе яратып ҡарай. Әлеге көндә "Еҙ үксә"не бик һәйбәт состав башҡара. Бейеүсе өсөн был бейеүгә әләгеү ҙур бәхет.

Ни өсөн классик позицияларҙы үтергә тырышыу мотлаҡ һәм беҙ быға нинә ынтылабыҙ? Фәйзи Ғәскәров үҙе классик бейеүсе, Ҙур театр ҡарамағындағы хореография техникумын тамамлай. 1928-1932 йылдарҙа данлыҡлы балет-

тиҙерәк һауығырға тырышҡан, сығыштарҙы ҡарап, тормош матурлығын нығыраҡ аңлағандар, йәшәргә ынтылғандар.

▸ **Рәзилә, Айбулат, һеҙ тәжрибәле бейеүселәр, ә үҙегеҙҙең уҡыусыларығыҙ бармы?**

**Рәзилә:** Кемдер берәйһе бейергә теләк белдерһә, мин уларҙы рәхәтләнеп бейеү серҙәренә өйрәтәм. Балалар баҡсаһында ла һөнәребеҙҙе күрһәтәбеҙ. Рәсәй буйлап гастролдәргә сыҡһаҡ, башҡа төбәктәрҙә лә бейергә теләүселәр мөрәжәғәт итә, ҡуш ҡуллап ярҙам итәбеҙ. Ул яҡтарҙа йәшәгән балалар ҙа өйрәнһендәр, тибеҙ, беҙ бит бының менән милли бейеүебеҙҙе пропагандалайбыҙ. Мәскәүҙә лә шундай һабаҡтар биргәнебеҙ булды. Яңыраҡ Силәбе ҡала-

йәш быуынға бирергә тырышабыҙ. Педагог булараҡ, мин күп эшләйем. Был ансамблгә килгәнгә тиклем әле мин Стәрлетамаҡ мәҙәниәт техникумында ла уҡытып алырға өлгөрҙөм.

▸ **Үҙегеҙҙең ансамблдең байрамын нисек билдәләйһегеҙ?**

**Рәзилә:** Был аҙнала, 12 мартта, "Башҡортостан" дәүләт концерт залында ике бүлектән торған концертыбыҙ үтте инде. Унда башҡа төбәктәрҙән беҙгә дуҫ коллективтар ҙа килде. Тәүге бүлек тамашаһы ошо коллективтар менән берлектә ойошторолдо, икенсе бүлегендә тотошлайы менән үҙебеҙ сығыш яһаныҡ. Башҡорт сәхнә хореографияһы Фәйзи Ғәскәровтан башланған, ул 1939 йылда "Зарифа" бейеүен һала. Беҙ ҙә концертыбыҙҙы тап ошо бейеүҙән башланыҡ.

**Айбулат:** Эйе, 85 йыллылыҡты "Бейеү - ул халыҡ күңеле" тип аталған ҙур фестиваль менән асып ебәрҙек. Был Фәйзи Ғәскәров әйткән һүҙҙәр, шуға ла уны үҙебеҙҙең девиз итеп алдыҡ. Фестивалгә төрлө төбәктәрҙән үҙ халҡының йөҙөк ҡашы һаналған коллективтар, мәҫәлән, Мәскәүҙән "Березка", Силәбенән "Урал", Дағстандан "Лезгинка" ансамблдәре килә. Былтыр үткән фестивалгә Липецкиҙан "Казаки России," Себерҙән һәм Үзбәкстандан танылған ансамблдәр килгәйне. Был яңы проекты Ф. Ғәскәровтың 110 йыллығына арнап башлап ебәргәйнек. Фестиваль йыл һайын булмаясаҡ, ике-өс йылға бер тапҡыр үткәрергә ниәт. Юбилей йылы булғас, быйыл да уны ҙур дәрт, теләк менән эшләнек.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА әңгәмәләште.**

✓ ***Бөгөнгө профессура иҡтисад закондарын аңлата алмай, сөнки үҙҙәре бер нәмә лә белмәй. Улар иҡтисад иҡтисадсылар эше, тип уйлай. Әммә улай түгел. Донъя иҡтисады менән психологтар һәм был уйында ҡатнашыусылар идара итә.***






Миллиардер Джон Хайцман үҙ офисының 42-се ҡатында яйлап шинә, үлеме яҡынайғанын көтә. Офистың был ҡаты тулыһынса уның уңайлыҡтары өсөн махсус эшләнгән. Ике йоҡо бүлмәһе, тренажер залы, бассейн, ҡунаҡ бүлмәһе, ике эш кабинеты - һуңғы өс йылда ул ошо арауыҡта йәшәй, бер ҡайҙа ла сығып йөрөгәне, үҙенең шәхси финанс-сәнәғәт империяһы урынлашҡан этаждарға тиҙ йөрөүсе лифтта бер тапҡыр ҙа төшөп урағаны юҡ. Вертолет майҙансығы булған ҡыйыҡҡа ла менгәне, хужаларының һәр теләгән шундуҡ үтәргә әҙер дежур экипажды өс йыл дауамында бер тапҡыр ҙа күргәне юҡ.

Джон Хайцман аҙнаһына өс тапҡыр эш кабинеттарының береһендә дөрт ышаныслы ярҙамсыларын ғына ҡабул итә. Оҙаҡҡа бармаған, уҙа килә, ҡырҡ минутлыҡ кәңәшмәләрҙә уларҙың докладтарын иҫе китмәй генә тыңлай ҙа, ҡай саҡ ҡыҫҡа ғына күрһәтмәләрен бирә. Миллиардерҙың бойороҡтары тикшерелмәй, бер һүҙһеҙ һәм ваҡытында үтәлә. Джон Хайцман империяһының финанс хәле йыл һайын 16,5 процентҡа арта бара. Һуңғы ярты йылда, Хайцман ниндәй ҙә булһа кәңәшмәләр үткәрмәүенә ҡарамаҫтан, төшөм кәмемәй. Үҙе төҙөгән һәм ныҡлы көйләнгән идара итеү механизмы өҙөклөкһеҙ эшләй.

Миллиардерҙың ысынбарлыҡта күпме килеме барлығын бер кем дә белмәй, уның фамилияһы мәғлүмәт сараларында бөтөнләй күренмәй. "Аҡсалар ығы-зығыны яратмай" - был Хайцмандың төп йәшәү ҡағиҙәһе.

Йәш сағында уға атаһы йыш ҡабатлап торғайны: "Ана, тиктормаҫ сәйәсмәндәр күренһен телевизор экрандарынан һәм гәзит биттәренән. Президенттәр һәм губернаторҙар халыҡ алдында сығыш яһаһын, бәхетле тормош вәғәҙә итһен. Мәктансыҡ миллиардерҙар ҡиммәтле машиналарҙа тәнһаҡсыларын эйәртеп, әллә кем булып ҡупайһындар. Һинә, Джонни, быларҙың береһен дә эшләү кәрәкмәй. Һин һәр ваҡыт күләгәлә булырға, аҡса ярҙамында һәм уның власы ярҙамында президенттар, хөкүмәттәр, миллиардерҙар менән идара итергә тейешһең. Тик кем идара иткәнен улар һиҙергә тейеш түгел.

Бының схемаһы яп-ябай. Валюта фондын мин барлыҡҡа килтерҙем, унда бик күп вкладчиктар теркәлгән. Ысынында иһә, унда төрлө исемдәр менән минең 70 процент капиталым һаҡлана. Ситтән ҡарағанда, фонд алйоттарҙы алдау өсөн үҫешкән илдәргә ярҙам йөҙөнән барлыҡҡа килгән. Ысынында, мин уны бөтә илдәрҙән дә яһаҡ йыйыр өсөн булдырҙым.

Мәҫәлән, ике ил араһында хәрби конфликт тыуа, шуларҙың береһенә, күпселектә, икеһенә лә аҡса кәрәк. Алһындар, әйҙә, процентын арттырып түләрҙәр. Берәй илдә социаль болғаныштар була икән, аҡса кәрәк буласаҡ - алһындар, шулай уҡ процент менән арттырып түләрҙәр. Ике сәйәси көс власть өсөн тартҡылаша икән, уларҙың береһе беҙҙең йәшерен агенттар аша аҡса аласаҡ, һәм тағы ла процентын арттырып түләйәсәк. Бер Рәсәй генә беҙгә йыл һайын өс миллиард түләй..."

Джон Хайцманға егерме йәш булғанда атаһы менән аралашыу уға ҡыҙыҡ була торғайны. Элек һәр саҡ үсал күренгән, һөйләшеүгә әүәҫ булмаған атаһы бер көн уны үҙ кабинетына саҡырҙы, камин эргәһендәге креслоға ултырырға ҡушты, Джон эсергә яратҡан ҡуйыртылған һөт ҡойолған кофе яһап бирҙе һәм ысын күңелдән ихлас һораны:

- Джон, һинә университетта уҡыу оҡшаймы?

- Атай, минә унда уҡыу ҡай саҡ оҡшап етмәй. Профессорҙар иҡтисад закондарын аныҡ итеп аңлайышлы өйрәтмәйҙәр шикелле, - тип яуап бирҙе Джон.

- Яҡшы. Тап өҫтөнә баҫтың. Дөрөҫөн әйткәндә, бөгөнгө профессура иҡтисад закондарын аңлата алмай, сөнки үҙҙәре бер нәмә лә белмәй. Улар иҡтисад иҡтисадсылар эше, тип уйлай. Әммә улай түгел. Донъя иҡтисады менән психологтар, философтар һәм был уйында ҡатнашыусылар идара итә. Минә егерме йәш тулғас, олатайың идара итеү процесының серҙәрен асты. Джон, һинә лә егерме йәш тулды, мин һине беҙҙең эште дауам иттереүсе вариҫ, тип һанайым.

- Рәхмәт, атай, - тип яуап бирҙе Джон.

Шулай камин эргәһендә һөйләшеүҙәрҙән башланды серле дәрестәр. Улар университеттағы иҡтисад буйынса лекцияларға бөтөнләй оҡшамағайны. Атаһы улын бик үҙенсәлекле өйрәтте. Уҡыу ышаныслы һөйләшеүҙәргә ҡоролғайны, миҫалдар килтереп, еңел генә аңлатыу бик отошло ине. Джонға үҙ ғүмерендә тәүгә ишеткән мәғлүмәттәр иҫ киткес тойолдо, уларҙы уға иң престижлы университеттарҙа ла һөйләмәҫтәр ине.

- Әйт әле, Джон, беҙҙең илдә иң бай кешеләр кемдәр? - тип һораны бер көн атаһы. - Ер шарында улар нисәү икәнен беләһеңме?

- Һуң, уларҙың исемдәре, байлығына ҡарап, бизнес-журналдарҙа баҫыла бит, - тыныс ҡына яуап бирҙе Джон.

- Улай булғас, беҙ ул исемлектә нисәнсе урында торабыҙ?

Атаһы тәүге тапҡыр "мин", тимәне, "беҙ", тип һораны. Тимәк, ул Джонды ла ғаилә байлығының тулы хоҡуҡлы хужаһы һанай. Атаһын кәмһеткеһе килмәһә лә, Джон тураһын әйтте:

- Был исемлектәрҙә һинең исемең юҡ.

- Эйе. Һин хаҡлы. Әммә... Беҙҙең бер йыллыҡ килемебеҙ генә лә был исемлектәгеләрҙең бөтөн байлығынан күберәк, сөнки аҡса янсығы үтә күренмәле булмаҫҡа тейеш. Был исемлектәгеләрҙең күбеһе туранан-тура, йә ситләтеп булһа ла беҙгә эшләй, һинең һәм минең империяға.

- Атай, һин иҡтисадта иң аҡыллы генийҙыр ул. Һуғышһыҙ, бер ниһеҙ шундай ҙур империяның беҙгә яһаҡ түләүенә ышанғы ла килмәй. Нисек итеп шундай ҙур операция яһай алдың?

Өлкән Хайцман каминдағы ҡуҙҙарҙы болғатты, шым ғына бокалына ҡиммәтле шарап ҡойҙо, бер йотом эскәс, һүҙен дауам итте:

- Мин бер ниндәй ҙә операция эшләмәнем, контролдә тотҡан капиталым бойороу мөмкинлеге бирә, ҡалғандар уны һүҙһеҙ үтәй. Илдәренең иҡтисади торошо уларҙың эшмәкәрлегенән түгел, ә минең теләгемдән тороуын белһәләр, күп илдәрҙең аналитиктарының, хөкүмәт башлыҡтарының һәм президенттарының иҫе китер ине.

Политтехнология үҙәктәре, иҡтисад, аналитика институттары, күп илдәрҙең хөкүмәттәре мотлаҡ минең бүлектәр төҙөгән йүнәлештәр буйынса эшләүҙәрен аңламайҙар ҙа. Белеп ҡуй, ундай бүлектәр һаны бик аҙ. Мәҫәлән, Рәсәйҙең социаль-иҡтисади сәйәсәтен, хәрби доктринаһын дөрт психологтан торған бүлек етәкләй һәм контролдә тота. Һәр береһенең дөрт секретаре бар, әммә улар бер-береһенең эшмәкәрлеге тураһында белмәй.

Мин һинә нисек идара итергә була икәнен күрһәтермен, ул ябай ғына. Тик һин тәүҙә иҡтисадтың ысын закондарын аңларға тейеш, был турала университет профессорҙары бер ваҡытта ла һөйләмәйәсәк. Сөнки улар ундай закондар барлығын белмәй ҙә. Закон шундай: демократик йәмғиәт шарттарында бөтә илдәрҙең президенттары, хөкүмәттәр, банктар, эре һәм ваҡ эшҡыуарҙар иҡтисад пирамидаһының башында торған тик бер эшҡыуарға эшләй. Улар атайыма эшләнеләр, хәҙер минә, тиҙҙән һинә эшләйәсәктәр...

Джон Хайцман атаһына ҡараны, уның әйткәндәрен ҡапылғара аңлай алманы. Эйе, ул атаһының бай икәнен белә ине. Әммә бында бит һүҙ байлыҡ тураһында барманы, донъяға хужа булыу тураһында һөйләнә атаһы. Был супервласть нәҫел буйынса уға, Джонға, күсергә тейеш. Фантастикаға тартым мәғлүмәтте аҙағына тиклем төшөнөүе бик ауыр ине. Нисек итеп, ирекле демократик йәмғиәттә президенттан башлап, йөҙәр меңләгән үҙаллы юридик эре һәм бәләкәй фирмалар асылда тик бер кешегә, уның атаһына хеҙмәт итә?

- Әле әйткәндәрҙе олатайыңдан ишеткәс, башта мин дә ҡапыл аңламаным, һин дә әлегә төшөнөп етмәйһеңдер. Шулай ҙа һин бер нәмәне белергә тейеш, - тип дауам итте өлкән Хайцман. - Донъяла бай кешеләр бар. Әммә һәр байҙан байыраҡ кеше лә бар. Һәм иң бай кеше бар. Бына шуға, иң байға ҡалған байҙар хеҙмәт итә, буйһона. Беҙ йәшәгән системаның законы шулай ҡоролған.

Үҫешкән илдәрҙең мәнфәғәттәрен ҡайғыртыу тураһындағы һүҙҙәр - алдаҡ. Эйе, бай илдәр халыҡ-ара фондтар аша үҫешкән илдәргә кредиттар бирә, әммә, ысынында, уларҙан ҙур проценттар түләтеп, яһаҡ йыя.

Мәҫәлән, Халыҡ-ара валюта фонды финанстары АҠШ-тың капиталына бәйле - был турала күп иҡтисадсылар белә. Көнә-көндәҙ талаған проценттарҙың аҡсаһы АҠШ-ҡа китеүен улар яҡшы аңлай. Ә бына тәғәйен кемгә икәнен берәү ҙә белмәй. Капитал уйынында АҠШ елдауылдан ышыҡлаусы уңайлы ил һанала, һәм ул башҡа илдәргә ҡарағанда был капиталға нығыраҡ бәйле. Әйт әле, Джон, Американың бурыстары барлығын беләһеңме?

- Эйе, атай, беләм. Астрономик сумма икәнен дә беләм. Былтырғы йыл өсөн... Яңылышмаһам...

- Тимәк, башҡа илдәргә бурысҡа аҡса биргән ил үҙе ҙур займдар ала? Ә кемдән ала ул? Аңлайһыңмы шуны?

- Үҙенең шәхси Үҙәк банкынанмы?

- Ә ул Үҙәк банк кемдең милке?

- Ул... Ул...

Джон Американың кемгә бурысы барлығы тураһында бер ваҡытта ла уйлап ҡарағаны юҡ ине, атаһының һорауҙарына яуап бирә торғас, АҠШ-тағы һәр һалым түләүсе Үҙәк банкты байытыуын аңланы. Ә банк... АҠШ-тың Үҙәк банкы шәхси банк та баһа! Һәм, тимәк, бөтә Америка йөҙ миллиард долларҙы ниндәйҙер шәхси кешеләргә түләй... Бәлки, бер кешегә...

* * *

Хайцман ғүмере буйы тыныс булды: айыҡ тормош алып барҙы, эсмәне-тартманы, һауыҡтырыу диеталары ҡулланды, көн һайын тренажер залына йөрөнө. Һуңғы ярты йылда ғына залға ингәне юҡ, киң йоҡо бүлмәһендә ультразаманса медицина аппараттарына тоташтырылған килеш түшәктә ятыуын белде. Күрше бүлмәлә, бер-береһен алыштырып, тәүлек әйләнәһенә табиптар дежурлыҡ итте. Әммә Джон Хайцман замана медицинаһына артыҡ ышана һалып барманы, врачтар менән һөйләшеп тә торманы. Тик бер профессор-психологтың һорауҙарына ғына ҡай саҡ ҡыҫҡаса яуаптар бирә ине. Хайцман уларҙың исемдәре менән дә ҡыҙыҡһынманы, баяғы психологтың да кем икәнен белмәһә лә, башҡаларға ҡарағанда ихласыраҡ һәм намыҫлыраҡ булыуын тоя ине. Профессор күп һөйләй, медицина фәненә ят булған һығымталар яһай, ауырыуҙың сәбәптәрен асыҡларға тырыша. Бер көндө ул тулҡынланып килеп инде лә һөйләй башланы:

- Мин һеҙҙең хәлегеҙ тураһында төнө буйы уйлап сыҡтым, таңға ҡарай шундай фекергә килдем: ауырыуығыҙҙың сәбәптәрен аңланым шикелле, тимәк, тиҙ арала аяҡҡа баҫыуығыҙ тураһында әйтә алам. Ғәфү итегеҙ, Хайцман әфәнде, һаулыҡ һорашырға ла онотҡанмын. Хәйерле көн, Хайцман әфәнде. Һүҙгә әүрәп киткәнмен.

Миллиардер профессорҙың сәләмләүенә өндәшмәне, әйләнеп тә ҡараманы, ул шулай өйрәнгән. Бармаҡтарын һелкетеүе етә - был "сығып китегеҙ", тигәнде аңлата.

Профессорға ул бармаҡтарын һелкетмәне, шуға психолог һөйләүен дауам итте:

- Мин коллегаларымдың, бауырығыҙҙы, бөйөрҙәрегеҙҙе һәм йөрәгегеҙҙе күсереп ултыртыу тураһындағы ҡарары менән риза түгел. Эйе, әлеге мәлдә ул ағзаларығыҙ ысынлап та етерлек кимәлдә һөҙөмтәле эшләмәй. Эйе, был факт. Әммә күсереп ултыртҡан ағзалар ҙа һөҙөмтәле эшләмәйәсәк. Уларҙың һөҙөмтәһеҙ эшләүенең төп сәбәбе һеҙҙең тәрән депрессиягыҙға бәйле. Эйе-эйе, депрессияға. Мин һеҙҙең ауырыуығыҙ тарихын бер нисә тапҡыр ентекләп уҡып сыҡтым. Миненсә, бик етди асыш яһаным. Һеҙҙе дауалаусы табипҡа рәхмәт, ул бөтәһен дә тәфсирләп яҙған, психологик хәлегеҙҙе һәр саҡ билдәләп барған. Депрессив хәлдә булған саҡта эске ағзаларығыҙҙың эшмәкәрлеге насарайған. Эйе-эйе. Хәҙер шундай мөһим һорау тыуа: эске ағзаларығыҙҙың насар эшләүе арҡаһында депрессияға бирелгәнһегеҙме, әллә, киреһенсә, депрессия арҡаһында тәнегеҙ ауырыуға дусар буламы? Мин быға ныҡ ышанам, ауырыуҙың тәү сәбәбе - депрессия. Эйе. Һеҙҙең тәрән депрессив хәлегеҙ. Кеше ниндәйҙер маҡсатҡа ынтылыуҙан туҡтаһа, эргәһендәге ваҡиғаларға битараф булһа, ул йәшәү мәғәнәһен юғалта. Шул ваҡытта мейе бөтөн организмға һүлпән генә командалар бирә башлай.

**Радик ӨМӨТҠУЖИН тәржемәһе.**

**(Дауамы бар).**

ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ

# БАШҠОРТ ФОЛЬКЛОРЫНА...

## ҡыҙыҡһыныу тыуҙырам

**Башҡорт халыҡ ижады иҫ киткес бай, быуаттар дауамында һаҡланып, телдән-телгә, быуындан-быуынға күсеп килеүсе аҫыл ҡомартҡы, изге мираҫ. Бик күп әҙәби жанрҙар халыҡ ижады традицияларына таянып ижад ителгән. Күренекле башҡорт ғалимы-әҙәбиәтсеһе, яҙыусы, уҡытыусы Ким Әхмәтйәнов "Тимәк, халыҡ ижады яҙма әҙәбиәт өсөн ҡомартҡы ғына түгел, бәлки йәнле тел аҫҡысы, шиғриәт аҫҡысы ла икән", - тип юҡҡа әйтмәгәндер. Был фекерҙе Бөрйән районы егете Нурислам ВӘЛИӘХМӘТОВ та йөпләй һәм башҡорт фольклорына нигеҙләнгән "Башҡорт фантазияһы һуҡмаҡтары буйлап" квест-антология әҙәби проектын тормошҡа ашырыу буйынса уңышлы эшмәкәрлек алып бара. Уның менән проект хаҡында ҡыҫҡа әңгәмә ҡорҙоҡ.**



➔ **Үҙең хаҡында бер-ике кәлимә һүҙ әйтһәңсе...**

- Мин Башҡорт дәүләт медицина университетының 4 курсында белем алам, буласаҡ балалар табибы. Уҡыуҙан буш ваҡытымда хикәйәләр уҡырға һәм яҙырға яратам. Айырыуса фантастик әҫәрҙәр, мистик хикәйәләр күңелемә яҡын. Киләсәктә китаптарымды магазин кәштәләрендә, дәүләт һәм шәхси китапханаларҙа күрергә хыялланам.

Башҡорт халыҡ ижади ҡомартҡыларын тулы килеш киләһе быуынға алып барып еткереү, балаларға һәм йәштәргә ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу өсөн уны популярлаштырыу мөһим. Был йәһәттән дәүләт кимәлендә төрлө яклап эшмәкәрлек алып барыла: китаптар баҫыла, әкиәттәр буйынса конкурстар ойошторола һәм башҡалар. Минең проектым да башҡорт фольклорын популярлаштырыу, уны төбәктә генә түгел, ә республиканан ситтә лә киң таратыу маҡсатынан сығып эшләнгән.

➔ **Ни өсөн нәҡ ошо йүнәлеште һайланың?**

- Бәләкәй саҡта әсәйем, Аҡыева Айнабад Нургилде ҡыҙы, һәр ваҡыт башҡорт халыҡ әкиәттәрен һөйләр ине. Шулай уҡ башҡорт халҡының легенда һәм риүәйәттәрен белеп үҫтем. Ғөмүмән алғанда ла, Бөрйән ере мөғжизәләр иле, мифология менән бәйле төбәк. Унда тыуып үҫеүем дә минең был йүнәлештәге ҡыҙыҡһыныуыма үҙ әҙен һалғандыр.

Ә башҡорт халыҡ әкиәттәрен, риүәйәт һәм мифтарын әүҙем уҡый башлағандан һуң ошондай проектҡа тотонорға ҡарар иттем. Ни өсөн башҡорт халҡының шул тиклем бай мәҙәни ҡатламы йәш быуындың, балаларҙың иғтибарынан ситтә ҡала һуң, тигән һорау тыуҙы миндә. Мәҫәлән, славян, скандинав фольклоры темаһына нигеҙләнеп эшләнгән һәм, иң мөһиме, нәҡ йәштәр өсөн ҡыҙыҡлы булған китаптар бар. Ләкин башҡорттарҙа ла һөйләр, күрһәтер һәм барыһын да илһамландырыр өсөн шундай сығанаҡтар байтаҡ. Үҙем, фантастик әҫәрҙәр уҡырға һәм яҙырға яраткан кеше буларак, быныһ ни тиклем шәп, модалы, ҙур ҡыҙыҡһыныу менән файҙаланыуын күрәм һәм был йүнәлеште үҫтерергә, был хаҡта яҙырға кәрәк икәнен яҡшы аңлайым. Башҡорт фольклорындағы "Аждаһа", "Ай тәңре", "Аҡбуҙат", "Албаҫты", "Бисура" һәм башҡа мифик заттар үҙҙәре уҡ фантастик әҫәр геройҙары булырға "ынтылып" тора, ә "Башҡорт фантастикаһы" ниндәй үҙенсәлекле яңғырай.

➔ **Проект тураһында тулыраҡ мәғлүмәт ишетергә ине...**

- "Башҡорт фантастикаһы һуҡмаҡтары буйлап..." квест-китабына 15 хикәйә индереләсәк. Уларҙың авторҙары төрлө һөнәр эйәләре, шулай уҡ уҡыусылар һәм студенттар бар. Әҫәрҙәр башҡорт фольклорында яҡтыртылған мифологик заттар, риүәйәт, легендаларҙа һүрәтләнгән образдарға таянып ижад ителгән. Һәр хикәйә фантастик сюжетҡа ҡоролған ҙур булмаған текст һәм башэшләткес менән тулыландырыласаҡ. Уларҙы үтеп сығыу өсөн тәү сиратта хикәйәләрҙе уҡырға, башҡорт фольклорына мөрәжәғәт итергә кәрәк буласаҡ.

Әлеге ваҡытта конкурс эштәрен ҡабул итеү тамамланды. Конкурсҡа Рәсәй төбәктәренән, Беларусь һәм Молдова республикаларынан һәм башҡа илдәрҙән йөҙгә яҡын эш ҡабул ителде. Әлеге мәлдә уларҙы баһалау бара, финалистар исемлеге март уртаһында иғлан ителәсәк, ә китапты презентациялау һәм еңеүселәрҙе бүләкләү тантанаһы май аҙағында уҙасаҡ, тип планлаштырабыҙ.

Китаптарҙы һуңынан республика китапханаларына тапшырырға ниәт итәм, шулай уҡ бушлай электрон версияһын эшләргә, конкурс еңеүселәре өсөн билдәле яҙыусылар менән ҡыҙыҡлы осрашыуҙар ойошторорға уйлайым.

➔ **Китап сығарыу еңел һәм осһоҙ түгел. Был мәсьәләне нисек хәл иттең?**

- Уҙған йылда "Самрау-Тау-2023" төбәк форумында ҡатнаштым, унда беҙҙе төрлө проекттарҙы нисек яҙырға өйрәттеләр, социаль проектлау тураһында һөйләнеләр. Мин ошо форумда үҙемдең проектым - башҡорт фольклорындағы мифик заттарҙы ҡулланып яҙылған әҙәби әҫәрҙәрҙән торған квест-антологияһы - менән таныштырҙым. Грантҡа тәҡдим иткән проектым "сейерәк" булһа ла экспертарға оҡшаны, мин 3-сө урын яуланым һәм 20 мең һум аҡсаға лайыҡ булдым. Ләкин был аҡса проектты тормошҡа ашырыу өсөн етмәй ине, шуға күрә "iВолга-2023" Бөтә Рәсәй форумы сиктәрендә ойошторолған "Росмолодежь. Гранттар" конкурсына ла үҙемдең проектты ебәрҙем. Бөтә илдән йыйылған йәштәр араһында минең проект юғары баһаланды һәм 515 мең һумлыҡ грантҡа эйә булды. "Башҡорт фантастикаһы һуҡмаҡтары буйлап" квест-антологияһы донъя күрһен өсөн бөтә шарттар ҙа унайлы тыуып торҙо, тимәк, эшебеҙ китап уҡыусы тарафынан да йылы ҡабул ителер, тип өмөт итәм.

➔ **Проект өҫтөндә эшләү барышында ниндәй ауырлыҡтар тыуҙы?**

- Иң ауыры - бындай проекттың кешеләргә, йәмғиәткә кәрәкме-юҡмы икәнлеген аңлау. Актуаль проектмы ул? Халыҡ тарафынан нисек ҡабул ителер? Тәүҙә минән башҡа бер кемгә лә кәрәкмәгән эш менән булған кеүек тойола ине. Мәҫәлән, конкурс тураһындағы мәғлүмәтте таратыу маҡсатында төрлө ойошма һәм учреждениеларға мөрәжәғәт иттем. Ҡайһы берҙәре шунда уҡ күтәреп алып, үҙҙәренең социаль селтәрҙәрендә, сайт һәм башҡа мәғлүмәт сығанаҡтарында конкурс хаҡында белдереү яһаны. Ә күпселек ойошмаларҙан бөтөнләй яуап та, ниндәйҙер ҡыҙыҡһыныу ҙа булманы. Был бит беҙҙең фольклорыбыҙ, мәҙәниәтебеҙ, тарихыбыҙ.

Ләкин мин үҙ-үҙемә ышанам, яҡындарымдың һәм дуҫтарымдың ярҙамына таянам. Шулай уҡ проект тураһында һорау алыуҙар (опрос) ҙа уның актуаль һәм кәрәк булыуын күрһәтте. Шуға күрә башҡорт халҡының мираҫын һаҡлауға, үҫтереүгә, популярлаштырыуға йүнәлтелгән проектымды дауам итәсәкмен.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Нурислам кеүек халкының тарихын, уның фольклорын, мәҙәниәтен бөтә күңеле менән яраткан йәштәрҙең булыуы һөҡләндерә. Улар аңлы, эшмәкәр, маҡсатлы, тырыш. Тимәк, башҡорт фольклоры, халыҡ ижады ынйылары йәшәйәсәк.**

Гөлназ МАНАПОВА
әңгәмәләште.

УЙМАҠ ХИКӘЙӘЛӘР

Хәйҙәр ТАПАҠОВ



# ТАУЫШТАН ТАНЫУ

Ҡанлы 37-се йылда нахаҡ бәлә яғып, бер ғәйепһеҙ кешене Йылайыр төрмәһенә ултыртып ҡуялар. Ул ямнаты сыҡҡан төрмәнең лагерь, тип аталған айырым бикләп тотоу урындары бөгөнгө Ейәнсура районы менән сиктәш Үрге Казарма ауылында ла булған икән.

Йылайыр төрмәһендә урын етмәгәнлектән, тегене шунда ебәрәләр. Ошо хаҡта кемдәндер саласарпы ишетеп ҡалған ғәйепләнеүсенең ҡатыны көҙгө ыҙғырыҡта аҙыҡ-түлеген яулыгына төйнәп алып, ирен күрәм, тип, алыҫ юлға сыҡҡан. Ул саҡта ылау тигәнең ҡайҙа инде, йәйәүләп. Кейем килеп тороп йоҡа, аяҡтарҙа - сабата, ә ул нәмәләр ни шыпа ла ғына йылы тотмай, ыҙғыр ел тәнде үтәнән-үтә һуға, өҫтәүенә, аяҡ кейеме йораты юл ҡойоһона бүртеп, аяҡтарҙы еүешләй. Ҡырҡ михнәт менән ике тәүлек тигәндә Үрге Казармаға саҡ барып етә. Ҡара кистә. Ауыл буйлап инәлеп-ялбарып йөрөп, кемдәндер өйөнөң ишек төбөндә, ҡаҡ иҙәндә ҡунып сыға. Ауыҙға ризыҡ ҡабыу, тәғәмләнеү теләге уйында ла юҡ, төйнәгәне - иренә тәғәйенләнгән, бында, йән биргәнгә йүн биргән, иректә нисек тә түҙерҙәр, сыҙарҙар, ә хәбәрһеҙ юғалған ире бит йылдан ашыу тотҡонлоҡта интегә.

Лагерь янына килә, ә ундағы казармалар әллә ҡайҙан сәнскеле тимер сыбыҡ менән уратып алынған. Дүрт мөйөштә лә бейек вышка, эттәр өргән тауыш ишетелә. Бер нисә кешенән торған һаҡ ҡуйылған ҡапҡа ауыҙына килә. Билдәле, уны эскә үткәрмәйҙәр. Оҙаҡ тора ямғыр аҫтында күшегеп. Әллә аслыҡтан, әллә һалҡындан тотош тәне ҡалтырай. Көн төшкөләккә ҡарай ауыша. Бер надзиратель йәлләгәндер, күрәһең, ҡатындың янына килеп былай ти: "Посещение посторонних людей у нас строго запрещено... Наш начальник с утра уехал в Зилаир. Ладно уж, так и быть, что у тебя есть?" Аптыранып ҡала. "Что молчишь, деньги давай, иначе не пропущу!" Ҡатын берҙән-бер байлығын, көмөш беләҙеген һалып һона. "Чистое серебро, значит, годится... Тебе полчаса, и не больше. Какая казарма?" "Не знаю..." "Тогда как-нибудь сама найдешь, через окошко пообщаешься немного, и обратно. В случае малейшего нарушения пущу на тебя собак, имей в виду!"

Казармаларҙы урап оҙаҡ йөрөй. Ә уларҙың ишектәре бикле, һәр урында һаҡ, тәҙрәләре буй етмәслек юғары. Шулай ҡаңғырып йөрөй торғас, эс яҡтан таныш йүтәлләү тауышын ишетә. Бына бит шатлыҡ, күҙҙәренән йәш атлығып сыға. Ул ҡәҙерле кешеһен ҡосҡандай һалҡын ташҡа һыйына. Бер килке онотолоп тора. Шул саҡ ҡапҡа яғынан бойороулы тауышты ишетә: "Что так долго копошишься, уснула что ли, а ну, обратно!"

Ҡайтырға сыға. Билдәле, китеү ауыр булһа ла ҡайтыу һәр саҡ еңел бит инде ул. Аяҡтары ла үҙҙәренән үҙҙәре йүгерәләр һымаҡ. Өйөнә инеү менән асыҡҡан, өшөгән балаларын дәртләндерергә теләгәндәй ҡысҡырып та ебәрә: "Барҙым, балалар, атайығыҙҙы эҙләп таптым, уны күрергә яҙмаһа ла йүтәлләүен ишеттем, Аллаға шөкөр, ул тере!" Был стена аша аралашыу һуңғыһы була...

...Яңыраҡ "Бәйләнештә"ге төркөмгә махсус операция барған мәлдең видеороликгын һалғандар. Алыш бара, унда ла, бында ла аталар, шартлауҙар ишетелә, кемуҙҙан егеттәребеҙ бер-беренен дәртләндерергә теләп ҡысҡырыша. Видеоролик аҫтындағы комментарийға бер ҡатын былай тип яҙған: "Баламдың тауышын ишеттем, таныным, бутамайым, ул, ул ғына!"

Яҡын кешендән, берҙән-берендең йүтәлләүен, көрһөнөүен, ишетелер-ишетелмәҫ өн сығарыуын арауыҡ, алыҫ саҡрымдар аша тик уны яратҡан, көткән, зар-интизар булған кеше генә айыра, тоймлай ала...

✓ *Ураҙа башҡа бөтә хөкөмдәр кеүек нәфсенең тулыһынса пакланыуына алып барыусы алымдарҙың береһе һанала. Хәләл нәмәләрҙән баш тартҡан кешенең харам нәмәләрҙән баш тартмауы мөмкин булмаҫ.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ЯҘҒЫ ДЕПРЕССИЯ ЮҠ

■ Нутрициолог, диетолог Ольга Кондратенко офис хеҙмәткәрҙәренә омега-3 майлы кислоталарын ҡабул итергә кәрәк тигән фекерҙә. Был кислоталар йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы һәм ҡан әйләнеше өсөн бик мөһим. Улар баш мейеһе эшмәкәрлегенә яҡшы йоғонто яһай. Кем монитор алдында күп ваҡытын уҙғара, был хеҙмәткәрҙәр ҙә ошо кәңәшкә ҡолаҡ һалһын. Омега-3 диңгеҙ балыҡтарында, етен майында, әстерхан сәтләүегендә, авокадола күп. Уның организм өсөн тәүлек нормаһы - 950 мг. "Иртәнге аш ваҡытында авокадо һыланған икмәк, аҙнаһына бер йәки ике тапҡыр майлы балыҡ - омега-3 майлы кислоталарын тейешле кимәлдә тоторға ярҙам итә. Әммә бар кеше лә был рационды ҡуҙәтә алмай. Шуға ла дарыуханаларҙа һатылған өҫтәмәләр ҡабул итеү тыйылмай", - ти табип.

■ Макаронды йә фигура өсөн иң зарарлы ризыҡтар рәтенә индереп ҡуялар, йә файҙалы тип раҫлайҙар. Хәҙер бына тағы ла был блюдо "аҡланған". РОСБИОТЕХ университетының иген, икмәк һәм кондитер технологиялары кафедраһы доценты Роман Кандроков билдәләүенсә, макарон мотлаҡ һимереүгә килтерә тигән һүҙ хаҡ түгел. Сәләмәт туҡланыу өсөн кеше үҙенә тейешле бар макроэлементтарҙы ла ризыҡтан алырға тейешле. "Мәҫәлән, организм энергияның 45-65 процентын углеводтарҙан, 10 процентын аҡһымдан һәм 20-35 процентын майҙарҙан алһа, дөрөҫ була. Был йәһәттән макарондар идеаль продукт иҫәпләнә: уларҙа углевод һәм аҡһымдар кимәле 38 грамға 7,7 грамға, йәғни 5:1 тура килә. Ҡаты сортлы бойҙайҙан яһалған макарондарҙа аҡһымдың кимәле 13 процентҡа етә. Бынан тыш, сифатлы макарондарҙа кальций, тимер, магний, фосфор, калий, натрий, цинк һ.б. бар. Макарондар ҡанда глюкоза кимәлен дә түбәнәйтә", - тип аңлатма бирә эксперт. Ә кем һимереүҙән ҡурҡа, улар өсөн көрпәле макарондар ҡулайлыраҡ, ти Кандроков. Улар эсәктәр сәләмәтлегенә өсөн файҙалы, асығыу тойғоһон да оҙағыраҡҡа баҫа.

■ Әле генә ҡыш килеп, ҡояш нуры етешмәгәндән "ҡышҡы депрессия" барлыҡҡа килә имеш, тип сығыш яһағайны һәм кәңәштәрен биргәйне үҙен психолог һәм блогер тип атаған "белгес"тәр. Яҙ етеүе улар өсөн тағы ла "ем" бирҙе, яҙғы депрессияны нисек енергә тигән атамалы мәҡәләләр күбәйә башланы. Мәскәүҙең психологик ярҙам хеҙмәте белгесе Денис Хәкимов "яҙғы депрессия" тигән нәмә юҡ ул тип белдерә. Әлбиттә, оҙайлы ҡыштан һуң һәр кемдә арыу, витаминдар ҡытлығы һәҙөмтәһендә кәйеф булмауы осрауы ихтимал. "Әммә миҙгел һайын кәйефтең бер аҙ үҙгәреп тороуын депрессия тип атарға ярамай. Депрессия - ул оҙайлы ваҡыт дауам иткән эмоциональ торош һәм етди психик проблема. Был осраҡта мотлаҡ медицина консультацияһы кәрәк", - ти белгес. Ә бына ҡояш нуры, физик әүҙемлектең етешмәүе, организмдың витаминдарға ҡытлыҡ кисереүе, көндәлек мәшәҡәттәргә бәйле стресс иһә үтә торған нәмә. "Әле ныҡлап йылытмаған, йәйге отпускылар йыраҡ кеүек тойолғанға ла кешенең эмоциональ хәле насарайып китеүе бар, был да кәйефкә йоғонто яһай", - ти табип.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# РАМАҘАН АЙЫ МӨБӘРӘК БУЛҺЫН!



### Ураҙалар тотоп...

"Рамаҙан айы кешеләргә тоғро юл күрһәтеүсе, ялғандан хәҡиҡәтте айыра торған дәлилдәр менән Ҡөрьән индерелә башлаған айҙыр. Шуға күрә ошо айға килеп ирешкәндәр ураҙа тотһон", - тиелгән "Әл-Бәкара" (Һыйыр) сүрәһенең 185-се аятында.

Рамаҙан айының башынан алып ахырынаса байрам. Мосолмандар бер-береһенә ҡунаҡҡа йөрөп, Ҡөрьән уҡып, зыярат ҡылып, изге ғәмәл эшләп үткәрергә тейеш был айҙы. Рамаҙандың 21-се көнө - Фәтех Мәккә көнө, 21-29-сы көнө - Ҡәҙер кисе булыу ихтималы булған кистәр.

Аллаһ илсеһенең вәғәздәрендә ураҙа айының һәм ауыҙ астырыуҙың әһәмиәте тураһында әйтелгән. "Аллаһы Тәғәлә был айҙа ураҙа тотоуҙы фарыз итте һәм өҫтәмә ғибәҙәттәр ҡылыу айы итеп билдәләне. Берәү өҫтәмә - нәфел ғәмәлде ҡылһа, ул барлыҡ фарыз ғәмәлен ҡылған кеүек булыр. Был сабырлыҡ айылыр, ә уның әжере - йәннәттер. Был айҙа мөьминдәрҙең ризыҡтары киңдер: берәү был айҙа ураҙа тотоусыға ауыҙ астырһа - муйынын тамуҡ сылбырынан азат итер һәм гонаһтары ярлыҡанар", - тигән Мөхәммәт ғәләйһиссәләм. "Беҙҙең ураҙа тотоусыға ауыҙ астырырлыҡ тәғәмебеҙ булмаһа?" - тигән һорауға Бәйғәмбәр ғәләйһиссәләм: "Хатта бер хөрмә йәиһә бер йотом һыу, йә һөт менән булһа ла ауыҙ астырһа - әлеге кешегә әжер-сауаптар яуыр", - тип яуап биргән.

Был айҙың беренсе өлөшө рәхмәт көндәре, урталағы өлөшө - ғәфүмәғфирәт һәм ярлыҡау көндәре, аҙаҡҡы өлөшө - уттан ҡотолоу көндәре. Рамаҙан айының һәр кисендә Аллаһы Тәғәлә өс тапҡыр әйтер ти: "Минән берәй нәмә һораусы бармы? Теләгәнен бирермен. Миңә тәүбә итеүсе бармы? Тәүбәһен ҡабул ҡылырмын. Минән гонаһтарының ярлыҡауын үтенеүсе бармы? Гонаһтарын ярлыҡармын!" Ауыҙ асыу ваҡытында Ул тамуҡ ғазабынан, гонаһ эйәләрен ғазаптан азат итер. Был айҙа Аллаһы Тәғәлә йәннәт ишектәрен астырып, тамуҡ ишектәрен сылбыр менән уратып, бикләп ҡуйыр. Ләкин боҙоҡ, ялған һөйләп, яуызлыҡтар ҡылып йөрөүселәрҙең ас тороуҙарында күп хикмәт табылмаҫ. Ураҙа тотоу менән кеше үҙенең зәғифлеген һәм мохтажлығын танырға тейеш. Шуның менән уның ғорурлығы, тәкәбберлеге киҫелә. Ураҙа тотоу мосолмандарҙың ихтыяр көсөн нығыта. Тормоштағы ауыр һынауҙар алдында уға әҙерлек булып тора. Сөнки ураҙа башҡа бөтә хөкөмдәр кеүек нәфсенең тулыһынса пакланыуына алып барыусы алымдарҙың береһе һанала. Раббыһының ҡушҡанына буйһоноп, хәләл нәмәләрҙән баш тартҡан кешенең харам нәмәләрҙән баш тартмауы мөмкин булмаҫ. Үҙенең ихтыяр көсөн ураҙа тоторға буйһондорған кеше башҡа һынауҙар алдында ла бирешмәҫ!

Рамаҙан айы - Ҡөрьән айы, рамаҙан - рухты паклау, шайтандың йөрөй торған юлы тарайып, нәфсе һынала торған ай. Ошо һынауҙарҙы именлектә, сәләмәтлектә үтеп сығырға яҙһын, Аллаһы Тәғәләне ололап, шөкөр итеп ҡылған доғаларығыҙ, тотҡан ураҙаларығыҙ ҡабул булһын!

### Фән нисек аңлата?

Ялҡынһыныу сирҙәрен тейешенсә дауаламағанда яман шеш, йөрәк сире, артрит һымаҡ хроник ауырыуҙар барлыҡҡа килә. Яңыраҡ үткән тикшереүҙәр тап ураҙаның ялҡынһыныу сирҙәренән ҡотолорға, сәләмәтлекте нығытырға ярҙам итеүен күрһәтте.

Табиптар һынау үткәрә: унда ҡатнашыусы балиғ булған кешеләр ай буйы ураҙа тоталар. Ошо ваҡыт эсендә уларҙың ялҡынһыныу, шешенеүгә бәйле сирҙәре ныҡ кәмей. Тағы ла

ТӨРЛӨ-ТӨРЛӨ

## ҺАҠЛЫҠ ҠАМАСАУЛАМАЙ



**Шишмә районында бер ир шишмәгә һыуға киткән һәм юғалған. Әте хужаһыҙ ғына әйләнеп ҡайтҡас, ҡатыны ҡотҡарыусыларға мөрәжәғәт итергә булған.**

Ҡотҡарыусыларға был шылтыратыу буйынса оҙаҡ эҙләнеү эштәре алып барырға тура килмәй, юғалыусы уларға урмандан сығып килгән сағында тап була. Баҡтиһәң, ҡар һәм бурандар шишмәгә юлды ҡаплаһа ла, ул ҡар кисеп булһа ла барып етергә хәл итә. Был тарихтың аҙағы яҡшы тамамланһа ла, Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты иҫкәртеүенә ҡолаҡ һалығыҙ:

- ҡайҙалыр барыуығыҙ тураһында өйҙәгеләр белһен, маршрут һәм яҡынса ҡайтыу ваҡытын да әйтеп йөрөгөҙ;
- таныш булмаған ерҙәргә сығыуҙан тыйылып тороғоҙ;
- телефонығыҙҙың аккумуляторы тулы булһын, үҙегеҙ менән бысаҡ, компас, шырпы, фонарик йөрөтөгөҙ;
- урманда оҙаҡ булырға кәрәк икән, ризыҡ һәм һыу, шулай уҡ кәрәкле дарыуҙарығыҙҙы алығыҙ;
- үҙегеҙҙең физик мөмкинлектәрегеҙҙе һәм сәләмәтлек торошон реаль баһалағыҙ.

## ШАЯРМА!




**Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитетының 112-системаһына шылтыратыуҙар араһында шаярып һәм алдап мөрәжәғәт итеүселәр күп. Көнөнә диспетчерҙар 7 меңдән ашыу шылтыратыу ҡабул итә.**

Диспетчерҙар мөрәжәғәтте ҡабул иткәндән һуң, уларҙы хәл итеү өсөн башҡа системаларға тапшыра. Әммә шылтыратыусылар араһында уларҙың эшенә аяҡ салыусылар ҙа күп. Көн һайын 500-гә тиклем ялған хәбәр теркәлә. Шуға ла ведомство республика халҡына ҡыҙыҡ өсөн генә был линияға шылтыратмауҙарын һорай. "Был ваҡытта ысынлап та ярҙамға мохтаж булыусы диспетчер менән бәйләнешкә сыға алмауы бар. Үҙегеҙ ҙә ҡасандыр ошондай уҡ хәлгә ҡалыуығыҙ бик ихтимал. Шулай уҡ ялған саҡырыу өсөн административ һәм енәйәт яуаплылығы ла бар, улар РФ административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы Кодексының 19.13 статьяһына һәм РФ Енәйәт кодексының 207-се, 306-сы статьяларына нигеҙләнә", тип хәбәр итә белгестәр.

✓ ***Ғалимдар йәнә лә, ураҙа ғүмерҙе оҙайта, тиҙәр. Көн һайын үҙенсәлекле асығыу курсы үткән ҡомаҡтар даими ашап йәшәгән ҡомаҡтарҙан 83 процентҡа оҙағыраҡ йәшәгән.***



ошоға оҡшаш бер тәжрибә тураһында әйтергә кәрәк: унда ҡатнашыусылар ҙа ай буйы ураҙала була, быларҙың асығыу ваҡыты көнөнә 12 сәғәткә һуҙыла. Был осраҡта ла күпселек ялҡынһыныу сирҙәренән ҡотола, йәғни, һәҙөмтә бер иш килеп сыға.

Бөгөнгә көндә бөтөн үлем сәбәптәрен тикшергәндә 31,5 проценты йөрәк ауырыуҙары менән үлеүселәр. Йөрәк-ҡан - тамырҙары сирен ураҙа ғына һәҙөмтәле кәметә, ти ғалимдар. Һимереүҙән яфаланған 110 кеше табиптар күҙәтеүендә өс аҙна ураҙа тота. Шул ваҡыт эсендә ҡан баҫымы түбәнәйеүе, ҡанда триглицерид һәм холестерин кимәле төшөүе күҙәтелә. Ураҙа тотоп, дүрт мең кеше тикшеренеү үтә, уларҙа йөрәктең ишемик сире кәмеүе теркәлә. Шулай уҡ йөрәк-ҡан тамырҙары сире барлыҡҡа килеүгә төп сәбәпсе булған шәкәр ауырыуы кәмеүенә лә иғтибар итәләр.

Үҙенсәлекле "ураҙа"ға дусар ителгән хайуандарҙа мейе эшмәкәрлеге әүҙемләшеүен, яңы нервы күҙәнәктәренең етештереү кимәле яҡшырыуын билдәләгәндәр.

Асығыу кешенең үҫеш гармонын - матдәләр алмашыныуы үҫешендә һәм ябығыуҙа, шулай уҡ физик көстөң артыуында иң төп ролде уйнаған аҡһым гормонын нығыта. Туғыҙ ир-ат ошо тәжрибә үткәреүҙә ҡатнаша. Ике көн эсендә улар организмында үҫеш гормоны эшләп сығарыу биш тапҡыр артҡаны асыҡлана.

Ғалимдар йәнә лә, ураҙа ғүмерҙе оҙайта, тиҙәр. Көн һайын үҙенсәлекле асығыу курсы үткән ҡомаҡтар даими ашап йәшәгән ҡомаҡтарҙан 83 процентҡа оҙағыраҡ йәшәгән. Шулай уҡ асығыу ҡомаҡтарҙа яман шеш үҫеүен туҡтатҡан. Асығыу химиотерапия һымаҡ уҡ һәҙөмтә бирә, тик организмға бер яҡтан да зыян яһалмай. Әйтергә кәрәк, бындай тәжрибә әле ҡомаҡтарҙа ғына үткәрелгән.

Ҡайһы бер мосолмандар ураҙа тотоу ауырлығына һылтаналар, ләкин уның аҡыл, йән һәм тән өсөн ниндәй файҙа икәнен аңламайҙар. Ә әҙәмгә нимә хәйерлерәк икәнен тик Аллаһы Тәғәлә генә белә.

### Файҙаһы

Ураҙаның хикмәттәре һәм файҙалары тәҡүәлелеккә барып тоташа. Ураҙаның фарыҙ булыуы тураһында телгә алғандан һуң Аллаһы Тәғәлә юҡҡа ғына: "Бәлки, һеҙ тәҡүәле булырһығыҙ", - тимәгән. Мәсәлән, Аллаһы Тәғәләнең рәхмәтенә ирешәм тип, Уның язаһынан ҡурҡып, хәләл ризыҡтарҙан тыйылып тора алған кешегә харамдан тыйылыуы тағы ла еңелерәк буласаҡ.

Кешенең ҡарыны буш булһа, аслыҡ тойғоһо башҡа тән ағзаларын да донъяуи теләктәрҙән тыйып тора. Ҡарыны тулһа, теле, күҙҙәре, ҡулдары һәм енес ағзалары ла үҙенекен талап итә башлай. Ҡыҫҡаһы, ураҙа кешене шайтандан ҡурсалай, нәфсе теләктәрен ауыҙлыҡларға ярҙам итә һәм тән ағзаларын гонаһтан һаҡлай.

Ураҙа арҡаһында аслыҡ тойғоһо кисергән кеше фәҡирҙәрҙең хәленә инә, ашарына булмағандарға ҡарата мәрхәмәтлелеге уяныуы ла ихтимал. Йәйәүленең хәлен һыбайлы белмәй, тиҙәр. Гел туҡ йөрөгәндәр ҙә фәҡирҙәрҙең хәлен аслыҡтың ни икәнен татығандан һуң ғына белә ала.

Ураҙа тотҡан кешелә ихтыяр көсө арта, ул нәфсе теләктәрен ауыҙлыҡларға өйрәнә.

Ураҙа айында мосолмандарҙың берҙәмлеге күренә. Рамаҙанда бөтә өммәт бер ваҡытта ураҙа тота һәм бер ваҡытта ифтар ҡыла.

Ураҙа айы - башҡаларҙы дингә, ғибәҙәткә өйрәтеү өсөн дә бик уңайлы ваҡыт. Был айҙа кемдер тәүге тапҡыр мәсеткә килә, кемдер тәүге тапҡыр намаҙға баҫа. Мосолмандар бындай форсатты ҡулдан ысҡындырмаҫҡа бурыслы.

### Нисек туҡланырға?

Врач-диетолог Нәркәс Әгзәмова ураҙа ваҡытында нисек туҡланырға кәрәклеге тураһында кәңәш бирә:

- Күптәргә ураҙа тотоу ауыр бирелергә, баш әйләнеүе, эс ауыртыуы, хәл бөтөүе һәм башҡа симптомдар күҙәтелеүе мөмкин. Ураҙаны тулыһынса тотоп бөтәр өсөн сәхәрҙе һәм ифтарҙы дөрөҫ аҙыҡтар ашап үткәреү мөһим, шул ваҡытта беҙгә 12 сәғәттән ашыу ваҡытты эсемлек һәм аҙыҡтарһыҙ үткәреүе еңел буласаҡ, ин шаа Аллаһ.

Дөйөм кәңәштәр:

- Ураҙа мәлендә аҙыҡты ҡурып бешереүҙе бөтөнләй ҡулланмаҫҡа тырышығыҙ. Парҙа, һыуҙа, духовкала фольгаға төрөп бешерһәгеҙ, аҙыҡ яҡшыраҡ үҙләштереләсәк.

- Һыу күләмен нормала тоторға тырышығыҙ - ололарға кәмендә 1,5 литр һыу эсергә кәңәш ителә. Ифтар менән сәхәрҙе һыу эсеүҙән башлағыҙ, аҙыҡ ашаған мәлдә һәм ашағандан һуң да һыу эсегеҙ, намаҙҙар араһында ла һыу эсергә онотмағыҙ. Үт ҡыуығында таштар булмаһа, 100 мл тирәһе магнийлы һыу эсергә кәңәш ителә. Был үт тотҡарланыуҙан һаҡлаясаҡ.

- Татлы эсемлектәрҙән баш тартығыҙ, тәм-томдарҙы кәметегеҙ. Был көндөҙ һыуһап интекмәҫ өсөн мөһим.

- Тоҙло аҙыҡтар (балыҡ, сырҙар) ашамаҫҡа тырышығыҙ. Балыҡты туң көйөнсә һатып алығыҙ һәм парҙа, духовкала фольгаға төрөп йәки әҙ генә һыуҙа бешерегеҙ.

#### Сәхәр ниндәй булырға тейеш?

Сәхәрҙе сөннәт буйынса, финик менән һыу эсеүҙән башларға кәрәк.

Аҡһымдар: майлы ит, балыҡтар, һөт аҙыҡтары, йомортҡа. Мәсәлән, ҡаҙы, тултырма, һыйыр, һарыҡ, ҡаҙ иттәре, балыҡтарҙан - скумбрия, горбуша, форель йәки аҡ балыҡ ашарға ярай.

Углеводтар: һәр төрлө ярманан бутҡалар.

Күҙәнәклек: йәшелсә салаттары йәки йәшелсәләр менән бергә бешерелгән бутҡалар.

Майҙар: һары май, рафинирланмаған үҫемлек майы (бутҡаға һалырға, салатҡа ҡушырға мөмкин).

#### Ифтар ниндәй булырға тейеш?

Ифтарҙы ла сөннәт буйынса финик менән һыуҙан башлайбыҙ. Магнийлы һыу эсергә мөмкин һәм 15-20 минут үткәс, ашарға тотонорға була.

Аҡһымдар: еңелерәк үҙләштерелгән ит, балыҡтар (тауыҡ, күркә иттәре, балыҡтар, диңгеҙ аҙыҡтары).

Углевод, күҙәнәклек: аштар (йәшелсә йәки ит һурпаһында), былау (уны майһыҙ итеп һыуҙа ғына бешерергә тырышығыҙ), бутҡалар, салаттар.

Ифтарҙан һуң 2 сәғәт үткәс һәм йоҡларға 2 сәғәт ҡалғас, еңелсә ашап алырға мөмкин (бутербродтар, салаттар, ныҡ татлы булмаған аҙыҡтар, йогурт) һәм сәхәр менән ифтар араһында һыу эсергә онотмайбыҙ.

Ураҙаларығыҙ еңел үтһен, доғаларығыҙ ҡабул булһын!

## ЯЛҒАН ХӘБӘРМЕ?

**Стәрлетамаҡ ҡалаһы хакимиәте башлығы Рөстәм Ғәзизов 26 февралдә "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге сәхифәһендә интернетта таралған шомло хәбәрҙе кире ҡаҡты.**

"Һуңғы көндәрҙә мессенджерҙарҙа һәм социаль селтәрҙәрҙә ҡалабыҙҙың белем биреү ойошмаларында шартлатҡыс һалыныуы йәки террактарға әҙерлек алып барылыуы хаҡында аноним хәбәрҙәр таратыла, - тип яҙа ул. - Был хәл хоҡуҡ һаҡлау органдары контролендә. Һәр осраҡ буйынса тикшереү үткәрелә. Аноним сығанаҡтарҙан мәғлүмәт ялған тип иҫәпләнә. Ул халыҡ араһында паника тыуҙырыу һәм йәмғиәттең тотороҡлоғон ҡаҡшатыу өсөн таратыла". Мэр граждандарҙы имеш-мимештәргә ышанмаҫҡа һәм уларҙы таратмаҫҡа, бары тик тикшерелгән мәғлүмәт сығанаҡтарынан ғына файҙаланырға һәм паникаға бирелмәҫкә саҡырҙы. Бынан алда "Башинформ" Рәсәйҙә экстремизм һәм армия тураһында ялған хәбәр өсөн мөлкәтте тартып алыу тураһында закон индерергә йыйыныуҙары хаҡында хәбәр иткәйне.

## ЭШЛЕЛӘР ҺӘМ...

**Башҡортостанда һайлап тикшереү мәғлүмәттәре буйынса 15 йәштән алып унан өлкән йәштәге эшсе көстәр һаны 2023 йылдың сентябрь - ноябрендә 1,939 миллиондан артҡан.**

Шуның 1,897 миллион тирәһе, йәғни 97,8 проценты эшләй. 42,5 мең кеше (2,2 процент) Халыҡ-ара хеҙмәт ойошмаһы критерийҙары буйынса эшһеҙ, йәғни бер ҡайҙа ла эшләмәй, килеме юҡ, йә эш эҙләгән һәм тикшереү үткән аҙнала эшкә сығырға әҙер булған. Башстат шундай мәғлүмәт бирҙе. Былтыр йыл аҙағында Башҡортостанда мәшғүллек үҙәгендә 12,6 мең кеше иҫәптә торған. Шуның 11,8 меңенең "эшһеҙ" статусы бар. Эшһеҙлек кимәле эшсе көстәр һанынан 0,6 процент тәшкил итә. 2023 йылда эшһеҙ статусын 2,6 мең кеше алған, 2,2 мең кеше эшкә урынлашҡан.Былтыр йыл аҙағында республика вакансиялар банкында 46,5 мең эш урыны булған. Был 2023 йылдың ноябре менән сағыштырғанда 3,9 процентҡа аҙыраҡ.

Дөйөм алғанда Рәсәйҙә былтыр сентябрь-ноябрҙә 76,302 миллион тирәһе кеше, ә Волга буйы федераль округында 14,752 миллион кеше эшләгән тип иҫәпләнгән.

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

## Арҡа мейеһе антеннаһын нисек ҡулланырға?

Һеҙҙең арҡа мейеһендәге электр "сымдарының" дөйөм оҙонлоғо 13 километр самаһы тәшкил итә. Электр тогы үткәргес аша үткәндә, уның тирәләй ток хәрәкәтенә перпендикуляр йүнәлештә магнит ҡыры барлыҡҡа килә. Электр моторҙары ошо принцип буйынса эшләй. Әммә иң ҡыҙығы - магнит ҡырына икенсе үткәргес килеп эләкһә, был үткәргестә лә ток барлыҡҡа килә, шул уҡ ваҡытта үткәргестәр бер-береһенә ҡағылмаҫҡа ла мөмкин.

Шуның кеүек, нимә тураһындалыр уйлаһағыҙ, нерв системағыҙҙа электр тогы туплайһығыҙ. Ток магнит ҡырын барлыҡҡа килтерә һәм ул үҙ сиратында башҡаларҙың нерв системаһында электр импульсы тыуҙыра (индукция юлы менән). Хәҙер ни өсөн юморҙың "йоғошло" икәнен аңланығыҙмы?

Артабан ҡарайыҡ: энергияғыҙ ни тиклем ҙур, магнит ҡырығыҙ шул тиклем көслөрәк һәм һеҙҙең сигналдарҙы башҡа кешеләр шул тиклем яҡшыраҡ ҡабул итә. Харизматик шәхестәр үҙҙәре лә аңламайынса ла ошо фәнни ҡанунды ҡуллана.

Кемгәләр шылтыратырға йыйынғанда ул кеше үҙе һеҙгә шылтырата икән, был осраҡлы түгел. Бары тик һеҙ алдан ошо кешенең магнит тулҡынына тоташаһығыҙ. Арҡа мейегеҙ - ысын антенна, уның ярҙамында һеҙ тулҡындарҙы, уйҙарҙы тотаһығыҙ һәм тапшыраһығыҙ. Арҡа мейеһендә ете төйөн (уларҙы бик йыш чакра йәки ҡулса тиҙәр) - нерв остары ныҡ тупланған урын бар. Чакра тураһында популяр китаптарҙа бик күп яҙыла, әммә бер ваҡытта ла фәнни күҙлектән ҡаралмай. Нервы үҙәктәренең һәр ҡайһыһының ғәмәлен кеҫә телефоны эше менән сағыштырырға мөмкин. Һәр чакра билдәле тирбәлеште ҡабул итеүгә программаланған. Иң аҫҡы төйөн үҙ-үҙеңде һаҡлау һәм хәүефһеҙлек тирбәлешен ҡабул итә. Ете энергетик төйөн ҡоймос, енес ағзалары тирәһендә - кендектән саҡ ҡына түбәнерәк, һелә (солнечное сплетение), йөрәк, тамаҡ, ҡаш араһы ("третий глаз") һәм баш түбәһендә урынлашҡан. Улар арҡа мейеһе менән ныҡлы бәйләнгәнлектән, энергетик тулҡындарҙы ҡабул итеү һәм тапшырыуҙың иң һөҙөмтәле механизмы булып тора. Яҡшы үҫеш кимәленә еткәндә улар алда яҙып киткән коллектив аң менән туранан-тура идеаль бәйләнеш тәьмин итә.

### Юл күрһәтеүсе йондоҙ

Фәнни принципты үҙләштергәс, уны ҡулланырға ла өйрәнергә кәрәк. Һеҙгә ике нәмәне эшләү зарур. Тәүҙә теләгегеҙгә тап килгән уйҙар тулҡынын һайларға, һуңынан, кире уйҙарҙы кәметеп, энергетик ҡеүәтегеҙҙе арттырыу ярҙамында уларҙы көсәйтергә. Еңел генә, шулай бит?

Теләктәрҙе һайлағанда юл күрһәтеүсе йондоҙ ысулын ҡулланырға тәҡдим итәм. Ҡағыҙ бите алығыҙ ҙа, пентаграмма (биш сатлы йондоҙ) төшөрөгөҙ. Беҙ дао йәки тигеҙлек эҙләгәнлектән, маҡсатыбыҙҙы асылған мөмкинлектәрҙең барыһын да үҙ эсенә алған биш категорияға бүлергә кәрәк. Йондоҙҙоң иң үргә ҡанатына рухиәт тип яҙығыҙ. Уң яҡ ҡанатта - кешеләр һәм тормош. Уң яҡтағы "аяҡ" - аҡса, әйберҙәр һәм ял. Һул "аяҡ" - шәхси үҫеш. Һул "ҡанат" - проекттар. Шул ғына. Хәҙер тағы ла биш бит ҡағыҙ алып, уларҙың һәр ҡайһыһының өҫкө яғына бер категорияны яҙып сығығыҙ. Эш барышында хронометр йәки сәғәт кәрәк буласаҡ.

**Пьер МОРАНСИ.**



### 18 МАРТА
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Под небом Крыма". К 10-летию воссоединения Крыма с Россией. [12+]
9.35 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 1.10, 1.55, 2.40, 3.05, 3.25, 4.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.45, 14.15, 17.15, 22.45 Информационный канал. [16+]
19.30 Вечерние новости (с субтитрами).
20.00 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Переведи её через Майдан". [16+]
0.15 Премьера. "Александр Проханов. Исповедь". [18+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Наши". [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Васнецова". [12+]
23.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия". [12+]
3.40 Т/с "Морозова". [16+]
4.35 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Башҡорт йыры" представляет… [12+]**
**10.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз). [12+]**
**11.45, 13.45, 17.45, 18.15, 4.00 Интервью. [12+]**
**12.00 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**12.15 Письма солдатам. [12+]**
**12.30, 3.00 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.00 Новости (на баш. яз).**
**14.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 "Этно-краса". [6+]**
**15.30 Преград. Net. [6+]**
**15.45 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**16.00 Башҡорттар. [6+]**
**16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Специальный репортаж. [12+]**
**19.00, 20.30, 4.15, 5.15 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Золотой фонд Башкирского телевидения. [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.30 Спектакль "Цыпленок из букваря". [12+]**

### 19 МАРТА
### ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Под небом Крыма". К 10-летию воссоединения Крыма с Россией. [12+]
9.35 "Жить здорово!" [16+]
10.25, 11.20, 14.25, 20.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.15 Новости (с субтитрами).
17.35 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.30 Митинг-концерт "10 лет в родной гавани". Трансляция с Красной площади. [0+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Переведи её через Майдан". [16+]
0.10, 0.55, 1.40, 2.25, 3.05, 3.15, 4.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Наши". [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Васнецова". [12+]
23.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия". [16+]
3.40 Т/с "Морозова". [16+]
4.35 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Ете егет". [12+]**
**10.45 Новости СВО (на баш. яз).**
**11.00, 23.00 Автограф. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 13.45, 18.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 3.15 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 "Ат уйнатып. Битва командиров". [6+]**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 "Бай". [12+]**
**16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00, 22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00, 23.45 Письма солдатам. [12+]**
**19.00, 20.30, 4.15, 5.15 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**1.30 Спектакль "Перед свадьбой". [12+]**

### 20 МАРТА
### СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Под небом Крыма". К 10-летию воссоединения Крыма с Россией. [12+]
9.35 "Жить здорово!" [16+]
10.25, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Переведи её через Майдан". [16+]
0.10 Премьера. "Шоу Вована и Лексуса". [16+]
0.50, 1.35, 2.20, 3.05, 3.15, 4.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Наши". [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Васнецова". [12+]
23.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия". [16+]
3.40 Т/с "Морозова". [16+]
4.35 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Күстәнәс. [12+]**
**10.30 Д/ф "Центр ментального здоровья". [12+]**
**10.45, 13.45, 17.45, 4.00 Интервью. [12+]**
**11.00 "Дорога к храму". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15 Патриот РФ. [12+]**
**12.30, 3.00 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 "КультУра". [6+]**
**15.30 МузКәрәҙ. [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Тормош. [12+]**
**19.00, 20.30, 4.15, 5.15 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байык-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**1.30 Спектакль "Не улетайте, журавли". [12+]**

### 21 МАРТА
### ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Под небом Крыма". К 10-летию воссоединения Крыма с Россией. [12+]
9.35 "Жить здорово!" [16+]
10.25, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Переведи её через Майдан". [16+]
0.10, 0.55, 1.40, 2.25, 3.05, 3.55 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Наши". [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Васнецова". [12+]
23.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия". [16+]
3.40 Т/с "Морозова". [16+]
4.35 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**10.30 Письма солдатам. [12+]**
**10.45 История одного села. [12+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 13.45, 16.15, 17.00, 4.00 Интервью. [12+]**
**12.00 Историческая среда. [12+]**
**12.30, 3.00 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.00 Новости (на баш. яз).**
**14.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Сулпылар. [6+]**
**15.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**16.00 Дознание. [16+]**
**16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.15 История признания. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00, 20.30, 4.15, 5.15 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.30 Спектакль "Судьба, выбранная мной". [12+]**

### 22 МАРТА
### ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 16.00 Новости.
9.05 "Под небом Крыма". К 10-летию воссоединения Крыма с Россией. [12+]
9.35 "Жить здорово!" [16+]
10.25, 11.20, 14.15, 17.10 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
15.10 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
16.15 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости.
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Голос". Новый сезон. [12+]
23.55 "Матадор". [16+]
0.55 Х/ф "Всё прошло хорошо". [18+]
3.05, 3.50, 4.35, 5.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
16.30 Прямой эфир. [16+]
21.30 "Удивительные люди. Новый сезон". [12+]
23.55 Торжественная церемония вручения Российской национальной музыкальной премии "Виктория".
2.10 Х/ф "Под прицелом любви". [16+]
4.10 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 18.00 "Йома". [6+]**
**10.30 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00, 13.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.15, 19.45, 6.00 История одного села. [12+]**
**12.30, 4.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 4.00 Новости (на баш. яз).**
**14.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Детей много не бывает. [6+]**
**15.45 "Этно-краса". [6+]**
**16.00 Аль-Фатиха. [12+]**
**16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Бал маленьких принцесс. [6+]**
**21.00, 22.15 Письма солдатам. [12+]**
**22.00 Своих не бросаем. [12+]**
**23.00 Концерт Радика Вальмухаметова. [12+]**
**1.30 Бәхетнамә. [12+]**
**2.30 Спектакль "Пылкие любовники". [12+]**

### 23 МАРТА
### СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "Наше всё". [12+]
11.05 Премьера. "ПроУют". [0+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Премьера. "Поехали!". [12+]
13.10 Х/ф "Ширли-мырли". [16+]
15.50 Д/ф "Ералаш". Детство строгого режима". К 75-летию со дня рождения Бориса Грачевского. [12+]
16.55 Премьера. "Я люблю мою страну". [0+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Премьера. "Эксклюзив". [16+]
19.10 "Михаил Задорнов: вся жизнь". [16+]
20.05 Премьера. "Кто хочет стать миллионером?". [12+]
21.00 "Время".
21.35 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. [16+]
23.50 К 135-летию со дня рождения Александра Вертинского. [16+]
1.45, 2.30, 3.15, 4.00, 4.45, 5.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.50 "В кругу друзей".
12.50 "Доктор Мясников". [12+]
14.50 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Я обещаю молчать". [16+]
0.55 Х/ф "Училка". [12+]
4.20 Х/ф "Мой белый и пушистый". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**8.00 "Бай". [12+]**
**8.30 "Ете егет". [12+]**
**9.15, 12.15 Письма солдатам. [12+]**
**9.30 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**9.45 Своих не бросаем. [12+]**
**10.00 Детей много не бывает. [6+]**
**10.30 Елкән. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 "Ат уйнатып. Битва командиров". [6+]**
**11.45 МузКәрәҙ. [6+]**
**12.30 Күстәнәс. [12+]**
**13.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00, 4.45 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Концерт Государственного академического симфонического оркестра РБ. [12+]**
**18.15, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**19.00 Специальный репортаж. [16+]**
**19.15, 2.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 "Байык-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00, 3.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.45 "Ҡурай-шоу". [12+]**
**0.15 Спектакль "Посетитель". [12+]**
**1.45 Счастливый час. [12+]**
**4.00 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**5.45 Аль-Фатиха. [6+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

### 24 МАРТА
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10, 23.50, 0.35, 1.20, 2.05, 2.50, 3.35 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
9.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.15 Премьера. "Играем свадьбу!". [12+]
11.05 "Жизнь других". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Премьера. "Повара на колесах". [12+]
13.10 "Видели видео?" [0+]
14.50 Х/ф "Когда деревья были большими". К 100-летию со дня рождения Льва Кулиджанова. [12+]
16.45 Премьера. "Большая история". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Лучше всех!" Новый сезон. [0+]
21.00 "Время".
23.00 Д/ф "Крым. Как это было". К 10-летию воссоединения Крыма с Россией. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

6.10, 1.05 Х/ф "Чужие дети". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
12.00 Большие перемены.
13.00 Х/ф "Всё, что захочешь". [12+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.47 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Йома". [6+]**
**8.15 Тормош. [12+]**
**8.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.00 Орнамент. [12+]**
**9.15 Письма солдатам. [12+]**
**9.30 Новости СВО (на баш. яз).**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Книга сказок. [6+]**
**10.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Сулпылар. [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**13.15 "100 имен Башкортостана". [6+]**
**13.45, 5.45 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.30, 3.15 Дорога к храму. [6+]**
**16.00 Честно говоря. [12+]**
**16.45 Гала-открытие XXXII Всероссийского фестиваля композиторов Республик Поволжья и Приуралья. [12+]**
**19.00 Патриот РФ. [12+]**
**19.15 Әлләсе… [6+]**
**20.00 Автограф. [12+]**
**20.30 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30, 3.45 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15, 2.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Концерт Назифы Кадыровой. [12+]**
**0.30 Спектакль "Дурочка". [12+]**
**4.30 Счастливый час. [12+]**
**5.30 История одного села. [12+]**
**6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1445 һижри йыл.*

| Март (Рамаҙан) | Сәхәрҙең ахырғы ваҡыты | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 18 (8) дүшәмбе | 5:24 | 5:39 | 7:24 | 13:30 | 17:24 | 19:24 | 21:11 |
| 19 (9) шишәмбе | 5:22 | 5:36 | 7:22 | 13:30 | 17:25 | 19:26 | 21:13 |
| 20 (10) шаршамбы | 5:19 | 5:33 | 7:19 | 13:30 | 17:27 | 19:28 | 21:16 |
| 21 (11) кесе йома | 5:17 | 5:30 | 7:17 | 13:30 | 17:29 | 19:30 | 21:18 |
| 22 (12) йома | 5:14 | 5:27 | 7:14 | 13:30 | 17:30 | 19:32 | 21:21 |
| 23 (13) шәмбе | 5:12 | 5:24 | 7:12 | 13:30 | 17:32 | 19:34 | 21:23 |
| 24 (14) йәкшәмбе | 5:09 | 5:21 | 7:09 | 13:30 | 17:33 | 19:36 | 21:26 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ Йыл һайын 13 млн гектарҙан ашыу урман ҡырҡыла, был яҡынса Англияның майҙанына тиң.



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 21 МАРТ - ХАЛЫҠ-АРА УРМАНДАР КӨНӨ

**Халыҡ-ара урмандар көнө йәки Бөтә донъя урмандарҙы һаҡлау көнө 1971 йылда булдырыла һәм шунан бирле йыл да билдәләнә. Был башланғыс менән Ауыл хужалығының Европа конфедерацияһы сығыш яһай. Әйткәндәй, тәүҙә байрамды Көньяҡ ярымшарҙа көҙгө көн менән төн тигеҙләшкәндә, ә Төньяҡ ярымшарҙа яҙғы көн менән төн тигеҙләшкәндә үткәреү ҡарала. Әммә 2012 йылда Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы Генераль Ассамблеяһы ҡарары менән 21 март датаһы раҫлана.**

Был байрам кешелек өсөн урмандарҙың мөһимлеге тураһында тағы бер тапҡыр хәтерләтеүгә сәбәп, сөнки уларҙы һаҡлау мөһим экологик мәсьәләләрҙең береһе. Бөгөнгө көндә планетабыҙҙағы урмандарҙың дөйөм майҙаны 38 млн.кв.км. тирәһе (был ҡоро ерҙең өстән бер өлөшөн тәшкил итә), шуларҙың 13 проценты һаҡлаулы тәбиғәт биләмәләренә ҡарай. Әммә йылдан-йыл донъялағы урмандар майҙаны кәмей, Ер йылына 1,5 гектар кеше ҡулы теймәгән урманды юғалта.

Рәсәйҙә лә был байрам билдәләнә. Сөнки урмандар - илдең милли байлығы, донъялағы урман майҙандарының биштән бер өлөшө тиерлек һәм яҡынса шул тирә ағас материалдары запасы Рәсәйгә тура килә. Был дәүләтебеҙ өсөн урман ҡиммәтле сырье сығанағы булараҡ ҡына түгел, ә Ерҙә йәшәү шарттарын билдәләүсе биосфера компоненты рәүешендә лә мөһим икәненә дәлил.

- Ҡоро ерҙә йәшәгән тереклектең 80 проценты урмандарҙа ышыҡ таба.
- Йыл һайын 13 млн гектарҙан ашыу урман ҡырҡыла, был яҡынса Англияның майҙанына тиң.
- Башҡортостан территорияһының 40 проценттан артығы урманлы, күберәк япраҡлы ағастар үҫә. Әммә гел улай булмаған: XIX быуат уртаһына тиклем республиканың 70 процент ерендә урман булған һәм күбеһенсә ылыҫлы, ҡиммәтле ҡаты ағастар үҫкән. Әммә ағастарҙы күп ҡырҡыу һәм яңыларын ултыртмау сәбәпле, уларҙың һаны ике тапҡырға кәмегән.
- Башҡорт урмандарында 20 тирәһе төр ағас үҫә. Ҡайын 24,9 процент, йүкә - 19,1, ҡарағай - 13,6, уҫаҡ - 13,2, имән - 4,8, шыршы - 4,7, саған - 2,8, аҡ ерек - 3,3, ҡара ерек, ҡарағас һәм йыла һымаҡтар - 0,8, аҡ шыршы - 0,7, тирәк 0,55 процент урын биләй.




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**9-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Миләүшә. Нөктә. Умырзая. Трюм. Башмаҡ. Барбарис. Лифт. Ата. Ҡылсыҡ. Елкән. Мамыҡ. Гәрнис. Сикә. Өкө. Йөргөнсө. Таба. Урҙа. Трир. Тибр. Роза. Наян.

**Вертикаль буйынса:** Бәпембә. Терһәк. Ҡуй. Насар. Умарта. Гитара. Мәк. Ландыш. Сама. Суртан. Зебра. Өтөр. Әсә. Ябалаҡ. Гөлбаҙран. Лорнет. Метис. Ҡоҙоҡ. Сыра.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**23-24 март Премьера! "Бөйрәкәй I өлөш. Бөйрәкәй II өлөш"** (Т. Ғарипова), драма. 18.00 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**19 март "Мин башҡорт телен өйрәнәм"** (Л. Исҡужина), әкиәт. 12.00 0+

**20 март "Айболит и Бармалей"** (К. Чуковский), мюзикл. 11.00 0+

**22 март "Дейеүкәй"** (С. Лебо). 12+

**23 март "У ковчега в восемь"** (У. Хуб), ғаилә өсөн спектакль. 12.00 6+

**24 март "Башҡорт туйы"** (М. Буранғолов), драма. 18.00 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**21 март "Кукольная кухня"** (Н. Беззубова, А. Верхоземский). 18.00 0+

**22 март "Коза-дереза"** (М. Супонин). 18.00 0+

**23 март "Красная шапочка"** (Ш. Перро). 12.00, 15.00 0+

**24 март "Вечно эта 345-я!"** (Ж. Кусаинова). 12.00, 15.00 12+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**22 март "Халҡым мираҫы"** концерт. 6+

**24 март "Джаз и не только"** ғаилә өсөн йәкшәмбе концерты. 0+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**19 март "№13"** (Р. Куни), суперкомедия. 16+

**21 март "Кисер мине, әсәй!"** (Р. Батулла), моңһоу комедия. 12+

**22 март "Ярлыҡау"** (М. Кәрим, И. Ҡаҙаҡбаев инсц.), баллада. 12+

**23 март "В стародавние времена"** (М. Багаев), музыкаль әкиәт. 13.00 6+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**"Приключения лесного Эха"** экология буйынса әкиәт-дәрес (11.00 0+) һәм **"Әлдермештән Әлмәндәр"** (Т. Миңнуллин), фантасмагорияһы (19.00 12+) менән **18 март -** Иглин, **19 март -** Ҡырмыҫҡалы, **20 март -** Архангел ауылдарында, **21 март -** Өфө ҡалаһында гастролдәр.

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**21 март Премьера! "Йырла, бейе туған халҡым, Гөл-сәскә ат, Ватаным!"** концерт. 6+

**22 март "Ҡатын түгел - аждаһа!"** (Д. Салихов), комедия. 16+

**23 март "Гөлнара"** (Ф. Бүләков), драма. 18.00 12+

**24 март "Маленькая история о Маленьком Муке"** (С. Астраханцев), әкиәт. 12.00 0+

**"Нисек кейәүгә сығырға?"** (Н. Ғәйетбаев), комедия. 18.00 12+

## БР Милли музейы

**22 март** Ротангтан кашпо үреү буйынса оҫталыҡ дәресе. 14.00 12+

**23 март** Музей буйлап экскурсия. 15.00 6+

ШУНДАЙ ЯҢЫЛЫҠ



# МӘҘӘНИ ФОРУМДА...

**Ошо көндәрҙә Өфөлә "АРТ-Ҡоролтай" мәҙәни форумы үтте, ул дүртенсе тапҡыр ойошторола. Сарала Башҡортостандың һәр муниципалитетынан, шулай уҡ Ырымбур, Волгоград өлкәләре, Мәскәү, Санкт-Петербург, Красноярск крайы, Беларусь, Ҡаҙағстан, Үзбәкстан, Абхазия һәм Ҡытайҙан килгән 600-ҙән ашыу кеше ҡатнашты.**

"Арт-Ҡоролтай"ҙа ҡатнашыусыларҙы видеобәйләнеш аша сәләмләп, республика Башлығы Радий Хәбиров федераль ярҙам алған проекттарҙы һанап үтте, улар араһында Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрын айырып әйтте, 2026-2028 йылдарҙа Өфөләге циркка аҡса бүленәсәк, Башҡорт опера һәм балет театрының уңышлы эшмәкәрлеге һәм "Башҡорт киноһы" феномены, яңы музейҙар булдырылыуы тураһында ла телгә алды. Башҡортостан Башлығының "Ауыл мәҙәниәт хеҙмәткәре" федераль программаһы менән бер рәттән, республиканың үҙ программаһы ла бойомға ашырылыуын дауам итәсәге тураһындағы һүҙҙәре көслө алҡыштарға күмелде. Соңғы республика ауыл мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренә 3 йыл ярҙам итеү осоронда 120 белгес дөйөм хаҡы 75 млн һумлыҡ торлаҡ шарттарын яҡшыртҡан. Ә 2023 йылдан субсидия күләме ике тапҡырға арттырылып, 1 млн һум тәшкил итә. Уны хәҙер автомобиль һатып алыуға ла тотонорға була.

"АРТ-Ҡоролтай"ҙа Рәсәйҙең мәҙәниәт министры Ольга Любимова ла ҡатнашты. Ул яңыртылған Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрын һәм З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтын барып күрҙе, Рәсәй Геройы М. Шайморатов һәйкәленә сәскәләр һалды.

- Башҡортостан "Мәҙәниәт" милли проектында әүҙем ҡатнаша, беҙҙең тоғро партнерыбыҙ, бер нисә йүнәлештә лидер. Биш йылда республикала 33 кино залы йыһазландырылған, 16 модель китапхана асылған, 34 сәнғәт мәктәбенә уйын ҡоралдары һәм кәрәкле ҡоралдар алынған, 10 автоклуб барлыҡҡа килгән. "Пушкин картаһы" федераль программаһын бойомға ашырыу һөҙөмтәһендә билеттар һатыу буйынса Рәсәйҙә 3-сө урынды йыл да ышаныслы биләйһегеҙ. Ә Сибай театр-концерт берләшмәһе был өлкәлә Рәсәйҙең иң яҡшы мәҙәни учреждениелары иҫәбенә инә. Был ысынлап та бик лайыҡлы һөҙөмтә, - тине министр форумдың пленар ултырышында сығыш яһап һәм Башҡортостан бында йәшәүсе һәр халыҡтың милли мәҙәниәте һәм йолаларына һаҡсыл ҡарауҙа үрнәк булып тора, тип билдәләне.

Башҡортостан Хөкүмәтенең Премьер-министры Андрей Назаров Ольга Любимоваға Рәсәй Мәҙәниәт министрлығының "Өфө-II ҡаласығы" территорияһында археологик депозитарийҙың төҙөлөш проектын эшләшеүҙә ярҙам күрһәтеүен һорап мөрәжәғәт итте. Шулай уҡ быйыл күп саралар Өфөнөң юбилейына арналасаҡ тине.

Форумда быйылғы йылдан "Туғанлыҡ" театраль фестивале яңынан үткәрелә башлаясағы иғлан ителде, ул майға тәғәйенләнгән. Июнда Бөләкәй ҡалалар театры фестивале, Рәсәй һәм Ҡаҙағстан төбәк-ара хеҙмәттәшлегенең XX форумы үтә.

һАЙ-һАЙ-һАЙ!

# МИЛЛИ МУЗЕЙҘА...

## ҡыҙыҡлы күргәҙмә эшләй



**Башҡортостандың Милли музейында Ғаилә йылына арналған "Башҡорт ҡатын-ҡыҙы тормошо" күргәҙмәһе эшләй.**

Күргәҙмә "Бәпес", "Ҡыҙсыҡ", "Ҡыҙ", "Килен", "Әсәй", "Өләсәй" тип исемләнгән бер нисә бүлектән тора һәм башҡорт ҡатын-ҡыҙының тыуғандан алып оло йәшкә еткәнгә тиклемге тормошон сағылдыра. Унда балаға исем ҡушыу йолаһы нисек атҡарылғанын күрергә, бишек йырҙарын өйрәнергә, ҡыҙ балаға ниндәй башҡорт исемдәре ҡушыуҙары тураһында мәғлүмәт иштергә була. Шулай уҡ күргәҙмәлә ҡыҙҙар уйнаған уйындар, ҡул эштәрен башҡарғанда ҡулланылған ҡоралдар менән танышырға ла мөмкин.

Кейәүгә сығыу, туй үткәреү, килен булып төшөү - ҡыҙҙарҙың тормошонда ҙур роль уйнай. Күргәҙмәлә башҡорт ҡыҙҙарының яңы статусы - килен булыуы менән бәйле йолаларҙы башҡарғанда ҡулланылған әйберҙәр ҙә урын алған. Мәҫәлән, киленгә һыу юлын күрһәтеү йолаһында кәрәкле биҙрә, көйәнтә һәм музей фондындағы башҡа экспонаттарҙы күрергә мөмкин.

Ҡатын-ҡыҙ ырыуҙы дауам итеүсе. Быуаттар дауамында ҡатын-ҡыҙ ғаилә нигеҙҙәрен, халыҡ йолаларын һаҡлап һәм яҡлап тороусы символ булып һанала. Шуға күрә күргәҙмәлә башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының аш-һыу әҙерләү, тормош көтөү менән бәйле ҡул тирмәне, ағас кәсәләр, иләк, тәртешкә, ҡыҫҡыс кеүек әйберҙәр ҙә урын алған.

Музей фондында һаҡланған уникаль экспонаттар һәм башҡа предметтар ҡатын-ҡыҙға ҡағылышлы башҡорт йолаларын, гөрөф-ғәҙәттәрен, көнкүреш үҙенсәлектәрен асыҡ сағылдыра. Мәҫәлән, күргәҙмәлә ҡайындан эшләнгән бишек, бетеү, балаҫтар, һандыҡ, янсыҡ, аҙыҡ-түлекте һаҡлау өсөн 20-се быуат башына ҡараған һауыт, көбө, намаҙлыҡ һәм башҡа әйберҙәрҙе күрергә мөмкин.

- Күргәҙмә иғтибарға лайыҡ, уны ни тиклем күберәк өфөләр һәм ҡала ҡунаҡтары ҡарай, шул тиклем яҡшыраҡ. Күргәҙмә ҡыҙыҡлы, сағыу һәм үҙенсәлекле. Был экспозиция үҙенең йөкмәткеһе менән уникаль, унда һәр ҡатын-ҡыҙ үҙе өсөн ниндәйҙер мәғлүмәт табасаҡ, - тип белдерә Башҡортостан Милли музейы директоры Рөстәм Исхаҡов.

**Гөлназ САФУАНОВА.**

ТЕЛҺӨЙӘР

# ҺУПАЛАҠ МАЙ

**Бөгөн ҡабатлаясаҡ һүҙҙәр ҙә йәнле телмәрҙә бик килешле яңғырарына шик юҡ. Үҙҙәрен иҫтә ҡалдырыу ҙа ауыр түгел.**

**Һуйҙай.** "Оҙон буйлы, ябыҡ, килбәтһеҙерәк кәүҙә-ҡиәфәтле" тигән теҙмәне ошо бер һүҙ ҙә алыштыра ала. *Һуйҙай кеше. Баланың һуйҙай үсмергә әйләнгәнен һиҙмәй ҙә ҡалғандар.*

**Һум.** Һум тигәндә был юлы аҡсаны күҙҙә тотмайбыҙ. Һум тағы ла - "Бөтөн, тотошлай, эшкәртелмәгән, бер нәмә лә ҡушылмаған" тигән күп мәғәнәләрҙә билдерә. *Һум ағас. Һум алтын. Һум тимер.*

**Һупалаҡ.** Һупалаҡтың синонимы - йомарлам. *Һыҡы ҡар һупалағы. Ҡаймаҡтан бер һупалаҡ май бешелде.*

**Һүҙләү.** Элек "һөйләү" урынына "һүҙләү" тип тә һөйләгәндәр. Мофайын, тәүгеһе шул икенсеһенән килеп сыҡҡандыр ҙа. *Миҫалға туҡталайыҡ: Һүҙләр алдынан фекер туплау. Балага әкиәт һүҙләү.*

**Һүрмә.** Сепрәк балаҫты ҡайһы бер ерҙә "һүрмә" тиҙәр. *Сағыу биҙәкле һүрмә. Иҙәнгә һүрмә түшәү.*

**Шулай итеп, ҡабатлаған һүҙҙәр оҫта һүҙләүгә көүәт бирһен.**

**НУРБИКӘ әҙерләнә.**

**(Дауамы. Башы 45-се һанда).**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠАБЫҠ ҺУҒЫП...

## ҡарға ҡурҡытып булмай

Һарауһыҙға һалам бирһәң, һорай-һорай һороға ҡалдырыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Алға ҡарамағандар... артта ҡала.

**(Мексика халыҡ мәҡәле).**

Бәләләр тимерсенең сүкешенә оҡшаш: тәүҙә емереп ташлай, шунан яңынан сүкеп барлыҡҡа килтерә.

**(Карлина Бови).**

Идеялар үҙе түгел, ә тойғоға әйләнгәс кенә донъяны үҙгәртә ала.

**(Густав ле Бон).**

Барыһы ла уйҙарыбыҙҙан тора: ул тормошобоҙҙо йә тамуҡҡа, йә ожмахҡа әйләндерә ала.

**(Марк Аврелий).**

Шәмендә өрөп һүндергән ел мейесендә ҙур ут тоҡандырыуы ла бар.

**(Пьер Бомарше).**

Аҡылдан шашып яратыуҙан ҡурҡ, ысын мөхәббәт асыҡ һәм тыныс була.

**(Генри Торо).**

Рауза сәскәһен яратаһың икән, уның энәләренә лә түҙемле бул.

**(Фарсы мәҡәле).**

Йәшәгән йорт - йортоғоҙ түгел, һеҙҙе аңлаусылар йәшәгән йорт - һеҙҙең йорт.

**(Кристиан Морген).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ҡояш байығанын көтәтеп, тирә-йүн менән һоҡланып ултырған бер мәлдә Уҡытыусыға бер кеше килә һәм үҙ ярмышына зарлана башлай. "Минең ярмышым тормош мәшәҡәттәре диңгеҙендә батып барған тишек кәмәгә оҡшаған", - ти ул. Уҡытыусы ҡарашын диңгеҙ киңлегенә төбәп, былай ти:**

**- Ошо диңгеҙҙә күпме кеше батып һәләк булған, ә һин тере. Ошондағы балыҡтарға ем булған кешеләр һинең ярмышыңа көнләшер генә ине...**

**Ҡояштың һуңғы нурҙары байығас, Уҡытыусы урынынан тороп, ҡалаға табан атлай. Теге кеше лә һүҙһеҙ генә уның артынан эйәрә. Уның уйлана биргәнен һәм һүҙҙе йомғаҡлап ҡуйырға кәрәк икәнен аңлап, Уҡытыусы дауам итә:**

**- Һыуға сумған кеше түгел, ә йөҙә алмаған кеше батып үлә. Ҡайһы бер һыуға сумған кешеләр хатта алтын балыҡ тешләп алып та йөҙөп сығалар..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Кин коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәррирәт:**
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "Полиграфия" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (3476) 35-31-02. (453261, БР, Салауат ҡалаһы, Ленин ур., 5/11).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир 253-25-44**
**Хәбәрселәр 252-39-99**
**Матбуғат таратыу 252-39-99**

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
14 март 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2750
Заказ - 111532